*Бәхәс формулаһы шулай: һарыҡ дөйөм аңлашылмаусылыҡ тураһында һөйләй. Ҡуян дөйөм икеләнеүҙе еткерә. Һуңынан арыҫлан аяғүрә баҫа һәм дөйөм фекерҙе белдерә.*
*(Феликс Кривин).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

15 - 21 МАЙ (ҺАБАНАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru
2002 йылдан башлап сыға
Һатыуҙа хаҡы ирекле
№20 (386)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Йоҙроҡ менән һуғышыуҙы...** башҡорт егеттәре лә үҙ итә



5

**Тәфтиләүҙәй ҡатилға...** ташҡа яҙылған ҡарғыш таман



6-7

**Иҫәпленең... халҡы теүәл,** йәки Башҡорттарҙың хәҙерге демографик хәле тураһында



8-9

**Ябай кешенең...** ҡатмарлы фекерҙәре...



11

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Тиҙҙән утәсәк III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында күтәрергә кәрәкле тип һанаған иң мөһим мәсьәләне һеҙ низә күрәһегеҙ?

*Радик ӨМӨТКУЖИН, Әбйәлил районы Хәлил урта мәктәбе уҡытыусыһы:*

- Халҡыбыҙҙа берҙәмлек булһа, милләтебеҙ алдындағы барлыҡ мәсьәләләр ҙә хәл ителер ине. Шуға күрә был ҡоролтайҙа мин ошо юҫыҡтағы мәсьәләләр күтәрелеүен теләр инем. Үкенескә ҡаршы, халыҡтың берҙәмлеген законлар ярҙамында ғына ойошторол булмай шул. Беҙ күберәк рәсми эштәр менән шөғөлләнәбеҙ буғай, халыҡтың үҙе менән эш итеү һүлпән ҡуйылған. Шул уҡ ваҡытта халыҡ менән эш итеү алымдары закон менән һәр саҡта ла тап килмәүе лә бар. Дәүләт Думаһында күпселекте тәшкил итеүсе "Берҙәм Рәсәй" фракцияһының федерация составындағы республикалар, уларҙа йәшәүсе милләттәр хоҡуҡтарын танымаҫҡа тырышыуы бер кемгә лә сер түгел. Шулай булғас, ҡоролтайҙа күтәреләсәк иң мөһим мәсьәләне мин республикабыҙҙы, Рәсәй Федерализмын һаҡлап ҡалыу юҫығында күрәм. Беҙ - Рәсәй Федерализмы плацдармы һәм беҙҙең республика менән үҙәктең мөнәсәбәте Рәсәй Федерализмы киләсәген дә билдәләйәсәк. Беҙ республикабыҙҙан ситтә йәшәүсе милләттәштәребеҙҙең рухи халәте менән бик яҡшы тынышбыҙ, улар йылдан-йыл үҙ милли асылынан ситләшә, башҡа милләт мәҙәниәте йоғонтоһона бирелә. Рәсәй Федерацияһы законлары уларҙың рухи донъяһын һаҡлауға, үҫтереүгә хеҙмәт итмәй. Ошо миҫал нигеҙендә генә лә беҙ үҙебеҙҙең алда торған иң мөһим мәсьәләне бик тәрән аңлайбыҙ.

*Баймөхәммәт ҒИЗЗӘТУЛЛИН, Алтын ҡасабаһы имам-хатибы:*

-Милләтһеҙ республика булмаған кеүек, динһеҙ милләт тә юҡ. Тимәк, республикабыҙҙың һаҡланып ҡалыуы ла динебеҙгә бәйле буласаҡ. Юҡҡа ғына Әхмәтзәки Вәлиди Туған телебеҙҙе һәм динебеҙҙе һаҡлауға өндәмәгән. Һуңғы ваҡытта мосолманса кейенеп, дини йола атҡарып, үҙҙәре ҡыйыҡ эш менән шөғөлләнеүселәр күбәйҙе. Бигерәк тә дингә килеүҙе һылтау итеп алып, бер ерҙә лә эшләмәүсе ир-аттар арта барыуы йәнде әсетә. Улар мәсеткә күберәген йомаларҙа аш ашарға ғына йөрөй. Яулыҡ ябынып, үҙҙәре һыра эсеп йөрөүсе ҡыҙҙар ҙа юҡ түгел. Дин беҙгә иң беренсе нәүбәттә милләтебеҙҙең әхлағын, уның сафлығын һаҡлап ҡалыу өсөн кәрәк. Беҙҙең алда ниндәй генә ауырлыҡтар, кәртәләр тормаһын, әхлаҡ, сафлыҡ ярҙамында беҙ уларҙы еңеп сыға аласаҡбыҙ. Аллаһы Тәғәлә беҙҙең менән!

**Әмир ҒҮМӘРОВ әҙерләне.**

БАШҠОРТ ДОНЪЯҺЫ



Хәким ҒИЛӘЖЕВ.

### БАШҠОРТ ТЕЛЕ

*Беҙҙе илле иткән тел ул;*
*Беҙҙе билле иткән тел ул;*
*Беҙҙе йәнле иткән тел ул;*
*Беҙҙе йүнле иткән тел ул, -*
*һай, афарин, башҡорт теле!*

*Беҙҙе батыр иткән тел ул;*
*Беҙҙе матур иткән тел ул;*
*Беҙҙе ғорур иткән тел ул;*
*Беҙҙе сабыр иткән тел ул, -*
*һай, афарин, башҡорт теле!*

*Уралды төйәк иткән тел ул;*
*Беҙҙе һөйәк иткән тел ул;*
*Беҙҙе көйөк иткән тел ул;*
*Беҙҙе бөйөк иткән тел ул, -*
*һай, афарин, башҡорт теле!*

*Йөҙ халыҡты аңлар тел ул;*
*Изгелекте һанлар тел ул;*
*Моңло, йырлы, сәсән тел ул;*
*Утты-һыуҙы кискән тел ул, -*
*һай, афарин, башҡорт теле!*

*Мең-мең йылдар үткән тел ул;*
*Мең киҫелеп үҫкән тел ул;*
*Ҡылды ҡырҡҡа киҫкән тел ул;*
*Дуҫлыҡты аманат иткән тел ул,-*
*һай, афарин, башҡорт теле!*

МОСОЛМАНДАРҒА ӨНДӘШЕҮ

# ӘРУАХТАРЫБЫҘ... тереләрҙән доға көтә

**Йыл һайын төрлө милләтле мосолман халҡы ике ҙур байрам уҙғара: Ураҙа һәм Ҡорбан ғәйете. Был байрамдар, ниндәй милләттән булыуыңа ҡарамаҫтан, мосолмандар дуҫлығының, берҙәмлегенең сағыу күрһәткесе булып тора. Байрамдар хәйер-саҙаҡа өләшеү, ҡорбан салыу, туғандар менән осрашыу, дуҫлашыу, бүләктәр бирешеү менән үтә. Был көндәрҙә мәрхүмдәр иҫкә алына, Аллаһы Тәғәләнән ярлыҡау һорап, доғалар уҡыла.**

Ата-бабаларыбыҙ, инәй-өләсәйҙәребеҙ фани донъяға алданмай, ауырлыҡтарҙан ҡурҡмай, Ислам диненә һәр саҡ тоғро ҡалып йәшәгән. Һөйәнтөҙ фажиғәһендәгесә, йөҙәрләгән ауылдарҙың яндырылыуы ла, Киҫәкбикә аҙмышындағы һымаҡ, көсләп суҡындырырға маташыуҙар ҙа, тәрмә һәм башҡа язалар ҙа халҡыбыҙҙы динебеҙҙән айыра алмаған. Милләттәштәребеҙҙең иман ныҡлығына әүлиәләребеҙ тарихы асыҡ дәлил булып тора. Ололар һөйләгәндәргә ныҒыраҡ ҡолаҡ һалығыҙ әле: "Әүлиә ҡәбере", "Әүлиә шишмәһе" тигән атамалар боронғо башҡорт ауылдарының һәр ҡайһыһында тиерлек телгә алына.

Мөхәммәт бәйғәмбәребеҙ әйткән: "Ҡәберҙә ятҡан мәрхүм, тыны бөтөп, ярҙамға саҡырыусыға оҡшаш. Ул тереләрҙән доға көтә. Уның өсөн доға шундай ҙур бүләк, гүйә, уға бөтә донъяны биргәндәр". Шуға ла беҙгә, башҡорттарға, шаһиттарҙың хәтер көнөн булдырыу көнүҙәк мәсьәлә. Доға уҡыу әруахтар өсөн иң ҙур бүләк булһа, беҙҙең өсөн сауаплы, йәш быуынды тәрбиәләү, фәһем-һабаҡ бирер ғәмәл булып тора. Шулай уҡ ул башҡорттоң 14 быуат дауамында Аллаһы Тәғәлә ярҙамы менән бөтә ауырлыҡтарҙы еңеп сыға алғанын, киләсәге булғанын да дәлилләр сара ул. Былтыр ундай хәтер көндәре, мосолман байрамдары республиканың Ишембай, Хәйбулла, Баймаҡ райондарында булып үтте, бик күп диндәштәрҙе туплаНы. Уны быйыл күберәк төбәктәрҙә үткәрергә насип итһен.

Йыл һайын Салауат йыйыны үтә. Быйыл ул Ишембай районында, башҡорт өсөн изге урында - Торатау буйында үтә. Ошо йыйынды шаһиттарыбыҙға, әүлиәләребеҙгә, барлыҡ әруахтарыбыҙға доға ҡылып, ҡорбан салып башлаһаҡ, бигерәк тә хәйерле эш булыр ине, тигән уйҙамын.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**22 майҙа республиканың бер төркөм зыялылары Учалы районының Әүеш тауындағы Әүлиә ҡәберенә зыярат ҡылырға барырға йыйына.**

**Сәғит хажи ИСМӘҒИЛЕВ.**

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# "ҠАТНАШ НИКАХ ҠОРОУ... үҙеңә лә, милләтеңә лә юғалтыу ул"

**Гәзиттең үткән бер һанында ошондай баш аҫтында тетрәндергес мәҡәлә баҫылды. Ҡатнаш ғаилә ҡоргандарҙың фажиғәле яҙмышы тураһында ине ул.**

Ҡатнаш никах ҡороусы йәштәр һәр ваҡыт мөхәббәткә һылтана, ә атай-әсәйҙәр: "Әйтеп ҡараныҡ та ул, хәҙергеләр тыңламай бит", - тип уфтана. Әлбиттә, көршәк ватылғас, тукмауҙың бер генә лә файҙаһы юҡ. Әммә ғаилә ҡорорға теләүсе йәштәргә шуны әйткем килә:

Беренсенән. Мөхәббәт күктәрҙә ярала, бер бөтөн икегә бүленеп бар була ла аҙаҡ табыша, тиҙәр. Бәлки, шулайҙыр ҙа. Әммә, Тәбиғәт (Хоҙай, Алла) кешелек донъяһы халыҡтарын милләттәргә бүлеп ятҡан һәм уны һәр төрлө саралар менән (тел, традиция, ғөрөф-ғәҙәт, моң үҙенсәлеге) һаҡларға тырышҡан икән, мотлаҡ ҡауышырға тейеш булған ике яртыны, моғайын, үҙ ҡануныарына ҡаршы килеп, ике төрлө милләт мөхитенә бүлмәгәндер.

Икенсенән. Ғаилә ҡороуҙың төп маҡсаттарының береһе - артабан ишәйеү, кешелек донъяһын дауам итеү. Тимәк, балалар бағыу. Ә был бик ҡатмарлы бурыс. Кешенең тышҡы ҡиәфәтен, үҙен тотошон, аралашыу әҙәбен, хеҙмәткә, тәбиғәткә, белемгә мөнәсәбәтен тәрбиәләүҙә бөтөн кешелек донъяһы халыҡтары өсөн уртаҡ ҡағиҙәләр булһа ла, иң ҡатмарлыһы - күңел донъяһы тәрбиәләү. Эске тойғолар донъяһы фәҡәт үҙ милләтеңдең ҡиммәттәре нигеҙендә генә тәрбиәләнә. Эске тәрбиә сифаттары бала тыуғанда уҡ уның ҡанында, күҙәнәктәрендә, булмышында туплана. Үҙгәртергә маташҡанда ла фәҡәт үҙ ҡалыбы эсендә генә камиллаштырырға мөмкин. Туған моң, холоҡ-фиғел, һәләт - тәрбиә менән булдырып булмай торған төшөнсәләр. Улар баланың тәбиғәтенә, булмышына ярала башлағанда уҡ һалына. Хатта, медиктарҙың раҫлауынса, ашаған ризыҡтағы, йәки атай менән әсәйҙең бала тыуғанға тиклем туҡланыуындағы айырма ла бала сәләмәтлегенә бик ныҡ тәьсир итә. Шулай булғас, ни эшләп бала күңелен бүлгеләп, теткеләп маташырға?..

Өйләнешкәндә төрлө яҡлап уйларға кәрәк. Мөхәббәтләнеү өс баҫҡыстан ғибәрәт: күҙ күрә, күңел елпенә, йөрәк хәл итә. Ана шул иң тәүге мәлдә, күҙ күргән осорҙа, ныҡлап, һәр яҡлап уйлаған йәш кеше аҙаҡ үкенмәй ҙә, балаһын да аптырауға һалмай.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

ИҒТИБАР!

# ХӨРМӘТЛЕ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



**Бишбүләк районының башҡорт теле уҡытыусылары.**

**Яҙғы, йәйге мәшәҡәттәр башланмаҫ борон, бөгөн-иртәгә 2010 йылдың икенсе яртыһы йыллығы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып ҡалығыҙ, тип саҡырабыҙ һеҙҙе. Яңы хаҡтарҙы иғлан итәбеҙ: 50665 индекслы "Киске Өфө" алты айға 318 һум 24 тин, 50673 индекслыһы (предприятие һәм ойошмалар өсөн) 354 һум 24 тин тора.**

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы дауам итә.**

Әйҙәгеҙ, ауылдарҙа йәшәүсе ата-әсәйҙәребеҙгә, туғандарыбыҙға, яҡындарыбыҙға, дуҫтарыбыҙға, туған мәктәбебеҙгә, мәсеттәргә "Киске Өфө" гәзитен бүләк итәйек. Алты ай буйы гәзит уҡып кинәнер һәм баҫманың һәр һанын алған һайын һеҙҙе хәтеренә төшөрөр яҡындарығыҙ һәм рәхмәт уҡыр.

**Тағы бер тәҡдим бар…**

Кем тыуған көнө уңайы менән "Киске Өфө" гәзите биттәрендә ҡотланырға теләй? Шулар гәзиткә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәрә, тыуған көнө датаһын хәбәр итә һәм ваҡыты еткәс, гәзит биттәрендә беҙҙең ҡотлауҙы уҡып, бәләкәй генә булһа ла шатлыҡ кисерә.

**Өфөлә йәшәүселәр иһә "Киске Өфө"гә яҙылыуҙың бер нисә ысулын һайлай ала:**

● Үҙегеҙ йәшәгән йорт эргәһендә "Өфө-матбуғат" киоскыһында яҙылыу һеҙгә бик арзанға төшәсәк, ярты йылға 240 һум.

● Аҙнаһына бер тапҡыр редакциянан килеп алып йөрөй алһағыҙ, гәзитебеҙгә редакцияның үҙендә яҙылыу ҙа уңайлы һәм арзанраҡ: ярты йылға - 225 һум.

**Өфөләләргә әйтер тағы бер һүҙ…**

**"Гәзиткә яҙылырға аҡсам юҡ", "Почта бүлексәһенә инергә ваҡыт юҡ", "Подъезыбыҙҙа почта йәшниге юҡ", - тигән ваҡ һылтаныуҙарҙы ситкә ташлайыҡсы әле. Баҫмабыҙ тиражы аша үҙебеҙҙең баш ҡалала барлығыбыҙҙы, ҡеүәтебеҙҙе, берҙәмлекте, татыулыкты күрһәтәйек, "Беҙ булғанбыҙ, барбыҙ, буласаҡбыҙ!" - тигән күмәк тауышыбыҙҙы ишеттерәйек, гәзиз милләттәштәр!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты "Йылдың башҡорт теле һәм әҙәбиәте" төбәк-ара конкурсы, "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы","Йылдың рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы", "Йылдың татар теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы" республика конкурстары лауреаттарына БР Президенты премияларын биреү тураһындағы бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Билдәле булыуынса,"Йылдың башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы" конкурсында Стәрлетамаҡ районынан Г. Сәлимйәнова еңеп сыҡты. Президент премияһы шулай уҡ финалға сығыусы башҡорт теле уҡытыусылары Ишембай ҡалаһынан В. Әйүповаға, Сибайҙан Г. Игелекова, Бөрйән районынан Ф. Ҡараголова, Йылайыр районынан З. Ҡудашеваға биреләсәк.

✓Башҡортостанда тағы бер ижтимағи ойошма - "Бөтә Рәсәй педагогик йыйылышы"ның төбәк бүлексәһе ойошторолдо. 2006 йылда булдырылған был ижтимағи ойошма әле Рәсәйҙең 69 төбәгенән 270 меңдән ашыу кешене берләштерә. Төп маҡсаттарының береһе - уҡытыусының статусын күтәреү булған ижтимағи ойошманың төбәк бүлексәһе рәйесе итеп Башҡортостан мәғарифты үҫтереү институты ректоры Рөстәм Ишмөхәмәтов һайланды.

✓Германияла хоккей буйынса донъя чемпионаты башланды. Рәсәйҙең йыйылма командаһында "Салауат Юлаев" командаһының өс уйынсыһы бар. Улар: ҡапҡасы Александр Еременко, һаҡсы Дмитрий Калинин, һөжүмсе Виктор Козлов.

✓БР Эшҡыуарлыҡ һәм сауҙа буйынса дәүләт комитеты "Башҡорт милли кухняһы - республика байлығы" тигән фестиваль үткәрә. Республиканың барлыҡ ҡалаларында һәм райондарында туҡланыу индустрияһы предприятиелары башҡорт кухняһы көндәре, аҙналығы, төрлө күргәҙмәләр, конкурстар ойошторорға йыйына.

✓20 майҙан 23 майға тиклем Төркиәнең Стамбул ҡалаһында Башҡортостан Республикаһы фәне һәм мәҙәниәте көндәре, уның сиктәрендә башҡорт һабантуйы буласаҡ. Бөтә саралар ҙа Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың тыуыуына 120 йыл тулыу датаһына арналасаҡ. М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры Стамбул тамашасыларына Н. Асанбаев әҫәре буйынса ҡуйылған "Әхмәтзәки Вәлиди" спектаклен күрһәтәсәк.

АҘНА ШАҢДАУЫ

# АЙ-ҺАЙ, ҠЫЙЫН ОЛИГАРХ БУЛЫУҘАРЫ,

## йәки Нишләп байҙар Рәсәйҙән үҙҙәре лә ҡаса, аҡсаларын да алып ҡаса?

**Әйтегеҙ әле, йәмәғәт, бына, мәҫәлән, һеҙ футбол, волейбол йә булмаһа баскетбол тубы һатып алһағыҙ, кем булаһығыҙ инде? Спортсы, йәки спорт менән мауығыусы, тиерһегеҙ, моғайын. Дөрөҫ. Ә инде спорт клубы һатып алһағыҙ иһә... Эйе, был саҡта инде һеҙ ... юҡ, юҡ, тренер түгел, ә олигарх! Теләһә ниндәй түгел, ә Рәсәй олигархы!**

Ҡулығыҙға миллион һум килеп эләкһә, ни эшләр инегеҙ? Ә миллион доллар? Ә миллиард? Аңлайым, һәр кемдең үҙ хыялы бар. Кемгәләр фатир, машина, тағы ла бер фатир, айырым йорт, хәләл ефетеңә бер нисә тун, тағы ла бер машина, ә бәлки, самолет, вертолет, хатта яхта кәрәк. Артабан инде, радио һәм телевидение, гәзит һәм журналдар, заводтар һәм фабрикалар, ер биләмәләре һәм урмандар, приискылар һәм скважиналар, шахталар һәм аэропорттар... Был исемлек иртәме-һуңмы тамамланырға тейеш тә баһа. Әммә кемдер бының менән генә хушһынмай. Ундайҙар спорт клубтары, футбол, волейбол баскетбол һ.б. командаларҙы үҙләштерә башлай. Йәнәһе, яны, юғарыраҡ кимәлгә күсә.

Рәсәйҙең иң бай кешеләренең береһе, башҡа ҡиммәтле "уйынсыҡтарына" өҫтәп, баскетбол клубы һатып алған икән. Уның ни гәжәбе бар, тиһегеҙме? Беҙҙең байҙар бер ҙә төшөп ҡалғандарҙан түгел дә баһа, тип, "Челси" командаһын үҙләштергән Роман Абрамовичты иҫегеҙгә төшөрөрһөгөҙ әле. Эйе, шөкөр, байҙарыбыҙ шәп. Йөҙөбөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермәйҙәр. Был юлы ла Рәсәй олигархы теләһә ниндәй түгел, ә Америка Ҡушма Штаттарының Милли баскетбол ассоциацияһына ингән "Нью-Джерси Нетс" командаһына эйә булды. Һүҙ, йәмәғәт, Михаил Прохоров хаҡында бара. 2009 йыл башына Прохоров Рәсәйҙең иң бай кешеһе иҫәпләнә ине. Әле - икенсе урында. Прохоровҡа 45 йәш. Иҫегеҙҙә булһа, 2007 йылды ҡаршылағанда Прохоровты Куршевелдә (Франция) урындағы полицейскийҙар халыҡ-ара фәхишәләр селтәрен ойоштороуҙа ғәйепләп, ҡулға алғайны. Прохоров өсмә-дүртме көн француз төрмәһендә ултырып та сыҡты. Бынан һуң уның исеме Санкт-Петербургтағы "Аврора" крейсерында "Русский пионер" тип аталған журналдың йыллығын ойоштороусылар исемлеге араһында күренде. Революциянан һуң музейға әүерелгән был карапта мәжлес ойоштороп, шарап һемереп, шәрә ҡыҙҙар менән бейеп йөрөгәне өсөн Прохоровҡа бер нәмә лә булманы.

Әйтергә кәрәк, Прохоров бәләкәй саҡтан уҡ баскетболды яратҡан булған. Эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнә башлағас, ЦСКА ирегеттәр баскетбол клубына даими рәүештә ярҙам иткән. Рәсәй командаһына аҡсаны күпме биргәне билдәһеҙ. Ә бына Америка баскетбол клубын һатып алыуға Прохоров 200 миллион доллар түккән. Әйтергә кәрәк, ЦСКАнан айырмалы рәүештә, "Нью-Джерси Нетс" командаһы шәптәрҙән түгел - үткән сезонда ул рәттән 18 уйында отолған һәм чемпионатта иң һуңғы урынды биләгән.

Онотһағыҙ, йәмәғәт, иҫегеҙгә төшөрмәксемен, иҡтисади көрсөк арҡаһында финанс ярҙам етмәү сәбәпле түбәнге лигаларға төшкән, йәки тарҡалған спорт командалары ситтә генә түгел, үҙебеҙҙә лә бихисап. Хәтерҙә ҡалғандары ғына - "Мәскәү" һәм "Торпедо" футбол клубтары, "Лада" хоккей командаһы. Уларҙы аяҡҡа баҫтырыр өсөн 200 миллион доллар, моғайын, етер ине. Әммә Прохоров Америка Ҡушма Штаттарын һайлаған. Күрәһең...

Әнимә күрергә була бында? Аҡса өсөн сик юҡ. Уны ҡайҙа тиҙерәк күбәйтергә, арттырырға мөмкин, эшлекле кешеләр шунда ынтыла. Абрамович сит ил футбол клубын һатып алғас, кешеләр был хәлде төрләсә фаразланы. Ҡайһы берәүҙәр уның милләтенә һылтанды, йәнәһе, йәһүд өсөн Тыуған ил төшөнсәһе юҡ, ул, балыҡ кеүек, тәрәнерәк һәм төшөмләрәк урынды һайлай. Прохоров Америка баскетбол клубын һатып алғас иһә, был әйтемдең мәғәнәһе әҙерәк үҙгәрҙе. Баҡтиһәң, йәһүд түгел, ә олигарх төшөмләрәк урынды һайлай ҙа баһа. Уйлап ҡараһаң, Прохоровтың 200 миллион доллары, моғайын, ошо ерҙә (Рәсәйҙә тимәксемен), Рәсәй кешеләре хеҙмәте менән тупланған аҡсалыр. Тик улар ошо ергә кире ҡайтарылмай, ә ситкә оҙатыла. Әллә олигархтар, тим, Рәсәйҙән ваз кискәнме? Улар бит барыбер бер нисә аҙым алға күрергә һәләтле. Рәсәй дәүләтенең киләсәген нисегерәк фаразлайҙар икән? Юғиһә, бер бөгөн менән йәшәһәләр, тим, моғайын, аҡсаларын да, ғаиләләрен дә сит илдәргә сығармаҫтар ине. Балаларын да сит ил колледждарында һәм университеттарында уҡытмаҫтар ине. Сит илдәрҙә күсмәҫ милек алмаҫтар ине, бизнестарын шунда ойоштормаҫтар ине. Әллә яңылышаммы? Әллә олигархтарҙың Рәсәйҙән ҡасыуында икенсе берәй сәбәп бар микән?

Үткән аҙнала икенсе бер олигарх (әлбиттә, Прохоров йәки Абрамович ише түгел, ябайыраҡ) Интернет аша Рәсәй Президентына мөрәжәғәт итте. Бөйөк Британияға Рәсәй эске эштәр органдарының эҙәрлекләүенән ҡасҡан эшҡыуар Евгений Чичваркин ("Евросеть" кәрәҙ телефондары менән сауҙа итеү селтәренең хужаһы) Донъя селтәрендә урынлаштырған видео мөрәжәғәтендә Дмитрий Медведевҡа Рәсәй Эске эштәр министрлығының айырым хеҙмәткәрҙәренең исем-шәрифтәрен атап, уға һәм уның дуҫы һәм бизнес-партнеры Борис Левинға ҡаршы ялған енәйәтте эш ойоштороуҙа ғәйепләй. Әйтергә кәрәк, Чичваркин тәү ҡарашҡа әлеге ваҡытта Рәсәйҙә төрмәлә ултырған Борис Левинды яҡлап сығыш яһаған кеүек. Тик журналистар фекеренсә, ул махсус рәүештә Рәсәй Президенты (йәки Премьер-министры) сығыштарына, халыҡҡа мөрәжәғәттәренә оҡшатып телмәр тоторға тырышҡан. Эшлекле костюм кейгән, ҡыйбатлы галстук таҡҡан. Фон итеп Англияның баш ҡалаһы Лондондың иң иҫтәлекле урындарының береһе булған Биг-Бен башняһын һайлаған. Йәнәһе, мин кемдән кәм. Беҙҙең түрәләр беҙгә Рәсәйҙәге тормоштоң яҡшыра барыуы тураһында һөйләһә, Чичваркин, киреһенсә, үҙ миҫалында Дмитрий Анатольевич Медведевҡа (һәм, әлбиттә, уның видеомөрәжәғәтен ҡарау мөмкинлегенә эйә булған һәр бер кешегә) илебеҙҙә олигархтарға йәшәргә һәм эшләргә көн ҡалмағанын бәйән итә. Чичваркин мөрәжәғәтен рус телендә яңғыратһа ла, кадрҙың аҫтында инглиз телендә субтитрҙар ебәрелә. Йәғни, ул донъя кимәлендәге шаңдауға өмөтләнә.

Ғәжәп. Чичваркин, хатта ул олигарх булһа ла, ҡайһы бер нәмәләргә уйлап еткермәгән һымаҡ. Ул гүмерҙә Рәсәйҙә йәшәмәгән, икенсе бер Рәсәй олигархының яҙмышы тураһында бер нәмә лә белмәгән кеүек ҡылана. Беҙҙең илдә Сталин (хатта Ленин) заманынан уҡ нисек ҡабул ителгән? Органдар тарафынан бер тапҡыр ғына ғәйепле тип табылһаң, был келәймә һиңә генә түгел, ғаиләңә, ата-әсәйеңә, балаларыңа, хатта ейән-ейәнсәрҙәреңә лә тағыласаҡ. Мәңгегә. Дәлилдәр кәрәкме? Әле һаман илебеҙҙә Сталин ваҡытында сәйәси золомға эләккәндәр хаҡында "Ҡулға алынғандар, яуапҡа тарттырылғандар, төрмәгә ултыртылғандар, тимәк, бушҡа түгел, тимәк, ғәйепләләр", тигән фекер йәшәй. Аҡыллылар, дөрөҫөрәге, тарихи тәжрибәгә эйә булғандар быға күнгән. Ә һеҙ (олигархтар, тимәк) башҡаса йәшәргә самалайһығыҙ. Беҙҙең илдә тыныс йәшәр өсөн йә бүлешергә, уртаҡлашырға, йә... был илдә йәшәмәскә кәрәк. Бына шундай парадокс.

Рәсәй түрәләре бөгөн боронғо башҡорт халыҡ мәҡәленә нигеҙләнеп йәшәй. Шуны һаман аңламанығыҙмы ни? "Эт өрөп торор, бүре..." Хәйер, ҡалғанын һеҙ үҙегеҙ ҙә беләһегеҙ.

**Таһир ИШКИНИН.**

МИЛЛӘТ ҠОР ЙЫЯ

# Ә ДЕЛЕГАТТАРЫ КЕМ?

**Миңә бер район ҡоролтайында ҡатнашырға тура килде. Сығыштар, ялҡынлы телмәрҙәр байтаҡ булды. Ҡаланан килгән депутат туған телдең әһәмиәте тураһында ҡоро ғына телмәр тотто. Ышандырманы фекере. Ни өсөнмө? Сөнки уның үҙ балалары туған телен бөтөнләй белмәй икәне мәғлүм ине күптәргә. Ауыҙынан сыҡҡан һүҙен ҡолағы ишеттеме икән бының, тип аптырап уйлап ултырҙым.**

Халыҡ һизгер бит ул, уны алдауы ҡыйын. Тағы бер иптәш ҡоролтайҙа ер мәсьәләһен күтәреүҙең мөһимлеген билдәләне. Ул делегат итеп тә һайланды. Уның ҡоролтайға барып, янып-ярһып ошо мәсьәләне күтәреп сығырына ышандыҡмы? Юҡ, әлбиттә. Сөнки тап уның "киң күңелле, ҡунаҡсыл башҡорт" булыуы арҡаһында районыбыҙ тау ягы кешеләре менән тулды.

Яңыраҡ бер танышым Себер яҡтарынан шылтырата: "Ҡоролтайға ниндәй кешеләр, нисек һайланды ул? Беҙ, мәҫәлән, ҡайһы берәүҙәрҙең ҡайһылайтып делегат булып үтеп китеүен дә абайламай ҡалдыҡ. Башҡорттоң барлығын ишетә генә белгәндәр ҙә бар улар араһында", - ти.

Оло ҡор ул Ҡоролтай. Йәш яғынан түгел, аҡыл йәһәтенән аҡһаҡалдар күберәк булып, милләтебеҙ киләсәгенә ынғай үҙгәреште индерерлек делегаттар һайланһа, ҡайҙа ла инде. Әгәр күбеһе беҙҙең район делегаттары кеүек булһа? Тыштан ялтырап, эстән ҡалтырап торған йыйын булмаһа, ярай ҙа. Шулай ҙа шайтан ғына өмөтһөҙ. Кешене өмөт йәшәтә. Халыҡты ла. Был ҡоролтайҙың байрам ғына булмаясағына ышанғы килә...

**Өлгөрбикә ТИКТОРМАҪОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев Мәскәүҙә үткән "СВЯЗЬ-ЭКСПОКОММ-2010" халыҡ-ара күргәҙмәһендә "Башҡортостан Республикаһы Электрон Хөкүмәте" проекты менән танышты. "Был иң заманса проект, - тине Раил Сәлих улы. - Минең эш кабинетында теләһә ниндәй документты Электрон Хөкүмәт сайтында асып, электрон ҡултамға ҡуйып, теге йәки был бойороҡ, ҡарарҙың үтәлешен тикшереп була". Был уникаль проект Рәсәйҙә беренсе һәм хәҙер күп субъекттар беҙҙең эш тәжрибәһен өйрәнергә теләк белдерә.

✓ Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә был юлы балаларҙың йәйге ялын, уларҙың эш менән мәшғүллеген ойоштроу, шулай уҡ балалар лагерҙарында янғын хәүефһеҙлеген тәьмин итеү тураһындағы мәғлүмәттәр тыңланды. Билдәләнеүенсә, быйыл һауыҡтырыу лагерҙарында 33 мең Өфө балалары ял итә аласаҡ.

✓ Тажикстанда полиомиелит ауырыуына бәйле көсөргәнешле хәл тыуыу сәбәпле, "Өфө" халыҡ-ара аэропортында санитар-карантин контроле көсәйтелгән. Был илдән килгән һәр кеше ентекле медицина тикшереүе үтә. 15 йәшкә тиклемге балаларға айырыуса иғтибар бүленә: уларға полиомиелитҡа ҡаршы вакцинация үткәрелә. Апрель аҙағына Тажикстанда киҫкен һүлпән фалиждың 171 осрағы, шул иҫәптән 12 үлем осрағы теркәлгән, 31 ауырыуҙа "ҡырағай" полиовирус табылған.

✓ Йылы көндәр башланыу менән ҡала халҡы тәбиғәт ҡосағына, баҡса участкаларына ашыҡты. Ошо йылы көндәр башланғандан алып ҡына ла республикала 1900 кеше талпан ҡаҙалтып өлгөргән. Врачтар асыҡлауынса, уларҙың 34-е энцефалитлы булып сыҡҡан. Талпан ҡаҙалғанда өфөләр БР Гигиена һәм эпидемиология үҙәгенә мөрәжәғәт итә ала. Адресы: Өфө ҡалаһы, Шафиев урамы, 7. Үсмерҙәр китапханаһы тукталышы. Ҡаҙалған талпанды үҙегеҙ менән алып килергә кәрәк. Тикшереү хаҡы 240 һум.

✓ Зәйнәб Биишева исемендәге Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһында Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Кубогына тәбәктең педагогик вуздары араһында Республика йылына арналған I Спартакиада булып уҙҙы. Бәйгелә 600-ҙән ашыу студент 15 спорт төрө буйынса көс һынашты.

БАЙРАМ БИҘӘКТӘРЕ











Филүс ШАКИРОВ фотолары.

ХОҠУҒЫҢДЫ БЕЛ!

**Рәсәй мәктәптәренә Берҙәм дәүләт имтиханы индерелеүгә бер нисә йыл үтеп китһә лә йыл һайын сығарылыш уҡыусылар һәм уларҙың ата-әсәләре алдында һынауҙар буйынса төрлө һорауҙар тыуып ҡына тора. БДИ һөҙөмтәләре менән риза булмағанда, уны яңынан тапшырып буламы? Математика буйынса имтиханға калькулятор алып инергә яраймы? Берҙәм дәүләт имтихандары буйынса ошо һәм башҡа һорауҙарға Мәғариф буйынса закондар сығарыу Федераль үҙәгенең төп эксперты Мария СМИРНОВА яуап бирә.**

# БЕРҘӘМ ДӘҮЛӘТ ИМТИХАНЫ...

## яңынан-яңы һорауҙар тыуҙыра

**БДИ тапшырыласаҡ фәнде имтихандар алдынан үҙгәртергә яраймы?**

- Юҡ. Сығарылыш уҡыусылары БДИ тапшырыласаҡ фәндәр исемлеге күрһәтелгән ғаризаны 1 мартҡа тиклем бирергә тейеш. Әгәр ҙә икеләнеүҙәр бар икән, ғаризала күберәк фәндәрҙе күрһәтергә һәм аҙаҡтан кәрәк тип табылмаған осраҡта был фән буйынса имтиханға бармаҫҡа була.

**Математика буйынса БДИ тапшырып ҡарағайным, әммә калькулятор ҡулланыуға ҡарамаҫтан, 4 сәғәттә мәсьәләләрҙе сисеп өлгөрә алманым. Имтиханда калькулятор ҡулланырға ярамай тиҙәр, был дөрөҫмө?**

- Математика буйынса БДИ-ла - линейка, физика һәм химия буйынса БДИ-ла уға өҫтәп программалап булмай торған ябай калькулятор, ә география буйынса имтиханда линейка, калькулятор һәм транспортир ҡулланырға рөхсәт ителә. Имтихан ваҡытында уҡыусыла телефон барлығы асыҡланһа, хатта ул уның менән ҡулланмаған осраҡта ла, уҡыусыны имтихандан сығарып ебәреүҙәре ихтимал. Был хәлдән һуң уҡыусының ҡабаттан БДИ тапшыра алыу-алмауын махсус комиссия хәл итәсәк. Имтихан тапшырыу ваҡыты йыл һайын Рособрнадзор тарафынан билдәләнә. Былтырғы йыл менән сағыштырғанда, 2010 йылда сит телдәр буйынса имтихан тапшырыу ваҡыты 10 минутҡа, йәғни 160 минутҡа тиклем ҡыҫҡарған. Математика, әҙәбиәт, информатика һәм мәғлүмәти-коммуникацион технологиялар - 4, физика, тарих, йәмғиәтте өйрәнеү - 3,5, рус теле, биология, география, химиянан имтихан тапшырыу өсөн 3 сәғәт ваҡыт бүленәсәк.

**БДИ-нан түбән балл йыйған осраҡта уны быйыл яңынан тапшырып буласаҡмы?**

- Әгәр ҙә уҡыусы төп фәндәрҙең береһенән - математика йәки рус теленән минималь кимәлдән аҙыраҡ балл йыя икән (минималь балл имтихан тапшырылғандан һуң бер нисә көн үткәс Рособрнадзор тарафынан билдәләнә), БДИ-ны резерв көндәрҙә киренән тапшыра ала. Кем был фәндәрҙең икеһенән дә кәрәкле минималь балды йыя алмаған, БДИ-ны ҡабаттан икенсе йылына ғына тапшырыу хоҡуғына эйә буласаҡ. Имтихан тапшырғанға тиклем уға мәктәпте тамамлау тураһында белешмә генә бирелә. Уҡыусы өҫтәмә (һайлап алынған) фән буйынса БДИ тапшыра алмаһа, был фәнде икенсе йылына ғына кире тапшыра ала. Әгәр ҙә ул һайлап алынған фәндән имтихан тапшыра алмай, ә математика һәм рус теленән кәрәкле балдар йыя икән, уға аттестат бирелә. Имтихандарҙы ҡабаттан тапшырған өсөн түләргә кәрәкмәй.

**Дәрестәрҙе күп ҡалдырған өсөн БДИ тапшырырға рөхсәт итмәүҙәре мөмкинме?**

- Юҡ. БДИ-ны 10-сы, 11-се (12-се) синыфта дөйөм белем биреүсе фәндәр буйынса йыллыҡ баһаһы өслөнән кәм булмаған бөтә сығарылыш уҡыусылары ла тапшыра. Әммә дәресте күп ҡалдырыу һөҙөмтәһендә баланың теге йәки был фәндән йыллыҡ билдәһе икеле икән, уға БДИ тапшырырға рөхсәт ителмәй һәм мәктәпте тамамлағас, аттестат түгел, ә мәктәпте тамамлау тураһында белешмә генә бирелә.

БДИ һөҙөмтәләре минималь кимәлдән юғары булып та, уҡыусы тағы ла юғарыраҡ балл йыйыу өсөн имтиханды быйыл яңынан тапшыра алмай.

**Мәктәптә уҡыусыны исемлеккә индерергә онотһалар, төбәк имтихан дәүләт комиссияһына (ГЭК) мөрәжәғәт итеп, хәлде үҙгәртергә буламы? Әллә ул БДИ-ны икенсе йыл тапшырасаҡмы?**

- Әгәр был комиссия, уҡыусы имтиханды кисерерлек сәбәптәр арҡаһында ҡалдырған, тип тапһа, уҡыусы БДИ-ны быйыл, әммә икенсе ағымда - вузда (8 июлдән 19 июлгә тиклем) тапшыра ала. Мәктәптән балағыҙ техник сәбәптәр арҡаһында имтиханға эләгә алмауы тураһында яҙма раҫлау ҡағыҙы алығыҙ. Был документтарҙы ғариза менән бергә 5 июлгә тиклем ГЭК-ка тапшырырға кәрәк.

УЙЛЫҒА - УЙ

# КӘРӘКЛЕ ҺӨНӘР ҺАЙЛАП,

## кәрәкле белгес бул

**Көтөп алынған йәмле май айы етеү менән, уҡыу йылы аҙағына ла күп ҡалмай. Мәктәп уҡыусылары өсөн күңелле лә, көсөргәнешле лә мәл ул - май айы. Ә инде мәктәпте тамамлаусылар өсөн айырыуса мөһим был осор.**

Йәштәр - милләттең киләсәге. Артабан ҡайһы юҫыҡҡа юл аласағыбыҙ, телебеҙ, йәнтөйәгебеҙ яҙмышы, ата-бабаларыбыҙ васыятының үтәлеүе-үтәлмәүе лә - беҙҙең, йәштәрҙең, ҡулында.

Башҡорт донъяһы торғонлоҡ ҡорғанынан арынып, күтәрелеш кисерә. Республикабыҙҙа бик күп ыңғай үҙгәрештәр булып үтте һәм был дөйөм милләт хәленә үҙ йоғонтоһон яһамай ҡалманы. Башҡорт теле дәүләт теле статусын яуланы, туған телдә һөйләшеү өсөн бер ниндәй сикләү ҙә юҡ, киреһенсә, башҡорт мәктәптәре арта бара, башҡорт телендә әҙәби әҫәр-

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө приборҙар төҙөү производство берекмәһендә ҡулланыусылар яраткан "Ағиҙел" ҡырынғысын яңынан етештерә башлаясаҡтар.

✓14 майҙан Башҡортостанда "Мәк" операцияһы старт алды. Ул 31 октябргә тиклем дауам итәсәк. Төп маҡсаты - мәк, киндер һәм башҡа наркотиклы үсемлектәрҙең законһыҙ сәсеүлектәрен асыҡлау. Республика биләмәһендә һуңғы биш йылда 2,2 мең тонна мәк һәм киндер юҡҡа сығарылды, уларҙан 445 тонна йәки 219 миллион доза наркотик яһарға мөмкин булыр ине. Тыйылған наркотиклы үсемлектәр үҫтергән өсөн 500-700 минималь эш хаҡы күләмендә штраф йә ике йылға тиклем иректән мәхрүм итеү ҡаралған.

✓Дим районында яңы мәсет төҙөлә башланы. Уны 2012 йылға төҙөп бөтөргә ниәтләнәләр.

✓20 майҙа Өфөлә дүртенсе тапҡырға "Бәләкәй эшҡыуарлыҡ өсөн кадрҙар" тип аталған фәнни-ғәмәли конференция үтәсәк. Унда персоналды һайлап алғандағы проблемалар, уңышлы эшләгәндәр өсөн шарттар тыуҙырыу, шулай уҡ корпоратив мәҙәниәт, кешеләрҙе эшҡыуарлыҡҡа йәлеп итеү тураһында һүҙ буласаҡ.

✓Баш ҡала милицияһының тәүлек әйләнәһенә эшләүсе "Ышаныс телефоны" шылтыратыуҙар ҡабул итә башланы (347)237-17-17. Һәр граждан ошо телефон буйынса милиция хеҙмәткәрҙәренең дөрөҫ булмаған ҡылығы, шулай уҡ төрлө енәйәттәр тураһында хәбәр итә ала.

✓12 майҙан 21 майға тиклем баш ҡалала "Беҙ бер ҡандан" тигән акция үтә. Уны ойоштороусылар был акцияға мең ярым кешене йәлеп итергә ниәтләнә. Ҡан биреүсегә 209 һум аҡса түләнәсәк, уларға ике көн эшкә бармаҫҡа мөмкин буласаҡ. Ситтән килеүселәр ҡанды Республика ҡан биреү станцияһында, өфөләләр Республика онкология диспансерында, Республика клиник һәм 17-се балалар дауаханаларында тапшыра ала.

✓Республикала үткән төҙекләндереү айлығында 1300 мең квадрат метр юл ремонтланған. 46 мең ихата, йорт фасадтары йүнәтелгән, ҡала һәм ауылдарҙы йәшелләндереү эше лә әүҙем бара. Был эштә мәктәп уҡыусылары һәм йәш экологтар ҙа ҙур ярҙам күрһәтә. Апрель аҙағына 11 меңдән ашыу ағас һәм ҡыуаҡ ултыртылған.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ЙОҘРОҠ МЕНӘН ҺУҒЫШЫУҘЫ...

## башҡорт егеттәре лә үҙ итә



### Бокс үҫешә бара

Беҙҙең Хәйбулла районы үҙәге Аҡъярҙа бокс спорт төрө ныҡ үҫешкән һәм ул иң перспектив спорт төрҙәренең береһе һанала. Шуға күрә беҙҙең районда бокс менән шөғөлләнеүсе егеттәр бихисап. Минең үҙемдең был спорт төрөнә ылығып китеүемә ете йыл була инде. Өфө дәүләт авиация техник университетына уҡырға ингәс тә боксты ташламаным. Уңыштарым да байтаҡ. 2008 йылда студенттар араһында Рәсәй беренселегендә, шул уҡ йылда ПФО беренселегендә II урын яуланым, ә быйыл баш ҡалабыҙҙа булып үткән бокс буйынса Башҡортостан Республикаһының асыҡ чемпионатында 48 кг ауырлыҡ категорияһында чемпион исемен яуланым.

Билдәле булыуынса, Башҡортостанда был спорт төрө үткән быуат башында үҫешә башлағайны. Тәүге тапҡыр 2007 йылда Өфөлә махсуслаштырылған бокс үҙәге асылды. Спортсылар әҙерләүсе үҙенсәлекле үҙәкте хатта донъя өлгөләре менән сағыштыралар. Спорт комплекстары Бәләбәй, Стәрлетамаҡ, Сибай, Нефтекама, Учалы һәм башҡа ҡалаларҙа урынлашҡан һәм уларҙағы бокс секцияларында ике меңдән ашыу бала бушлай шөғөлләнә. Йәш боксерҙар менән билдәле тренер-уҡытыусылар шөғөлләнә. Республикала бокс буйынса йыл һайын уҙғарылған турнирҙар йәмәғәт тормошонда билдәле геройҙарға, спорт мастерҙарына арнала, мәҫәлән, республикабыҙҙа Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәев, Социалистик Хеҙмәт Геройы Михаил Ферин, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре Тәхвәт Аслаев, генерал-майор Рауил Фәйрүзов, БАССР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт эшмәкәре Николай Митькин иҫтәлегенә бағышланған турнирҙарҙы йыл һайын уҙғарыу матур традицияға әйләнде.

Һуңғы йылдарҙа уларға тағы ла Бәләбәй ҡалаһында үткәрелә башлаған РСФСР-ҙың атҡаҙанған машина төҙөүсеһе Марс Әмиров иҫтәлегенә бағышланған турнир өҫтәлде.

### Уңыш емеше тренерҙан да тора

Ниндәйҙер уңыш яулау беҙҙән генә түгел, тренерҙарҙан да тора. Улар уҡытыуға, спортсыларҙы күнектереүгә яуаплы ҡарарға, уҡыусыларының талантын дөрөҫ аса һәм үҫтерә белергә, шулай уҡ төрлө яҡтан үҫешкән гражданды тәрбиәләүҙе лә маҡсат итеп алырға тейеш. Спортсыһының бөтә киләсәге, үҫеше юғары класлы, профессиональ белгес булған тренерға бәйле.

Беҙҙең спортсылар был йәһәттән уңды, тип әйтергә була. Уларҙы үҙ эшен яратҡан, талантлы тренер-уҡытыусылар тәрбиәләй. Ошо урында йәштәр араһында сәләмәт йәшәү рәүеше булдырыу өсөн арымай-талмай эшләүсе Рим Ғилванов, Нил Ғабдуллин, Марат Ғәлләмов, Михаил Писман, Эдуард Хамадьяров кеүек талантлы тренер-уҡытыусыларға рәхмәт белдереп уҙғым килә. Улар спортсыларҙы көслө рухлы булырға өйрәтә, сөнки көслө рухлы спортсы ғына еңелеү белмәй.

### Спорт - ул беҙҙең тормошобоҙ

Бөгөнгө көндә йәштәр араһында төрлө ауырыуҙар күбәйҙе, тип яр һалабыҙ. Быныҡ сәбәбен мин хәрәкәт кәмеүендә күрәм, сөнки сәләмәтлек өсөн хәрәкәт мөһим шарт булып тора. Ә беҙ көндән-көн әҙерәк хәрәкәтләнәбеҙ: эшкә йәки уҡыуға барғанда ла, ҡайтҡанда ла йәмәғәт транспортында ултырып ҡайтабыҙ, өйҙә лә хәрәкәт итмәйбеҙ тиерлек. Шулай итеп, беҙ үҙ сәләмәтлегебеҙҙе ҡаҡшатабыҙ ғына. Бынан сығыу юлын мин спортта күрәм. Кешеләр менән аралашҡанда шуға иғтибар итәм: бөтә кеше лә тиерлек, спортты яратам, ти. Шулай ҙа мин телевизор экраны алдында сәғәттәр буйы футбол, хоккей ҡарап ултырған кешеләрҙе спортты ярата, тип әйтә алмаҫ инем. Уларҙың спортты был рәүештә яратыуынан ни файҙа? Әгәр һеҙ реклама ваҡытында булһа ла бер аҙ күнекмәләр яһап алһағыҙ, тапшырыу бөткәндән һуң саф һауала йөрөп килһәгеҙ, үҙ һаулығығыҙға күпме файҙа булыр ине.

Спорт менән бөтәһе лә шөғөлләнергә тейеш. Ләкин был һәр кем үҙ алдына спортта ниндәйҙер уңышҡа өлгәшеүҙе маҡсат итеп алырға тейеш, тигәнде аңлатмай. Спорт менән тик үҙ сәләмәтлегеңде нығытыр, көс йыйыр, етеҙлегеңде арттырыр, хәрәкәтсән булыр өсөн дуҫлашырға кәрәк.

**Айтуған КӨНСЫУАҠОВ**
**спорт менән дуҫлашырға өндәнә.**

ҙәр нәшер ителә, матбуғат баҫмалары баҫыла. Тик өлгәшелгән уңыштар менән тынысланып ҡалырға ярамай, беҙгә артабан да юғарыға үрләргә кәрәк.

Милләтебеҙ файҙаһына хеҙмәт итер өсөн ниндәй һөнәр һайларға һуң? Был һорау туған халҡының рухи традициялары буйынса йәшәп, уларҙы ҡәҙерләгән һәм хөрмәт иткән ата-әсәләрҙе лә, йәштәрҙе лә борсой бөгөн. Донъяла һөнәрҙәр күп, әммә уларҙың һәр береһе йәмәғәт тормошоноң бер тармағын тәшкил итә. Бөгөн башҡорт халҡына етеҙ, заманға ауырлыҡтарҙы яраҡлаша алған, өткөр, илһөйәр һәм, әлбиттә, республикаһына файҙалы булған һөнәр эйәләре кәрәк. Финанс, иҡтисад өлкәһен яулай башларға бик ваҡыт беҙгә. Шулай уҡ профессиональ сәйәсмәндәр, ҡаршылыҡтар алдында ҡаушамаған, хаҡлыҡ өсөн көрәшкән журналистар, башҡорт сәнғәтен тағы ла нығыраҡ балҡытыр рәссамдар, йырсылар, фәндә яңы һулыш асырлыҡ ғалимдар ҙа кәрәк халҡыма. Шуға ла сығарылыш уҡыусылары киләсәктә үҙенә ҡыуаныс һәм киңәнес килтерер, шул уҡ ваҡытта туған Башҡортостанды яңы кимәлгә күтәреүгә, уны бар донъяға балҡытыуға булышлыҡ итеп һөнәр һайлар, тигән ышаныстамын һәм шуға саҡырам.

**Дилбәр ЙӘМИЛЕВА.**
**Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты уҡыусыһы.**

ҺОРАУ - ЯУАП

### КИЛЕШЕҮ ҒӘМӘЛДӘ ҠАЛА

**Һаҡлыҡ банкыһында ирем исемендә бер аҙ аҡса бар ине. Көтмәгәндә ул вафат булып ҡуйҙы. Минә, уның ҡатынына, был аҡсаны 6 айҙан һуң ғына бирәсәктәр, ләкин ошо осорға процент иҫәпләнмәй, тип иҫкәрттеләр. Был дөрөҫмө?**

- Банк менән клиент араһындағы мөнәсәбәттәр Банк һаҡлығы килешеүе менән көйләнә. Килешеү тарафынан шулай уҡ һаҡлыҡ шарттары, атап әйткәндә, аҡсаны һаҡлау ваҡыты һәм уны кире ҡайтарыу көнө билдәләнә. Килешеүҙе ваҡытынан алда (гәзит уҡыусы хатында вкладты ҡайтарыу көнө ошо йылдың 23 июне тип күрһәтелгән) ғәмәлдән сығарған осраҡта аҡса һаҡлыҡта булған ваҡыт өсөн Килешеү шарттарына ярашлы килем иҫәпләнергә тейеш: 6 айға һаҡлыҡҡа һалынған вклад буйынса - талап ителгәнгә тиклемге вклад ставкаһы буйынса; 6 айҙан артығыраҡ осорға - вклад тәүге 6 ай эсендә талап ителһә, шул уҡ вклад ставкаһы буйынса 6 айҙан һуң мөрәжәғәт ителһә - вклад асылған (оҙайтылған) көнгә ғәмәлдә булған процент ставкаһының өстән ике өлөшө иҫәбенән.

Әгәр вкладсы (мираҫ алыусы) аҡсаны алыу өсөн Килешеүҙә күрһәтелгән ваҡытҡа мөрәжәғәт итһә, килем ошо осорҙан сығып, Килешеүҙә күрһәтелгән процент ставкаһы буйынса иҫәпләнә. Әгәр вклад тейешле процентлары менән бергә күрһәтелгән ваҡытында талап ителмәгән хәлдә Килешеү тағы ла шунса ваҡытҡа оҙайтыла. Шулай итеп, вкладсы вафат булған осраҡта ла уның һаҡлыҡтағы аҡса суммаһы буйынса проценттар иҫәпләү туҡтатылмай, Килешеү ул төҙөлгән шарттарҙа ғәмәлдә булыуын дауам итә.

### ПОСОБИЕ ТЕЙЕШМЕ?

**Һигеҙ йәшлек ҡыҙыҡайҙы опекунлыҡҡа алғайным. Атаһын үлтерҙеләр, ә әсәһе әсәлек хоҡуғынан мәхрүм ителгән. Белеүемсә, ул яңғыҙ әсә булған. Мәғлүм булыуынса, атаһы үлгәндән һуң балаға ҡараусыһын юғалтыу сәбәпле пособие тейеш, ләкин балалар йортонда миңә, ата-әсәһе никахын рәсми теркәмәгәнлектән, пособие түләнмәйәсәк, тинеләр. Баланың тыуыу тураһында таныҡлығында атаһының исем-шәрифе тулы күрһәтелгән. Беҙгә пособие тейешме, юҡмы икән?**

- Был осраҡта баланың тыуыу тураһында таныҡлығы әсәһе һүҙҙәре буйынса тултырылғанмы, юҡмы икәнлекте тикшерергә кәрәк. Исем-шәрифе күрһәтелгән кеше баланың атаһы тип яҙҙырылған булһа, ысынлап та, ҡараусыһын юғалтыу буйынса пособие тейеш. Баланың атаһын асыҡлау өсөн йәшәгән урынығыҙ буйынса ЗАГС-ҡа мөрәжәғәт итә алаһығыҙ, сөнки бөтә был органдар үҙ-ара бәйләнештә эшләй. Акт яҙыуы буйынса таныҡлыҡтың әсә һүҙҙәре менәнме, әллә башҡа берәй документ нигеҙендәме тултырылыуы күренеп тора. Хәлде аңлатып, ниндәй мәсьәләгә асыҡлыҡ индерергә теләүегеҙ хаҡында ғариза яҙығыҙ һәм һеҙҙең вәкәләтлекте раҫлаусы документығыҙҙы күрһәтегеҙ, шул саҡта һеҙгә был хаҡта мәғлүмәтте бирергә тейештәр.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләнә.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

### Баш ауырыуы



❖ Дегәнәк япрағын эҫе һыуға тығып алырға һәм йоҡлар алдынан 15-20 минутҡа соңҡаға (затылок) һалып, башты целлофан һәм таҫтамал менән урап ҡуйырға.

❖ 20 грамм прополисты 100 грамм спиртҡа һалып, иретергә. Ошо ҡатнашманы рафинад-шәкәргә 40 тамсы тамыҙып ашарға.

❖ 1 ҡалаҡ ваҡланған тарбаҡлы ҡынғырау сәскәһен 1 стакан ҡайнар һыуҙа төнәтеп, көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә.

### Йоҡоһоҙлоҡ

1 ҡалаҡ бесәй үләне (валериан) тамырын, 1 ҡалаҡ арыҫлан ҡойроғо (пустырник) үләнен, 1 ҡалаҡ энәлек сәскәләрен ҡушып, ярты литр ҡайнар һыу ҡойорға. 2 сәғәт төнәтергә. Йылы көйөнә стакандың дүрттән бер өлөшө күләмендә көнөнә 4 тапҡыр эсергә. Төнгөләккә эсә торған төнәтмәгә 1 балғалаҡ бал өҫтәгеҙ.

### Юғары ҡан баҫымы

❖ Ит турағыстан үткәрелгән 1 ҡалаҡ лимон, 1 ҡалаҡ мүк еләген, ярты ҡалаҡ гөлйемеште 1 стакан бал менән болғатырға. Иртән һәм кисен 1-әр ҡалаҡ ашарға. Был файҙалы ҡатышма баш мейеһе ҡан тамырҙары склерозы һәм йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарынан да дауалай.

❖ 1 стакан башлы һуған һутын май айында йыйылған 1 стакан бал менән ҡушып болғатырға һәм ит турағыстан үткәрелгән 50 грамм лимон тышын ҡушырға. Быяла һауытты ябып, һалҡын урында һаҡларға. Көнөнә өс тапҡыр ашағанға тиклем 1 сәғәт алда йәки ашағандан һуң 2-3 сәғәт үткәс 1-әр балғалаҡ ашарға. Дауалау курсы 2 ай. Шулай уҡ баш мейеһе тамырҙары склерозы һәм йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренән файҙалы.

### Ҡан баҫымы түбән булһа

Көн һайын 1 стакан анар (гранат) һуты эсергә.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**




## ҠЫҘ БАЛАЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

### Ауыҙ өсөн ҡағиҙәләр

• Ергә һәм стеналарға төкөрмәгеҙ. Бынын өсөн янығыҙҙа аҡ, кескенә һәм ғәйәт таҙа ҡулъяулыҡ йөрөтөгөҙ. Яҙған, теккән йәки ҡайсы менән бер нәмә киҫкән ваҡытта телегеҙҙе тирбәтмәгеҙ, ирендәрегеҙҙе борғоламағыҙ. Башығыҙҙы бер яҡҡа ауыштырмағыҙ.

• Тәһәрәт алғандан һәм ашағандан һуң һәр ваҡыт ауыҙығыҙҙы яҡшылап таҙартығыҙ. Ауыҙ эсендә һәм теш араларында бер нәмә лә ҡалдырмағыҙ.

### Танау өсөн ҡағиҙәләр

• Ҡулдарығыҙ менән танауығыҙҙы тотоп ултырмағыҙ. Бармаҡтарығыҙ менән соҡомағыҙ. Яланғас ҡул менән йәки кейемегеҙҙең бер урыны менән танауығыҙҙы һемгермәгеҙ. Танау һемгереү өсөн янығыҙҙа ҡулъяулыҡ йөрөтөгөҙ. Кеше ҡулъяулығын тотонмағыҙ.

• Ашаған ваҡытта танау һемгерергә кәрәк булһа, башығыҙҙы бер яҡ ситкә бороғоҙ. Тауышһыҙ ғына һемгерегеҙ. Ҡулъяулығығыҙҙы әҙәм күҙе янында тотмағыҙ. Сөскөргәндә лә ошолай эшләгеҙ.

• Һауала осоп йөрөгән микробтар кереп урынлашмаһын өсөн тәһәрәт алғанда, бигерәк тә ғөсөл ҡылғанда танауығыҙҙы яҡшы йыуығыҙ һәм ялҡауланмай таҙартығыҙ.

### Ҡолаҡ өсөн ҡағиҙәләр

• Ҡолаҡтарығыҙҙы яман һүҙҙәр ишетеүҙән һаҡлағыҙ. Ғәйбәт һәм яла яғыу кеүек шәриғәттә харам булған һүҙҙәрҙе тыңламағыҙ. Әгәр ҙә уларҙы һөйләүсе оло кеше булһа, риза түгеллегегеҙҙе йөҙөгөҙ менән белдереп ултырмағыҙ.Зарар булмаҫлығын белһәгеҙ, бер яҡ ситкә китеп һәм мәжлестән сығып тороғоҙ.Әгәр ҙә иптәшегеҙ булһа,әҙәпле генә түбәндәге кеүек нәсихәт әйтегеҙ: "Һәр кемдә бер төрлө кәмселек булыр, беҙҙең кәмселегебеҙ, бәлки, тағы ла артыҡтыр". Әгәр кесе булһа, шәфҡәтле генә ҡаршы килегеҙ.

• Ҡолаҡтарығыҙҙы, бигерәк тә йоҡонан торғас, таҙа һыу менән йыуығыҙ. Туҙан ояларын һәм бысраҡ йөрөүҙән һаҡлағыҙ.

• Ҙур һәм ауыр алҡалар аҫып, ҡолаҡтарығыҙҙы боҙмағыҙ йәки бөтөнләй таҡмағыҙ. Кәрәкмәгән ваҡытта ҡолаҡтарығыҙҙы һауа инмәҫлек итеп ҡалын шәлдәр менән урап ултырмағыҙ.

• Ҡолаҡҡа зарарлы булған өсөн мөмкин тиклем көслө тауыштарҙан йыраҡ торорғоҙ. Зарур булмағанда йәки табип ҡушмағанда ҡолаҡтарығыҙға мамыҡ тултырып йөрөмәгеҙ.

### Ҡул өсөн ҡағиҙәләр

• Халыҡ алдында ҡул ҡаушырып ултырмағыҙ һәм урынһыҙ ҡул сапмағыҙ. Һүҙ һөйләгәндә ҡулығыҙҙы болғамағыҙ, шыртлатмағыҙ, йөҙөгөҙгә ҡуймағыҙ. Сәс һәм башҡа урындарығыҙ менән уйнамағыҙ.

• Бысраҡ һәм майлы нәмәләр тотҡандан һуң, ҡулдарығыҙҙы йыуығыҙ. Һөлгө менән яҡшылап һөртөгөҙ.Еүеш саҡта кейем, китап йәки башҡа әйберҙәр тотмағыҙ.

• Тырнаҡтарығыҙҙы кеше күҙе алдында киҫмәгеҙ. Тырнаҡтарығыҙ аҫтына йыйылған керҙәрҙе таҙартығыҙ. Тырнаҡтарығыҙҙы үҫтереп йөрөмәгеҙ. Киҫкәндән һуң тура килгән ергә ташламағыҙ. Тәндән айырылған тырнаҡ һәм төктәрҙе бер ергә йыйып торорғоҙ ҙа, һуңынан тупраҡ аҫтына күмегеҙ.

(Дауамы бар).

ТАРИХТЫҢ ҠАНЛЫ БИТТӘРЕ

# ТӘФТИЛӘҮҘӘЙ ҠАТИЛҒА...

## ташҡа яҙылған ҡарғыш таман

**Ваҡыт дарьяһы тарих ҡуласаһын туктауһыҙ әйләндереп торғас, үткән замандың хәл-ваҡиғалары тоноҡланып, онотола барыуы мөмкин. Әммә халыҡ хәтеренән һис ҡасан юйылмаҫ тарихи мәлдәр була. Башҡорт илен ҡанға батырған ҡатил Тәфтиләү-Тевкелевтың яуыз ғәмәлдәре хаҡында аҡ ҡағыҙға яҙылып ҡалһа, ошо фажиғә ташҡа яҙылған халыҡ ҡарғышылай әле булһа азамат йәндәр йөрәген өйкәп тора. Башҡорт дәүләт университеты профессоры, тарих фәндәре докторы Роза БУКАНОВАның Һөйәнтүҙ фажиғәһенең 260 йыллығы айҡанлы 1996 йылда Аҫҡын районында уҙғарылған фәнни-ғәмәли конференцияла яһаған сығышын һеҙҙең иғтибарығыҙға тәҡдим итәбеҙ.**

1735-1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалын баҫтырыуҙа Ҡасимов мырҙаларынан булған Алексей Тевкелев айырыуса ҡанһыҙлыҡ күрһәтә. Ул илленән ашыу башҡорт ауылын яндырта. Себер юлы Балыҡсы олоҫонон Һөйәнтүҙ ауылы иң тәүгеләрҙән булып ҡазаға юлыға: ауылдың 1000 кешеһе атып, штык һәм һөңгө менән сәнсеп үлтерелә, 105 кеше - ҡарт-ҡоро, ҡатын-ҡыҙ, бала-саға - һарайға бикләнгән көйө тереләй яндырыла...

1735-1740 йылдарҙа Башҡортостандың бар территорияһы хөкүмәт ғәскәрҙәренең һуғыш яланына әйләнә. Төбәктең көньяғында һәм көньяҡ-көнсығышында И. К. Кирилов һәм П. Бахметьев командалыҡ итә, уларҙың ставкаһы Һамар ҡалаһында урынлаша. Ҡаҙан губернаторы А. Румянцев Минзәләнән тороп, Башҡортостандың үҙәк һәм төньяҡ-көнбайыш зонаһында эш итә. Төньяҡ-көнсығышта ихтилалды баҫтырыу В. Н. Татищев һәм А. И. Тевкелевҡа йөкмәтелә. Улар төрлө ведомстволарға ҡараһа ла, XVIII быуаттың беренсе яртыһында Рәсәйҙең аяуһыҙ ҡанға батырылған ихтилалы тарихында берҙәй урын алған. И. К. Кирилов Башҡортостанға Сенат тарафынан ебәрелһә, А. Румянцев иң тәүҙә Хәрби Коллегия алдында яуаплылыҡ тота, А. Тевкелев - Сит ил эштәре коллегияһы, В. Татищев Берг-Коллегия вәкиле була.

Рәсәй хөкүмәте исеменән сығыш яһап, уларҙың һәр ҡайһыһы үҙ эшмәкәрлеген Бөйөк Петрҙың эшен дауам итеү рәүешендә күрһәтергә тырыша. Әммә был дөреҫлөккә тап килмәй. Билдәле рус тарихсыһы В. О. Ключевский Петр I вариҫтары тураһында бына нисек яҙа: "Улар эшкә эш араһында һәм барышында ғына, әҙерлекһеҙ өйрәнде, эштең дөйөм планы һәм маҡсаты тураһында уйларға күнекмәне". Ошо дәүерҙең "эшем эйәләре"н ҡылыҡһырлап, ул былай тип өҫтәп ҡуя: "Петр эшен дауам итеү генә түгел, емереү өсөн дә был кешеләрҙең көсө лә, теләге лә етерлек түгел ине; улар уны тик боҙа ғына ала ине".

Ысынлап та, XVIII быуаттың беренсе яртыһында Рәсәйҙең көньяҡ-көнсығыш сиктәрендә алып барылған эске һәм тышҡы сәйәсәтте анализлап ҡараһаң, рус-ҡаҙаҡ бәйләнештәрендә лә, рус-башҡорт мөнәсәбәттәрендә лә аныҡ уйланылған ғәмәлдәр планы булмауын, ниндәй ҙә булһа нигеҙ булырлыҡ стратегик бурыс ҡуйылмауын күрәбеҙ. Сәйәси мәсьәләләрҙең аныҡ булмауы, ғәмәлдәрҙең килешелмәй башҡарылыуы, батша чиновниктарының сикһеҙ амбициялары һөҙөмтәһендә башҡорт халҡы менән бер рәттән, Башҡортостанда яңы тәйәк тапҡан башҡа халыҡтар ҙа ҙур зыян күрә.

Сенаттың обер-секретары, билдәле географ һәм XVIII быуаттың тәүге яртыһының сәйәси эшмәкәре И. К. Кирилов тураһында күп яҙылған. Ул Рәсәйҙең көнсығыш илдәре менән тауар бәйләнештәрен йәнләндереү маҡсатына булдырылған Ырымбур экспедицияһын ойоштороусы була. Ул материктан "Һиндостанды асырға" ниәт ҡылып, Колумб батырлығын ҡабатламаҡсы була. Әлбиттә, ул ҡулланған ысулдар конкистадорҙарҙыҡына оҡшаш була - И. К. Кириловтың ваҡытынан алда вафат булыуы ғына башҡорттарҙы тулыһынса юҡ ителеүҙән ҡотҡарып ҡала.

Ырымбур экспедицияһын ойоштороу эшендә Сит ил эштәре коллегияһы тәржемәсеһе, суҡындырылған Ҡасимов мырҙаһы Алексей Иванович Тевкелев И.К. Кириловтың тоғро ярҙамсыһы була. А. Тевкелевтың сығышы һәм эшмәкәрлегенең тәүге осорҙары хаҡында аҙ билдәле. XIX быуаттың тәүге яртыһында Ырымбур граждан губернаторы булған һәм А. Тевкелевтың сығышы һәм эшмәкәрлеге тураһында тәүге хеҙмәт яҙған Я.В. Ханыков уны "Өфө губернаһының татар мырҙалары ярпығы", тип нарыҡлаған. Билдәле рус тарихсыһы И. Попов А. Тевкелев хаҡында шундай мәғлүмәт бирә: "Үҙе татар сығышлы булып, Ҡасимов, Владимир һәм Керинск өйәҙҙәрендә ризыкланыу урындары (поместья) тотҡан элекке урҙасыларҙың улы һәм еййәне ...". Ҡайһы бер хәҙерге тикшеренеүселәрҙең хеҙмәттәрендә уҙған быуатта Ҡаҙанда йәшәгән тарихсы Шиһабетдин Мәржәниҙең Тевкелевтар нәҫеленең чингизид Ырыҫ хандан килеп сығыуы тураһындағы ҡарашы сағылыш таба.

А.И. Тевкелев шәхесен баһалауға Мәскәүҙәге Боронғо акттарҙың Рәсәй дәүләт архивында һәм Санкт-Петербургтағы Рәсәй дәүләт тарихи архивында тапҡан документтар бер ни тиклем асыҡлыҡ индерә. "Дело об определении Касимовского мурзы Мамета Тевкелева в Посольскую канцелярию переводчиком турецкого и татарского языков" тип аталған документта Тевкелевтың хеҙмәт карьераһының башы хаҡында мәғлүмәт бар. Ул үҙенең шәхси үтенесендә былай тип яҙған: "Державнейший царь, Государь милостивейший! В прошлом, 1716-ом году, в июне месяце, когда по Вашему Царского Величества указу отправлен был в Хиву и другие тамошние области, от гвардии господин капитан князь Александр Бекович-Черкаской и проездом от Москвы к Астрахани взял меня, нижеимянованного к делам Вашего Величества - турецкого и татарского языков за переводчика, при котором я был за морем на Красных водах и в Тюк-Краганской пристани с вышеписанного июня по апрель месяц 1717 году. И в том апреле, по возвращении ево из тех мест, паки в Астрахань, отправил господин князь Черкаской меня в Персиду к господину посланнику Артемию Петровичю Волынскому с письмами. И те письма господин Волынский приняв, удержал меня при себе, где я по моей должности Вашему Царскому Величеству служил со усердием до самого его, господина посланника Волынского возвращения в Россию.

> ***1735-1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалын баҫтырыуҙа Ҡасимов мырҙаларынан булған Алексей Тевкелев айырыуса ҡанһыҙлыҡ күрһәтә. Ул илленән ашыу башҡорт ауылын яндырта. Себер юлы Балыҡсы олоҫоноң Һөйәнтүҙ ауылы иң тәүгеләрҙән булып ҡазаға юлыға: ауылдың 1000 кешеһе атып, штык һәм һөңгө менән сәнсеп үлтерелә, 105 кеше - ҡарт-ҡоро, ҡатын-ҡыҙ, бала-саға - һарайға бикләнгән көйө тереләй яндырыла...***

Всемилостивейший государь, прошу Вашего Величества, вели, Государь, за мои вышеобъявленные верно усердные и прилежные службы и труды быть в Вашей Государственной посольской канцелярии турецкого и татарского языков переводчиком и учинить Вашего Царского Величества жалованье против других переводчиков.

Вашего Величества нижайший раб, касимовский мурза Мамет Тевкелев. 1719: генваря в... К сему прошению Маммет Тяфкелев руку приложил".

Тевкелевтың үҙен "Касимов мырҙаһы" тип атауы уның милли сығышын аныҡ рәүештә билдәләү мөмкинлеген бирмәй. Ҡасимов мырҙалары араһында башҡа төрки телле ҡәүем вәкилдәренең булыуы мөмкин. Үрҙә килтерелгән документ А. Тевкелевтың Сит ил эштәре коллегияһы канцелярияһында дәүләт хеҙмәтенә күскән осорон сағылдыра. Унда Тевкелев күрһәткән хеҙмәттәр ентекләп бәйән ителһә лә, сығышы хаҡында бер ни ҙә әйтелмәй. Ошо эш менән бәйле башҡа документтарҙа ла был турала мәғлүмәт юҡ. Шулай ҙа уның ағай-энеләре Мортаза һәм Рамазан Тевкелевтар иҫкә алына. Мортаза Тевкелев көнсығыш телдәре белгестәренең береһе, тип иҫәпләнгән. Ул саҡта суҡындырылмаған Мөхәммәт Тевкелевтан һынау алыу уға йөкмәтелгән дә инде. Тевкелевтар, күрәһең, Петр дәүерендә үҙҙәренең шәхси сифаттарына таянып, күтәрелеп китә алған Рәсәй чиновниктарына ҡарай. Уларҙың затлы нәҫелдән булыуын алһаҡ, был мәсьәләгә бик һиҙгер булған көнсығыш донъяһы Тевкелевтарҙы затлылар рәтенә индермәгән: уларҙың ата-бабалары башҡорт һәм ҡаҙаҡ сығанаҡтарында бер ваҡытта ла иҫкә алынмаған. Нисек кенә булмаһын, Тевкелев үҙе иҫән булғанда былдай һорау күтәрелмәй. Шул уҡ яңы суҡындырылған А. Бекович-Черкасский һәм А. Урусов ысынлап та затлы нәҫелдән булып, барса сығанаҡтарҙа ла кенәз тип атала.

***✓ Башҡорт старшиналары, Ырымбур ҡалаһын төҙөүгә ҡаршылыҡ күрһәтеү маҡсатынан Үрге Яйыҡ пристаненә йүнәлгән аҙыҡ-түлек обозына һөжүм итә. А. И. Тевкелев башҡорттар менән көрәш башлай.***




**Асҡын районының Солтанбәк ауылында Тәфтиләүгә ҡарғыш яҙылған стела.**

А. И. Тевкелевтың хеҙмәт баҫҡыстарынан үрләүе Рәсәй дәүләтенең көньяҡ-көнсығыштағы сәйәсәтенең әүҙемләшкән сағына тура килә. 1730 йылда Кесе Ҡаҙаҡ жузы ханы Әбелхәйер башланғыcы менән Ҡаҙағстанды Рәсәйгә ҡушыу буйынса һөйләшеүҙәр башлана. Бында Бөрйән олоҫоноң арҙаҡлы башҡорто Алдар Иҫәкәйев аралашсы булып тора. Ҡотломбәт менән Сәйетҡол етәкселегендәге ҡаҙаҡ илселеге 1730 йылдың июлендә Алдарбайға килеп етә һәм Өфө воеводаһы бригадир Бутурлин ҡаҙаҡ илселәрен оҙатып йөрөү өсөн Өфө дворяндарын ебәргәнгә тиклем уның олоҫонда була. Улар Өфөнән Мәскәүгә юл тота. Илселек составында Өфө дворяндарынан һәм казактарҙан тыш, арҙаҡлы башҡорттарҙан үҙ кешеләре менән Алдарбай Иҫәкәйев һәм Таймаҫ Шаимов була. 1731 йылда өҫтәмә мәғлүмәт йыйыу һәм Кесе жуз ҡаҙаҡтарының Рәсәйгә ҡушылыуы буйынса алдан һөйләшеүҙәр башлау өсөн ҡаҙаҡ илселәре менән Сит ил эштәре коллегияһы тәржемәсеһе А.И. Тевкелев та ебәрелә. Төрки халыҡтарҙың телен һәм психологияһын яҡшы белеү, тәү осорҙа башҡорттар яғынан ҙур таяныс табыу уға уңыш ҡаҙанырға булышлыҡ итә. Әлбиттә, уның уңышлы эшмәкәрлегенең сере шәхси сифаттары менән дә бәйле: тырышлығы, шәхси мөнәсәбәттәр урынлаштырып, уларға таяна алыуы уға тиҙ арала баш әйләнерлек карьера яһау мөмкинлеген бирә. Үҙ маҡсатына өлгәшеү өсөн Тевкелев бер ниҙән дә сирҡанмай: башҡорт ихтилалдарын баҫтырғанда иҫ китмәле йыртҡыслыҡ ҡылыу, шпионлыҡ итеү, үҙе менән бергә эшләгәндәргә доностар яҙыу уға хас була.

Рәсәй илселеге килеүе бар ҡаҙаҡ далаһын ҡуҙғытып ебәрә, сыуалыштар башлана. Әбелхәйер ханға һәм уның яҡлыларға уның менән риза булмаусы старшиналарҙы тынысландырыу бик ауырға төшә. "При чем и бывшие с ним, Тевкелевым, башкирские старшины не малую верность ко успокоению того своевольного народа старание прилагали, а особливо Таймас-батыр, будучи у киргис-кайсак славным башкирским наездником (или богатырем)", - тип яҙа П. И. Рычков. Тевкелев үҙ кешеләре менән аманатлыҡҡа алына. Таймаҫ Шаимовтың йоғонтоһо һөҙөмтәһендә генә илселектең бер өлөшө Рәсәйгә әйләнеп ҡайта.

Ырымбур экспедицияһы Башҡортостанға килеү һәм Ырымбур ҡәлғәһенә нигеҙ һалыу менән И. К. Кирилов Тевкелевты Урал аръяғына ебәрә. Уға Себер яғы ауылдарында провиант туплап, Яйыҡ йылғаһы буйлап яңы төҙөлөүсе ҡәлғәгә оҙатыу бурысы йөкмәтелә. Башҡорт старшиналарының бер өлөшө, Ырымбур ҡалаһын төҙөүгә ҡаршылыҡ күрһәтеү маҡсатынан Үрге Яйыҡ пристаненә йүнәлгән аҙыҡ-түлек обозына һөжүм итә. А. И. Тевкелев, үҙенә ҡушылған бурысты үтәүҙән тайпылып, башҡорттар менән көрәш башлай. Башҡорт старшиналары белдереүенсә, ул ихтилалдың башҡа яҡтарға йәйелеп китеп, бөтөн Башҡортостанға таралыуына сәбәпсе була. Тевкелев ҡылған яуызлыҡтар башҡорттарҙың ғына түгел, Кесе һәм Урта жуз ҡаҙаҡтарының да асыуын ҡабарта. Рәсәй императрицаһына яҙған хаттарының береһендә Әбелхәйер хан Ҡаҙағстан менән сауҙа бәйләнештәрен көйләргә ебәрелгән мырҙаның башҡорттарҙы юҡ итеү, уларҙың ҡатындарын, бала-сағаларын суҡындырыу менән булышыуына ризаһыҙлыҡ белдерә. Шул уҡ ваҡытта аҙыҡ-түлекһеҙ ҡалған Ырымбурҙа 700-гә яҡын һалдат һәм казак астан үлә...

Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышында А.И. Тевкелев тау заводтары начальнигы В.Н. Татищевтың ҡул аҫтына эләгә. Администратор, тау инженеры, арҙаҡлы географ һәм тарихсы булараҡ, Татищев Уралда танылыу таба. 1721-1722 йылдарҙа уҡ ул Екатеринбургҡа нигеҙ һала, бер нисә тау заводын ҡора, тау уставын төҙөп, Уралда тау сәнәғәте нигеҙҙәрен булдырыуға ҙур өлөш индерә. 1734 йылдың авгусында ул тау заводтары начальнигы вазифаһында яңынан Екатеринбургҡа ебәрелә. Уның Уралға килеүе Ырымбур экспедицияһы эшмәкәрлеге менән тап килә. Татищевҡа Башҡортостандың уның ҡулы аҫтындағы төньяҡ-көнсығыш өлөшө иҫәбенә Ырымбур экспедицияһын матди яҡтан һәм аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеү бурысы йөкмәтелә. В.Н. Татищев башҡорттар араһында талапсан, әммә ғәҙел кеше булараҡ билдәле була.

В.Н. Татищев шулай уҡ баш күтәргән башҡорттарға ҡаршы көрәшкә йәлеп ителә. Батша хакимиәте вәкиле булараҡ, Башҡортостанда карателдәр ҡылған яуызлыҡтар өсөн өлөшләтә яуаплылыҡтан ул да азат түгел. Әммә башҡорттарҙы күпләп ҡырыуҙа ул шәхсән ҡатнашмай. Киреһенсә, И.К. Кириловтың вафатынан һуң Ырымбур экспедицияһына етәксе итеп ҡуйылғас, ул мөмкин булған сараларҙы ҡулланып, баш күтәргән башҡорттарҙы тынысландырырға һәм төбәктә тәртип урынлаштырырға тырыша. Ул законһыҙ ҡулға алынған ихтилал башлыҡтарын ireккә сығарырға бойора, 1737 йылдың йәйенә планлаштырылған ҙур хәрби операцияны уҙғартмай, вазифа биләүселәрҙең уҫал ниәт менән башҡарылған эштәрен фашлай. Мәҫәлән, ул Өфө воеводаһы Шемякинды Ырымбур экспедицияһы кассаһынан ҙур күләмдә аҡса юғалыуы өсөн вазифаһынан бушатып, судҡа бирә, бухгалтер (буласаҡ тарихсы) П.И. Рычковты 12 көнгә карцерға ябып ҡуя. В.Н. Татищевтың талапсанлығы һәм ҡаты холҡо күптәргә ҡурҡыу һала. Ялағай һәм мәкерле Тевкелев Татищевҡа ҡарата досье туплай башлай, һәм уның доносы буйынса 1739 йылдың ғинуарында В. Н. Татищев Ырымбур комиссияһының баш командиры вазифаһынан бушатыла. Уның урынына князь В.А. Урусов ебәрелгәс, уның ҡулы аҫтында язаланған унар меңләгән башҡорттоң ҡаны менән И.К. Кирилов һәм А.И. Тевкелев ҡылған енәйәт эҙҙәре йыуыла.

Тарихта шулай ҙа була: кемдер ҡылған яҡшы эштәр онотолоуға дусар ителә, ә яман әҙәмдәрҙең исемен хәҙер ҙә күтәрергә тырышыусылар табылып тора. В.Н. Татищевтың Екатеринбург ҡалаһына нигеҙ һалыуын танымаҫҡа тырышһалар ҙа, А.И. Тевкелев Силәбе ҡалаһын нигеҙләүсе булып китте: ысынбарлыҡта ул шул уҡ Татищевтың ҡушыуы буйынса башҡорт старшиналары оҙатыуында Силәбе ҡалаһы һалына башлаясаҡ урында булып, ошо турала ни барыһы донесение яҙып ебәреп өлгөргән. А.И. Тевкелев һәм Ырымбур экспедицияһының башҡа чиновниктары һуңынан ҙур ер биләүселәр, заводчиктар булып китә. Мәҫәлән, А.И. Тевкелевҡа 1736-1737 йылдарҙа Башҡорт эштәре комиссияһынан крепостной крәҫтиәндәр сифатында башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары һәм йәш бала-сағаларҙан 38 кеше бирелә. Аяуһыҙ шарттарҙан уларҙың 26-һы үлеп, 1740 йылға 12 кеше генә иҫән ҡалған була. Тевкелев крепостнойҙары араһында Ҡаҙан губернаһынан тотош ауылы менән күсерелеп килтерелгән татарҙар ҙа була.

**Был мәҡәләлә батша хакимиәтенең Һөйәнтүз фажиғәһенә туранан-тура ҡағылышы булған ике вәкиленең генә эшмәкәрлеге яҡтыртылды. 1735-1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалының баҫтырылыуы халҡыбыҙ өсөн катастрофик хәлгә тиң. Төбәктең иҡтисады тулыһынса емертелә, рус булмаған халыҡтарҙы христианлаштырыу көсәйә. Крепостной хоҡуҡтың ни икәнен дә белмәгән башҡорт йәмғиәтенә уның иң иләмһеҙ формаларын күрергә тура килә. Бер үк ваҡытта Исламға ла баҫым башланып, шуның һөҙөмтәһендә суҡындырылған мырҙаның XIX быуаттағы нәҫел-нәсәбе Сәлимгәрәй (Александр) Тевкелев хатта эске Рәсәй мосолмандарының мөфтөйө итеп тәғәйенләнә.**

## *ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

**Ошо көндәрҙә билдәле режиссер һәм оператор, Башҡортостандың видеофильмдар төшөрөү оҫтаһы Рияз Исхаҡов етәкселегендәге ижади төркөм - йәш композитор Урал Иҙелбаев, ҡуйыусы рәссам Арыҫлан Бикбаев, этнограф Гөлгөнә Баймырҙина, хореограф Йәмилә Бикбаева һәм оператор Радик Килмәмәтов төшөргән "Һөйәнтөҙ" музыкаль фильмының премьераһы уҙғарылды. Ижадсылар был эшен III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына үҙенсәлекле бер бүләк, тип тәҡдим итә.**

Исеменән күренеүенсә, фильмдың сюжетына 1735-1740 йылдарҙа бөтөн Башҡортостанды тетрәткән халыҡ ихтилалын вәхшиҙәрсә баҫтырыу, кешеләре менән юҡ ителгән Һөйәнтүз кеүек йөҙәрләгән башҡорт ауылдарын яндырыу ваҡиғалары һалынған. Әммә музыкаль фильмда, ижади әҫәр булараҡ, айырым бер тарихи ваҡиғаны түгел, башҡорт халҡының тарихи фажиғәһен художестволы ысулдар менән дөйөмләштереп, замандаштарыбыҙ күңеленә еткерә алыу маҡсат итеп ҡуйылған. Шуға күрә Һөйәнтүздә ҡылынған ҡот осҡос яуызлыҡты был фильмдың идеяһын асыу өсөн ҡулланылған образ рәүешендә ҡарау фарыз.

Ғөмүмән, ижади төркөмдөң ошо әҫәрен уңышлы тип нарыҡларға ерлек бар. Гүзәл тәбиғәт күренештәре, башҡорт моңдары менән халҡыбыҙға хас ғөрөф-йолалар уғата байытылып, үҙенсәлекле гармонияға ҡоролған йәйләү тормошоноң бер илаһи мәле һүрәтләнә бында. Тәү ҡарамаҡҡа, фильм этнографик йүнәлеш алған кеүек тойола. Йәш ҡыҙҙың тәүләп ғашиҡ булыуы, ә егеттең икенсе һылыу менән ҡауышыуы, туй йолаһы күренештәре - былар барыһы ла наҙлы, лирик музыкаль фон һәм ритм-хәрәкәт үҙенсәлектәре менән биҙәлгән картинаны барлыҡҡа килтерә. Әммә ҡәҙимге тыныс башҡорт тормошона ваҡыты-ваҡыты менән һандалда тимер сүкеү күренеше ялғана: ҡыҙған тимер киҫәгенән әллә һөңгө, әллә урыҫ штығы сүкелә. Юҡ, тимер сүкелмәй, башҡортҡа үлем сүкелә...

Фильм йәшәү һәм үлем ҡапма-ҡаршылығын, изгелек һәм яуызлыҡ, азатлыҡ һәм ҡоллоҡ араһындағы мәңгелек көрәште һүҙһеҙ-ниһеҙ, көй-моң һәм сюжет линияһы берлеге аша һүрәтләүгә ҡоролған. Фильмдың исемһеҙ геройы дошманға бәддоғаһын ташҡа үҙ ҡаны менән яҙып ҡалдырһа, башҡорттоң ҡатил йәнле заттарға мәңгелек ҡарғышы йән тетрәткес "Тәфтиләү" йыры булып яңғырай. Сабыйҙарҙы терерәй утҡа ташлаусыларға, кеше үлтереүсе яуыз әҙәмдәргә ярлыҡау юҡ, халыҡ ҡарғышы һәм Хоҙай хөкөмө уларҙы теге донъяла ла язаһыҙ ҡалдырмаҫ, иншалла.

**Әйткәндәй, һүҙ ыңғайында фильм исеменең "Һөйәнтөҙ" формаһында бирелеүе менән бәйле ҡарашымды белдереү урынлы булыр, тим. Урман-тауҙарға, йылға-күлдәргә, тирә-яҡ мөхитебеҙҙәге башҡа тәбиғәт объекттарына халыҡ үҙе исем биргән. Һәр һөйләштең үҙенә генә хас булған һүҙ-атамалар була. "Түз" атамаһы ҡариҙел һәм ғәйнә һөйләшендә йылға тамағын аңлата, был һүҙҙең башҡа һөйләштәрҙә булмауы ла билдәле. Шулай булғас, ошо атаманы "төҙ" йәиһә "түҙ" формаһында ҡулланыу уның мәғәнәһен үҙгәртә, ә был тел ҡанунын боҙоуға тиң. "Һөйән" (ҡариҙел һөйләшендә - "сөйән") атамаһына килгәндә, ошо исемдәге йылға булыуын иҫәпкә алмайынса булмай. "Һөйән" һүҙе башҡорт һөйләштәрендә ҡабығы һыҙырылған йыуан йүкә ағасын аңлата. Тик ошо мәғәнәләге һүҙҙең йылға исеменә әйләнеп китеүе ҡыҙыҡһынған кешене ғәжәпләндермәй ҡалмай. Урындағы йылға буйында йүкәлек булып, шуны киҫкәндәр икән, тиһәң, башҡорт бер ҡасан да йылға буйында ағас йыҡмаған. Тимәк, бында ниндәйҙер икенсе мәғәнәләге һүҙҙе эҙләү яҙыҡ булмаҫ. Ә телебеҙҙә "һеүән" (варианты - "сеүән") һүҙе булып, ул йылға төшөнсәһе менән бермә-бер бәйле: һөйләштәрҙә йылғаның ағын, шаршы урынын, мурҙа йәиһә тарайтып яһалған мурҙа тамағын, балыҡ һалып йөрөтә торған кәрзинде тап ошо һүҙ менән атайҙар. Әйткәндәй, Өфөгә яҡын ғына ерҙә Бәрһеүән исемле йылғасыҡ булыуын күптәр беләлер. Шуныһы ҡыҙыҡ: "түз" һәм "һеүән" һүҙҙәренең икеһе өсөн дә тар урын, тамаҡ төшөнсәләре уртаҡ булып тора. Тар тамаҡлы мурҙаны, йәғни һеүәнде йылғаның шәп аҡҡан шаршы, һеүән еренә һалыу кәрәклеген һәр балыҡсы белә. Беҙ хәҙер Һөйәнтүз тип йөрөткән атаманың ҡасандыр (ошо исемдәге ауылдың юҡ ителеүенә лә 275 йыл тулып килә бит) "Һеүәнтүз" ("Сеүәнтүз") рәүешендә булып, әйтелеш оҡшашлығы арҡаһында үҙгәреп китеүен фаразларға була.**

**Бәҙри ӘХМӘТОВ әҙерләне.**

# Иҫәпленең... йәки Башҡорттарҙың хәҙерге

**Ошо көндәрҙә III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына арналған сараларҙың береһе - "Башҡорт халҡының демографик үҫеше проблемалары" тип аталған түңәрәк ҡор уҙғарылды. Ҡоролтайҙың Башҡарма комитеты, Башҡорт дәүләт университеты, Башҡортостан Фәндәр академияһының Ижтимағи-сәйәси һәм хоҡуҡи тикшеренеүҙәр һәм Гуманитар тикшеренеүҙәр институттары ойоштарған күркәм сарала тиҫтәләгән билдәле һәм йәш ғалимдар - тарихсылар, социологтар, демографтар, философтар, иҡтисадсылар, аспиранттар, магистранттар, шулай уҡ дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре ҡатнашты. Һеҙҙең иғтибарығыҙға ошо түңәрәк ҡорҙо ойоштороу комитеты рәйесе, Башҡорт дәүләт университетының тарих факультеты деканы, фән докторы, профессор Марат ҠОЛШӘРИПОВтың фәһемле сығышын тәҡдим итәбеҙ.**

## Башҡорт хәлен тарих белә

Башҡорттарҙың XX быуат аҙағындағы - XXI быуат башындағы демографик хәлен өйрәнеү быйылғы халыҡ иҫәбен алыу алдынан айырыуса көнүҙәк һәм әһәмиәтле проблема булып тора. Башҡорт халҡының тарихи демографияһының иҫ киткес ҡатмарлы һәм тотороҡһоҙ булып, элек тә, хәҙерге заманда ла ҙур тайпылыштарға дусар булғанын әйтеп үтергә кәрәк. Былар бөтәһе лә драматик тарихи ваҡиғалар, катаклизмдар менән бәйле булып, XVIII һәм XIX быуаттарҙа башҡорттарҙың демографик хәленә ауыр йоғонто яһаған.

XVIII быуатта башҡорт ихтилалдарын аяуһыҙ баҫтырыу халҡыбыҙҙың һан яғынан кәмеүенә килтерһә, XIX быуат дөйөм алғанда уларҙың демографик үҫеше өсөн уңайлыраҡ була. XIX быуат башында башҡорттарҙың һаны яҡынса 200 мең кеше булһа, 1897 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу барышында 1 миллион 311 мең башҡорт теркәлгән, йәғни бер быуат эсендә улар 6,5 тапҡыр артҡан.

Әммә XX быуатта башҡа төрки халыҡтарының демографик үҫеш кисереүенә ҡарамаҫтан, ошо дәүерҙең трагик хәл-ваҡиғалары һөҙөмтәһендә башҡорттарҙың һаны катастрофик рәүештә кәмей бара. Донъя халыҡтары этнодемографияһы буйынса билдәле белгестәр С. И. Брук һәм В. М. Кабузан Ваҡытлы хөкүмәт тарафынан уҙғарылған 1917 йылғы иҫәп алыу материалдары нигеҙендә ул саҡта Рәсәйҙә 1 732 800 башҡорт йәшәүен асыҡлай. Ә 1989 йылғы Бөтә Союз халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләре буйынса СССР-ҙа 1 449 157 башҡорт кешеһе теркәлгән. 1917 йылда башҡорттарҙың реаль һанын 1 500 000 кеше, тип алған хәлдә лә, XX быуатта башҡорттарҙа демографик үҫеш булмауы күренә. Шул уҡ ваҡытта ошо осорҙа ҡайһы бер төрки халыҡтарының бер нисә тапҡырға артыуы күҙәтелә: ҡырғыҙҙар һәм төркмәндәр - 10, әзербайджандар - 6, үзбәктәр - 4, татарҙар һәм гагауздар - 3, балҡар һәм сыуаштар 2 тапҡырға күбәйә.

Ошондай демографик күрсәткестең сәбәптәре ниҙә булды һуң? Иң элек 1917 йылдан 1921 йылға тиклем дауам иткән граждандар һуғышы шарттарында милли үҙбилдәләнеш өсөн ҡоралды көрәшкә күтәрелгән башҡорт халҡының ҡыҙыл һәм аҡ террор объектына әйләнеүен, 1920-1921 йылдарҙағы ҡот осҡос аслыҡтан күпләп ҡырылыуын, шул уҡ йылдарҙа барған баш күтәреүселәр хәрәкәтенең аяуһыҙ баҫтырылыуын иҫкә алмайынса булмай. Дөрөҫөн әйткәндә, 1918-1921 йылдарҙа Ҡыҙыл Армия һәм яҙалаусы чекист отрядтары тарафынан башҡорттарға ҡарата геноцид сәйәсәте уҙғарылып, ҡыҙылдар тарафынан контрреволюцион халыҡ тип иғлан ителгән башҡорттар ҡанға батырыла. Тап шуның арҡаһында 1926 йылға башҡорттарҙың һаны 1 миллионға тиерлек кәмей.

1929-1932 йылдарҙа көсләп коллективлаштырыу, 1937 йылғы Сталин репрессиялары шулай уҡ башҡорттарҙың һиҙелерлек кәмеүенә, үҫеп килгән йәш башҡорт интеллигенцияһының юҡ ителеүенә килтерә. Тарихсы Б.Х. Юлдашбаев иҫәпләүенсә, 30-50-се йылдарҙа 6 мең 550 башҡорт кешеһе репрессиялана.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында СССР-ҙың бар халыҡтары ла ҙур зыян күрә, шулай ҙа башҡорттар кисергән демографик юғалтыуҙы айырыуса ауыр, тип атап була. Мәҫәлән, составында 80 процент башҡорт булған берҙән-бер милли хәрби часть - 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы Дон яландарында немец танкыларына ҡаршы ебәрелеп, иҫ китмәле юғалтыуҙарға дусар була, һөҙөмтәлә һуғыш аҙағына табан ошо дивизияла ни барыһы 10 процент милләттәшебеҙ тороп ҡала.

***XX быуатта башҡа төрки халыҡтарының демографик үҫеш кисереүенә ҡарамаҫтан, ошо дәүерҙең трагик хәл-ваҡиғалары һөҙөмтәһендә башҡорттарҙың һаны катастрофик рәүештә кәмей бара. Донъя халыҡтары этнодемографияһы буйынса билдәле белгестәр С. И. Брук һәм В. М. Кабузан Ваҡытлы хөкүмәт тарафынан уҙғарылған 1917 йылғы иҫәп алыу материалдары нигеҙендә ул саҡта Рәсәйҙә 1 732 800 башҡорт йәшәүен асыҡлай. Ә 1989 йылғы Бөтә Союз халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләре буйынса СССР-ҙа 1 449 157 башҡорт кешеһе теркәлгән. 1917 йылда башҡорттарҙың реаль һанын 1 500 000 кеше, тип алған хәлдә лә, XX быуатта башҡорттарҙа демографик үҫеш булмауы күренә. Шул уҡ ваҡытта ошо осорҙа ҡайһы бер төрки халыҡтарының бер нисә тапҡырға артыуы күҙәтелә: ҡырғыҙҙар һәм төркмәндәр - 10, әзербайджандар - 6, үзбәктәр - 4, татарҙар һәм гагауздар - 3, балҡар һәм сыуаштар 2 тапҡырға күбәйә. Ошондай демографик күрсәткестең сәбәптәре ниҙә булды һуң?***

## Геноцидтан - этноцидҡа

Артабан башҡорттар, башҡа урыҫ булмаған халыҡтар кеүек үк, этноцид сәйәсәте объектына әйләнә. Этноцид кешеләрҙе физик яҡтан юҡ итеүгә ҡоролмаһа ла, этностың яңы сифатҡа түгел, ә ниндәйҙер этностан тыш, йәиһә этностан өҫтөн торған икенсе бер халәткә күсерелеүен аңлата. Был осраҡта этник берәмектең эстән тарҡатылыуы тураһында һүҙ бара. Киләсәктә кешелектең милләтһеҙ буласағына нигеҙләнгән спекулятив-утопик ҡарашҡа ярашлы бойомға ашырылған этноцид сәйәсәте әле күптән түгел генә алып барылған коммунистик төҙөлөш тәғлимәте һәм ғәмәлиәте өсөн бик уңайлы була. Ошо сәйәсәт XX быуаттың 20-се йылдарынан уҡ төрлө формаларҙа киң таралыу табып, һуғыштан һуңғы осорҙа тағы ла нығыраҡ көсәйеп китә. Был йылдарҙа революцияға тиклем башҡорттарҙың юҡҡа сығыуға дусар ителеүе тураһындағы фекер йәмғиәт аңына айырыуса ныҡ һеңдерелеп, халыҡтың мәҙәни мираҫы - теле, әҙәбиәте, ғөрөф-ғәҙәттәре тулыһынса инҡар ителә. Үҙҙәренең тарихын, үҙенсәлекле мәҙәниәтен онотоуға дусар булған башҡорттар ҙа аҡрынлап илһеҙ-йортһоҙ маңҡортҡа әйләнергә тейеш була.

60-80-се йылдарҙа ялған интернационалистик лозунгылар аҫтында барған милли сәйәсәттә тупаҫ хаталарға һәм яҙыҡтарға юл ҡуйыла. Барса милләт һәм халыҡтарҙы бик тиҙ арала яҡынлашыуға этәреп, уларҙы "берҙәм совет халҡы" составында бөтөнләйгә юҡҡа сығарыу идеяһы алға һөрөлә. Бәләкәй милләттәргә юҡҡа сығыу хәүефе тыуҙырған ассимиляция процестары, милләт-ара никахтар хуплау таба. Тап ошо осорҙа Башҡортостанда экологик ситуацияның киҫкенләшеүе лә республикалағы этнодемографик хәлгә кире йоғонто яһай. Ғөмүмән, был ваҡытта этноцид сәйәсәте үҙенең иң юғары нөктәһенә етә: милли мәктәптәр ябыла, төп халыҡтың тарихы һәм мәҙәниәте өйрәнелмәй, туған тел һәм әҙәбиәт предметтары уҡытылмай башлай. Тыуған тамырҙарынан айыртылған, милли үҙаңын юғалтҡан тотош бер быуын барлыҡҡа килә.

## Милли үҙаңды юғалтыу мәктәптән башлана

XX быуатта башҡорттарҙың ассимиляцияға дусар ителеүен уларҙың этнодемографияһында ыңғай үҙгәрештәр булмауының сираттағы сәбәбе итеп ҡарарға кәрәк. Бөтә XX быуат дауамында республикала йәшәүсе башҡорттарҙың бер өлөшө, бигерәк тә төньяҡ-көнбайыш һәм төньяҡ райондарҙа көн иткәндәре, үҙҙәренең тарихын, телен, мәҙәни традицияларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен, милли үҙенсәлеген юғалта барып, башҡа милләтте, атап әйткәндә, татар милләтен тулыландырҙы. Мәҫәлән, 1926 йылдан 1939 йылға тиклем, йәғни ни барыһы 13 йыл эсендә, Башҡортостанда йәшәүсе татарҙар һаны 400 меңдән 777 меңгә етә. Татар халҡы 377 меңгә артҡан бер ваҡыт арауығында республикабыҙҙағы башҡорттар бары 129 меңгә күбәйә. Был осраҡта 30-сы йылдар башынан Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш һәм төньяҡ районларындағы башҡорт мәктәптәренең башҡорт телендәге дәреслектәр булмауына һәм башҡорт телен белгән уҡытыусылар етешмәүенә һылтанып, татар телендә уҡытыуға күсерелеүен иҫәпкә алырға кәрәк.

Наркомпростың статистик мәғлүмәттәренә ҡарағанда, Бөрө кантонының Аҫҡын, Әсән, Байҡыбаш, Борай, Краснохолм, Ҡыҙылъяр, Яңы Ҡабан, Иҫке Балтас, Тәтешле, Яңауыл һәм башҡа олоҫтарында 1923-1924 уҡыу йылында 131 башҡорт, 10 татар, 112 урыҫ, 47 мари һәм башҡа I баҫҡыс мәктәптәре эшләй. Был мәктәптәрҙә 6959 башҡорт (40,1%), 488 татар (2,8%), 7240 урыҫ балаһы (41%) уҡый. Ә 30-сы йылдар аҙағына Бөрө кантоны территорияһында бер генә башҡорт мәктәбе лә ҡалмай: улар барыһы ла татар телендә уҡытыуға күсерелә. Наркомпрос документтарына ярашлы, ошо уҡыу йылында Бәләбәй кантонында - 68, Өфө кантонында 51 беренсе баҫҡыс башҡорт мәктәбе булып, артабан шулай уҡ юҡҡа сыға.

Район халыҡ мәғарифы бүлектәре отчеттарында 1933 йылдың 1 сентябренә Ҡариҙел районындағы 40 мәктәптең 13-дә башҡортса уҡытылыуы, Туймазы районында 1190 уҡыусыһы булған 14 беренсе баҫҡыс башҡорт мәктәбе һәм 472 уҡыусылы 2 башҡорт крәҫтиән йәштәре мәктәбе, Баҡалы районында 18 беренсе баҫҡыс башҡорт мәктәбе һәм 3 башҡорт крәҫтиән йәштәре мәктәбе теркәлгән. 40-сы йылдар башына был районларҙа бер башҡорт мәктәбе лә ҡалмай.

Былдай сәйәсәт һуғыштан һуң да дауам итә, һәм уның һөҙөмтәләре башҡорт һәм татар мәктәптәре нисбәте буйынса статистика мәғлүмәттәренән яҡшы күренә. Мәҫәлән, 1939 йылдан 1968 йылға тиклем Башҡортостандағы татар мәктәптәре һаны 1085-тән 1174-кә етһә, башҡорт мәктәптәре 1256-нан 785-кә тиклем кәмей. Шулай итеп, башҡорттарҙың дөйөм һанының кәмей барыуын төп этносҡа ҡараған йәш быуындарҙы татар телендә уҡытыу арҡаһында татарлашыу процесының көсәйеүе менән генә аңлатып була. Тап шуның өсөн 1979 йылғы халыҡ иҫәбен алыуҙа башҡорттарҙың 32 проценты татар телен туған теле итеп күрһәтә. Быны ошо сәйәсәт һөҙөмтәһендә 1989 йылғы халыҡ иҫәбен алыу материалдарында төньяҡ-көнбайыш районларының бик күп башҡорт ауылдары татар ауылдарына әйләндерелә. Мәҫәлән, Саҡмағош районының Имәнлеҡул ауылында революцияға тиклемге ревизия материалдарында, совет осороноң тәүге иҫәп алыуҙарында тик башҡорттар ғына теркәлгән: 1795 йылда - 113, 1855 йылда - 318, 1870 йылда - 333, 1917 йылда - 913, 1920 йылда - 935, 1959 йылда - 941 башҡорт кешеһе йәшәгән.

# ХАЛҠЫ ТЕҮӘЛ,

## демографик хәле тураһында

Ә бына 1989 йылда ошо ауылдың барлыҡ 679 кешеһе лә татар тип теркәлә. Дүртөйлә районының Миңеште һәм Шишмә ауылдары ла ошондай уҡ метаморфоза кисерә: 1989 йылдан башлап улар татар-башҡорт ауылдары иҫәбенә инеп китә. Әйткәндәй, Башҡортостан телевидениеһы алып барған "Бер ауылдың тарихы" тапшырыуҙарында ҡатнашҡан төньяҡ-көнбайыш һәм төньяҡ башҡорттары, ҡағиҙә буларaҡ, үҙҙәренең туған телен юғалтыу сәбәбен мәктәптәрҙә татар телендә уҡытыуға күсеү менән аңлата.

### Яҙыҡ сәйәсәт милләт киләсәгенә хәүеф тыуҙыра

70-се йылдарҙың икенсе яртыһында Башҡорт АССР-ының көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш районларында башҡорт мәктәптәрен тергеҙеүгә уҡталыш яһала. Әммә был мәсьәләне ихтыяри юл менән, бер ниндәй фәнни-технологик әҙерлекһеҙ хәл итеүгә өҫтөнлөк бирелә. Провокацияға торошло осраҡтар ҙа була: ысынлап та татарҙар йәшәгән ауылдарҙа башҡорт телен һәм әҙәбиәтен уҡытыу индерелә. Шуға ҡарамаҫтан, бик ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә башҡорт балаларын үҙ халҡының теле, мәҙәниәте һәм ғөрөф-ғәҙәттәре мөхиәте ҡайтарыу ғәмәлгә индерелә. Ҡыҙғаныска ҡаршы, 80-се йылдар башында партия өлкә комитеты секретары Р. Хәбибуллиндың шәхси баҫымы аҫтында ҡабул ителгән ҡарар нигеҙендә ошо төбәктең мәктәптәре яңынан татар телендә уҡытыуға күсерелә. Шулай итеп, башҡорттарҙы татарлаштырыуҙың ошо формаһы әлеге көнгә тиклем һаҡланып ҡалды.

XX быуаттың 70-80-се йылдарында башҡорттарҙың үҙ республикаһынан ситкә сығып китеү процесы көсәйҙе. 1959 йылда барлыҡ башҡорттарҙың 25 проценты (251 289 кеше) БАССР-ҙан ситтә йәшәһә, 1989 йылда ошо күрһәткестең 40,4 процентҡа (612 394 кеше) етеүе үҙе үк күп нәмә тураһында һөйләй. Ул саҡтағы республика етәкселегенең башҡорттар күпселекте тәшкил иткән районларҙың социаль-иҡтисади үҫешенә тейешле иғтибар бирмәүе ошондай хәлгә килтерҙе лә инде. Көньяҡ, көньяҡ-көнсығыш һәм төньяҡ-көнсығыш районларҙа инфраструктураның үҫешмәгән булыуы арҡаһында йәшәү һәм көнкүреш шарттары бик түбән булып ҡалды. Шул уҡ ваҡытта күрше өлкәләргә һәм республикаларға китеүсе башҡорттарға яҡшыраҡ мөмкинлектәр бар ине: эш хаҡы юғарыраҡ, социаль проблемалар тиҙерәк хәл ителә, һ.б.

Үрҙә телгә алынған һәм башҡа бер сәбәптәр арҡаһында 1979 - 1989 йылдар арауығында ғына үҙ республикаһында йәшәүсе башҡорттарҙың һаны 73 меңгә кәмене. Академик Р.Ғ. Кузеев 1979 һәм 1989 йылғы халыҡ иҫәбен алыу материалдарынан Башҡортостандың төньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш зонаһындағы 15 районда (Балтас, Благовар, Борай, Бүздәк, Дүртөйлә, Йәрмәкәй, Илеш, Краснокама, Кушнаренко, Миәкә, Тәтешле, Туймазы, Саҡмагош, Шаран һәм Яңауыл) йәшәүсе башҡорттар һәм татарҙар нисбәтен тикшереп, уның һуңғылары файҙаһына үҙгәреүен билдәләй. Күрһәтелгән районларҙа 10 йыл эсендә башҡорттар 128 123 кешегә (46,6 процентҡа) кәмеһә, шул уҡ йылдарҙа был төбәктәге татарҙар һаны 99 685 кешегә (66,4 процентҡа) арта.

Ошоноң менән бәйле республикала 1989 йылғы халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләренең (бигерәк тә төньяҡ, төньяҡ-көнбайыш һәм үҙәк районларҙа) алдараҡ уҙғарылған иҫәп алыу материалдарынан, айырыуса революцияға тиклемгеләре мәғлүмәттәренән ҡырҡа айырылып тороуын билдәләргә кәрәк. Күрһәтелгән районларҙа йәшәүсе башҡорттар һанының 1989 йылғы иҫәп алыу материалдарында объектив сағылыш тапмауы ап-асыҡ күренеп тора. Республиканың ул саҡтағы власть структуралары ошо мөһим сараға әҙерләнеү менән шөғөлләнмәне, ул үҙ ағышына ҡуйылды. Үкенескә күрә, яңы ғына тәҙәлгән башҡорт ижтимағи ойошмалары суверенитет өсөн көрәште алғы планға ҡуйып, халыҡ иҫәбен алыуға шулай уҡ тейешле иғтибар бирә алманы.

### Ут күршеләрҙән уттан да хәүефлерәк булыуы бар

Ошондай шарттар татар ижтимағи ойошмаларына, бигерәк тә татар ижтимағи үҙәгенә бик ҡулай ине. Башҡорттарға ҡаршы йүнәлтелгән, уларҙы тулыһынса ассимиляциялау идеялары менән һуғарылған шовинистик эшмәкәрлеккә Татарстандың ижади интеллигенцияһы вәкилдәре лә бик әүҙем йәлеп ителде. Улар көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш районларҙың райком һәм ҡала комитеттары секретарҙары, башҡарма комитет рәйестәре тарафынан да һәр төрлө хуплау тапты. Һәм ошо мәкерле эш үҙенең кире һөҙөмтәләрен күрһәтте лә инде: республиканы ойоштороусы төп халыҡтың бер өлөшөн үҙ составына индереүгә өлгәшкән татарҙарҙың дөйөм иҫәбе башҡорттарҙан байтаҡҡа артыҡ булып сыҡты (1989 йылғы мәғлүмәттәр буйынса республикала башҡорттарҙың һаны 863 808 кеше, йәғни бар халыҡтың 21,9 проценты булһа, татарҙар - 1 120 702 кеше, йәғни 28,4 процент тәшкил итте). 1989 йылғы халыҡ иҫәбен алыуҙан һуң татар экстремистарының төньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш районларҙы Башҡортостандан айырып алыу идеяһын күтәреп сығыуы ла юҡҡа ғына булмағандыр. 1991 йылдың август айында Өфө ҡала советының шовинистик рухтағы бер төркөм депутаттары үҙ сиратында милләттәрҙең үҙбилдәләнеш идеяһын юҡҡа сығарыуҙы, Өфө губернаһын тергеҙеүҙе һорап, Б. Н. Ельцинға асыҡ хат менән мөрәжәғәт итте.



1989 йылғы халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләрен файҙаланып, ҡайһы бер татар тарихсылары, этнографтары һәм яҙыусылары көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш башҡорттарын татарлаштырыуҙы көсәйтеүгә йүнәлтелгән эшмәкәрлеген тағы ла ныҒыраҡ ҡыҙыулата төштө. Тап ошо ваҡытта Ҡазанда һәм Өфөлә татар телендә баҫылған гәзит-журналдар, китаптар, радио һәм телевидение аша башҡорттарҙың айырым төркөмдәренең милли үҙаңын емереүгә йүнәлтелгән эш бик әүҙемләшеп китте. Үҙ маҡсаттарына өлгәшеү өсөн улар тарихты фальсификациялау, статистик һәм башҡа мәғлүмәттәрҙе инҡар итеүҙән дә баш тартманы, хатта "башҡорт" этнонимын туранан-тура мәсхәрәләүгә тиклем барып етте. Был осраҡта тарихсы-профессор Ә.З. Әсфәндийәровтың татар этнологтарының көнбайыш башҡорттарын татарлаштырыуҙы тиҙләтеү маҡсатында миф уйлап сығарыуға тиклем барып етеүе тураһындағы фекере бик урынлы. Мәҫәлән, ошо ғалим ишараттары Башҡортостан Рус дәүләтенә ҡушылғандан һуң, йәнәһе, көнбайыш башҡорттарының үҙ ерҙәренән төбәктең көньяҡ-көнсығыш тарафтарына күсеп китеүе, ә буш ҡалған ерҙәргә башҡорт булып яҙылған Волга буйы татарҙарының урынлашыуы тураһындағы фекерҙәрен нисек тә булһа таратырға тырышып ята.

XVIII-XIX быуаттарҙа урындағы батша хакимиәттәре тарафынан уҙғарылған ревизия һәм иҫәп алыу мәғлүмәттәре ошо концепцияның абсурд булыуын раҫлай. Көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының Башҡортостандың көньяҡ районларына күпләп күсенеүен дәлилләүсе тарихи сығанаҡтар юҡ, сөнки ысынбарлыҡта бындай ваҡиға булмаған. Унан һуң, бер генә халыҡтың да бер ниндәй ҙә ҡаршылыҡ күрһәтмәйенсә үҙ ерҙәрен ташлап китмәүе хаҡында тарихтан яҡшы билдәле. Әгәр ҙә башҡорттар һәм татар мигранттары араһында бәрелештәр булһа, был ваҡиғалар тарихи сығанаҡтарҙа мотлаҡ сағылыр ине.

Башҡорт ерҙәрендә татар, типтәр һәм мишәр ауылдарының килешеү нигеҙендә барлыҡҡа килеүе бик мөһим фактор булып тора. Үҙ ерҙәренә төрлө килмешәктәрҙе, татарҙар һәм башҡа милләт кешеләре менән бер рәттән, үҙҙәренең аҫабалыҡ хоҡуғынан яҙған милләттәштәрен дә индереүсе башҡорт аҫабаларының исемдәре байтаҡ ҡына архив документтарында һаҡланып ҡалған.

Татар ғалимдарының һәм этнологтарының барса көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш башҡорттарын татарға әйләндерергә тырышыуы бер ниндәй тәнҡиткә лә һыймай. Академик Р. Ғ. Кузеевтың "бөгөн Көнбайыш Башҡортостанда "башҡорт", "татар", "типтәр" исемдәре аҫтында бары берҙән-бер генә этносты, атап әйткәндә, татарҙарҙы күрергә уҡталыу фәнни анахронизм булып тора", тигән фекере билдәле, һәм ошо абруйлы ғалимдың ҡарашы менән килешмәү мөмкин түгел.

### Башҡорт хәле милләт улдары ҡулында

XX быуаттың 90-сы йылдарында һәм XXI быуат башында башҡорт этнодемографияһында һиҙелерлек ыңғай үҙгәрештәр күҙәтелде. Был процеста 80-се йылдар аҙағында - 90-сы йылдар башында барлыҡҡа килгән башҡорт ижтимағи-сәйәси ойошмаларының роле ҙур булды. Башҡорт халҡы вәкилдәренең I съезында "Урал" башҡорт халыҡ үҙәгенең уставы һәм программаһы раҫланғайны. Ошо съезда башҡорт халҡын берләштереү һәм үҫтереү буйынса махсус дәүләт программаһын әҙерләү зарурлығы тураһында фекер алышыу булды. Съезд делегаттары башҡорт халҡының кәмей барыуы, милләттәштәребеҙҙең республиканан күпләп ситкә китеүе тураһында борсолоу һәм хәүеф менән сығыш яһаны. Ошо йәһәттән башҡорттарҙың миграция сәбәптәрен ентекле өйрәнеү, Урта Азиянан һәм илебеҙҙең башҡа төбәктәренән ҡайтыусы башҡорттарҙы торлаҡ һәм эш урындары менән тәьмин итеү буйынса саралар күреүҙе һорап, республика Хөкүмәтенә мөрәжәғәт ителде. Съезд шулай уҡ бөрҙәм башҡорт халҡын ике өлөшкә бүлеп, көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш башҡорттарын төп халыҡтың икенсе өлөшөнә ҡаршы ҡуйырға тырышыу айҡанлы борсолоу белдерҙе. Башҡортостандың бар төбәктәрендә лә туған телдә уҡытыуҙы тергеҙеү тураһында тәҡдим ҡабул ителде.

***Наркомпростың статистик мәғлүмәттәренә ҡарағанда, Бөрө кантонының Аҫҡын, Әсән, Байҡыбаш, Борай, Краснохолм, Ҡыҙылъяр, Яңы Ҡабан, Иҫке Балтас, Тәтешле, Яңауыл һәм башҡа олоҫтарында 1923-1924 уҡыу йылында 131 башҡорт, 10 татар, 112 урыҫ, 47 мари һәм башҡа I баҫҡыс мәктәптәре эшләй. Был мәктәптәрҙә 6959 башҡорт (40,1%), 488 татар (2,8%), 7240 урыҫ балаһы (41%) уҡый. Ә 30-сы йылдар аҙағына Бөрө кантоны территорияһында бер генә башҡорт мәктәбе лә ҡалмай: улар барыһы ла татар телендә уҡытыуға күсерелә. Наркомпрос документтарына ярашлы, ошо уҡыу йылында Бәләбәй кантонында - 68, Өфө кантонында 51 беренсе баҫҡыс башҡорт мәктәбе булып, артабан шулай уҡ юҡҡа сыға.***

(Дауамы 15-се биттә).

**✓ Кәләш әкрен генә буласаҡ иренә күҙ һалды. Йылмайып ултырған була. Күҙҙәрендә бәхет осҡондары. Кеше аша ғына танышып, бәхеткә өлгәшә алырҙармы? Әллә кейәүгә сығырға ризалашып, яңылыштымы ҡыҙ?**





Гөлнара МОСТАФИНА

# ҠАЯҒА ҺЫЙЫНҒАН ҠАЙЫН

(Повесть)

Әллә араҡы шауҡымынан, әллә йәштәре үтеп барған ҡыҙ менән егеттең ҡауышыуына һөйөнөүҙән, әллә ҡоҙа-ҡоҙағый, ҡоҙа-ҡоҙаса булыу шатлығынан, йөҙҙәре алланған, ауыҙҙары ҡолаҡтарынаса йырылған, күҙҙәрендә шаян осҡондар һикерешкән йәш-елкенсәк менән ағай-апайҙарҙың ғына түгел, хатта әбей-бабайҙарҙың тиклем тамаҡ ярып "әсе" ҡысҡырыуы эргәләге ҡая-тау артына инеп юғала. Тар урам эсенән таралған был тауышҡа барса йәнлек, ҡош-ҡорт хайран ҡалғандыр, валлаһи. Күптән әлегеләй ихласлап күңел асҡандары юҡ ине лә баһа. Ихата уртаһындағы өҫтәлдең түрендә, ошо хәлдәренә ышанмағандай, унайһыҙланып ҡына йылмайып, кейәү менән кәләш - Резеда менән Илһам ултыра. Ҡыҙға былай ҙа һүҙ әйтерлек түгел - сибәр, шулай ҙа туй күлдәге һәр кәләшкә айырыуса бер наҙлылыҡ, серлелек өҫтәй. Бөҙрәләнеп төшкән оҙон сәсенә селтәр фата, муйынындағы Илһамдың бүләге - затлы муйынсағы ла барыһын да үҙенә ҡарап һоҡланырға мәжбүр итә. Йәштәрҙең бәхетенән, төн йылы, һил. Август айында, ғәҙәттә, төндәрен һалҡынайта, ә бөгөн, ғәжәп...

Пеләш башының осона ғына түбәтәй эләктергән, оҙон еңле күлдәге өҫтөнән йылы кәзәкей кейгән, ҡыҫыҡ күҙҙәре шараптан майланып алған күрше бабай әленән-әле Миңзифаға - егеттең әсәһенә ҡарап: "Ай, килен, үҙең дә шәп, киленең үҙеңдән дә шәберәк!" - тип тел шартлата. Эргәһендә ултырған дәү кәүҙәле әбейе тегенең кәзәкейе итәгенән тартып: "Кит, ҡарт алаша, тик ултыр!" - тип кешегә һиҙҙермәй генә әрләшә, унайһыҙланып, тирә-яғына ҡарапын ала. Бар нәмәнән ҡыҙыҡ эҙләп ултырған йәш-елкенсәктең сос күҙенән бындай мәҙәк ысҡына буламы һуң! Кемдер йәш кейәүҙе, ҡайһыларылыр ҡоҙағыйҙы мәрәкәләй ҙә башлай:

- Тә-тә-тә, Илһам! Һаҡ бул, төнгөләккә бер үк ишегеңде асыҡ ҡалдырма, килендән ҡолаҡ та ҡағып ҡуйырһың!

- Аба-ба! Бер йәшлектә, бер ҡартлыҡта тип, был ҡарт төлкө килендәргә күҙ һала түгелме?

Табындағылар кинәнеп көлә. Һәммәһе лә бының бары тик шаярыу ғына икәнлеген аңлай аңлауын, әммә Миңзифа уңайһыҙлана, ҡарашын ҡайҙа йәшерергә белмәй. Бәй, шулай булмай! Ҡаш һайным тип, күҙ сығарып та ҡуйыуҙары бар был ҡайнаға-ҡәйнештәренең. Үҙенең туғандары, ярай, аңлар ҙа, әммә ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар ни уйлап ҡайтыр? Барыһын да ысынға алып ултырыуҙары ла бар бит, ыстағафирулла! Килен кеше лә уңайһыҙлана торғандыр, күҙҙәрен күтәрергә ҡыймай. Ара-тирә керпектәре генә елпенеп, оялсан ҡарашы салынып ҡала. Килене бигерәк матур бала икән дә. Килешмәгән ере юҡ. Бигерәк тә сәсенең оҙонлоғо һоҡландырҙы уны. Ҡала сибәркәйҙәрендә генә түгел, ауыл ҡыҙҙарында ла ундай толомдар юҡ бит хәҙер. Шулай ҙа оҙон сәс ана нисек килешә ҡыҙ кешегә! Һөйкөмлөлөк, наҙлылыҡ өҫтәй. Тик бына күҙҙәре... Бигерәк моңһоуҙар. Тәү күргәндә үк быға иғтибар иткәйне Миңзифа. Әммә баҫалҡылыҡ, оялсанлыҡ тип ҡабул итте. Әле иһә, үҙе йылмайып-көлөп ултырһа ла, йөҙөндә ниндәйҙер бер йәшерен һағыш ятҡан кеүексе. Әллә берәй ҡайғыһы бармы? Улына сараһыҙҙан сыҡмаҫсы түгелме? Башҡа берәйһенә ғишыҡ тотоп, уны онота алмаймы? Әсә күңеле һиҙгер була торған, шулай ҙа был осраҡта янылышһа ғына ярар ине. Улының, төпсөгөнөң, бик тә бәхетле булыуын теләй ул. Юҡһа, башҡаларҙы хушһынмауы, хатта береһе менән дә аралашмауы борсоуға һала башлағайны бит үҙен. Ирлек гәләмәтендәме әллә ғиллә, тип дауаханаға алып барыу хәйләһен уйлап йөрөй ине. Еңгәләре менән шаярып һөйләшеү менәнме ни, еңгәй - еңгәй инде, сит кеше ҡатыны, оҡшаған хәлдә лә, һинә булаһы эше юҡ. Ә бына Резеданы күрҙе лә, иҫе китте. Унан башҡа йәшәй алмайым, тип ебәрҙе лә баһа! Миңзифа быға һөйөндө генә. Улы тураһында әллә нәмәләр уйлап йөрөүенә эстән генә уңайһыҙланып та ҡуйҙы. Динә киленгә рәхмәт. "Һинә үҙем кеүек бынамын тигән, шәп кәләш табып бирәм әле, ҡәйнеш!" - тип шаярта ла йөрөй торғас, әйткәне Алланың "Амин" тигән мәленә тура килде, улын һыу һөлөгө кеүек ҡыҙ менән таныштырҙы. Динә киленеңә күлдәк кейҙерер, Алла бирһә. Хәйер, замана йәштәре ни, һин алып биргән күлдәккә хушһыныр тиһеңме! Ваҡланып тормаҫ, күҙгә күренгән берәй ҙур ғына бүләк алыр ҙа бирер.

Йәштәрҙең боронғо йолаларҙы һанға һуҡмауына эсе боша Миңзифаның. Бөгөн танышып, иртәгәһенә ҡауышыу ғәҙәти күренеш хәҙер. Ғәзиз баланың ниндәйерәк кеше менән уртаҡ тормош көтә башлауына төшөнмәй ҙә ҡалаһың. Бына Минзифа ла килененең туғандарын бисмиллаға саҡ күреп ултыра. Туй мәлендә генә барыһын да һынап бөтөрһәңме? Динә килен һәйбәт булғас, моғайын, быныһы ла унан кәмхур түгелдер. Ни тиһәң дә, икеһе лә бер ауылдан, етмәһә, айырылмаҫ әхирәттәр, ти бит. Шулай тынысландыра ҡоҙағый кеше үҙен. Ҡарашын улына йүнәлтте. Ана, ҡайһылай ҡәнәғәт йылмая. Сәсен сәскә ете-ят кешенең балаһы менән бәйләүҙе бер аҙ хафаландырһа ла, улының ҡыуаныслы йөҙөн күреү әсә күңеленә май булып яғыла. Бәхетле генә булһындар инде. "Эй, Аллам!.." - тип уфтанып ҡуйҙы Миңзифа үҙ алдына. Төпсөк кенәһен иркәләп-наҙлап үҫтереп, һаман бала кеүек күргәнгә, ахырыһы, күңеле елпенеп тик торасы.

- Ә хәҙер ҡотлау һүҙе ошо байрамдың сәбәпсеһе Динә килен менән Шатморат ҡустыға бирелә. Әгәр ҙә һеҙ Саҡ менән Суҡ ише аҙашып йөрөгән был ике йөрәктең ҡауышыуы сәгәтен яҡынайтыу өсөн тәүге аҙымды яһамаһағыҙ, ошолай йылпебейеп күңел аса алмаған да булыр инек... - Туйҙы алып барыуҙы ышанып тапшырған Ынйыбикә - Миңзифаның бикәсе - үҙ эшен шартына килтереп башҡара. Зифа кәүҙәһенә һылашып торған ҡара күлдәге йылҡылдап күҙҙең яуын ала. Сәсен күпертеп, күҙ-ҡаштарына килештереп буяу һөрткән был килендә лә ҡашыҡҡа һал да йот инде! Әллә нисә ирҙең башын әйләндерә торғандыр әле. Һүҙ һорап күршегә лә инә торғандарҙан түгел шул. Көләмәстәрҙе әллә нисек хәтерендә ҡалдыра, кисә буйына һөйләп, ҡунаҡтарҙы көлдөрә генә. Шул ҡыҙыҡ-мыҙыҡтарҙы әллә үҙе уйлап таба инде?! Ана бит, нисегерәк килештерә. Әртистәрең ары торһон. Миңзифа уларҙың йортона килен булып төшкәндә тал сыбығындай ғына шаталаҡ бер ҡыҙсыҡ ине үҙе. Күҙ алдында буй еткергәс, бигерәк яҡын ошо бикәсе. Ул да, аптырап торманы, әллә ҡайҙан бер егетте әйәртте лә ҡайтты. Уныһы кәләшенә генә түгел, ауылдарына ла ғашиҡ булып, бында торҙо ла ҡалды.

Йәштәргә тәбрикләү һүҙҙәрен тәүҙә Динә еткерҙе. Күҙҙәренән күренеп тора, әхирәтенең үҙе янына килеүенә ифрат шат:

- Һине ысын күңелемдән ҡотлайым, әхирәт! Мәңге бергә булайыҡ, ҡатышып йәшәйек, - тип, әхирәтенең эргәһенә үк килеп, ике яҡ сикәһенән алмаш-тилмәш супылдатып үбеп алды. - Ҡыуаныслымдың сиге юҡ, Резеда! Ып-ысын!.

Динәгә оҙаҡ сөсөлдәп торорға ирек бирмәнеләр, янына шунда уҡ Шатморат килеп баҫты.

- Резеда балдыҙға рәхмәт инде. Мине ҙур бәләнән ҡотҡарҙы бит ул, - тип ҡунаҡтарға ҡарап күҙ ҡыҫты. - Бынан тыш, кәләш минә "ауылымды һағындым" тип илай алмаҫ, һағышын баҫырға Резеда балдыҙ янында хәҙер. Икеһенә күңеллерәк тә булыр.

- Ах, һин, хәйләкәр! Иң тәүҙә үҙеңде уйланыңмы әле шулай?! - Динә иренә ҡарап сыңғырлатып көлөп ебәрҙе...

- Юҡ инде, юҡ!.. Һине уйланым, тием бит! - тип Шатморат ҡатынын юхалай һалды.

Резеда үҙен төш күргәндәй хис итә. Ул никахҡа инә... Ышанырлыҡ та түгел бит. "Никах менән әжәл һорап килмәй", тиеүҙәре хаҡтыр, күрәһең. Ана бит, һис уйламағанда кейәүгә сыҡты ла китте. Үҙенең ниҙәр кисергәнен хатта аңламай ҙа ҡалды. Әле барыһы ла юрамал ғына кеүек: әйтерһең, уға уйнап аҡ күлдәк кейҙергәндәр, уйнап ҡына ошо урынға, бөтөнләй күрмәгән-белмәгән кеше янына ултыртып ҡуйғандар; туғандары ла кәрәк булғанға ғына бейей, йырлай, исем өсөн генә шаяра-көлә кеүек. Хатта тәмле-татлынан, төрләндереп бешерелгән затлы ризыҡтарҙан һығылып ултырған өҫтәл дә ысын түгел кеүек. Өнмө был, әллә төш кенәме? Төш булһа, бик шатланыр ине лә ул... Барыһы ла өндә шул. Өндә. Хәҙер инде кирегә юл юҡ, түҙергә, үҙе лә бүтәндәргә ҡушылып юрамал ғына шатланырға тейеш. Миңә хәҙер барыбер, тип, ай, яңылышманымы Резеда? Илһамды ул бит бөтөнләй белмәй. Ә Илһам Резеданы бөтөнләй белмәй. Кәләш әкрен генә буласаҡ иренә күҙ һалды. Йылмайып ултырған була. Күҙҙәрендә бәхет осҡондары. Кеше аша ғына танышып, бәхеткә өлгәшә алырҙармы? Әллә кейәүгә сығырға ризалашып, яңылыштымы ҡыҙ? Яҙмышын Хоҙай ҡулына тапшырып, ошоға тиклем нисек йәшәгән, шулай йәшәй бирергә кәрәк булғандыр? Ай, бөтөнләй белмәй бит Илһам ҡыҙҙы! Белмәй! Хәйерлегә генә була күрһен! Илһамдың әсәһе лә бик, бик яҡшы ҡатын. Әләнән үк "килен" тип өҙөләп тора. Уның был һөйөүен аҡлай алырмы? Яҡты киләсәккә өмөтө өҙөлөп, ҡанаты ҡайырылған ҡошҡа оҡшай башлағайны бит инде. Ҡайҙан Динә килеп осраны юлына? Уны тыңлап, был ауылға нимәгә килде?! Ҡуй инде, уның, әйҙә, тиеүенә эйәреп, сыҡ та китсе әле! Йәшәүҙән төңөлгән мәле ине шул. Тормоштоң бер ҡыҙығы ла ҡалмағайны уның өсөн. Дөрөҫ, бала саҡта дуҫ булдылар Динә менән, йәш саҡтарында сер уртаҡлаштылар, әммә юлдары күптән ике яҡҡа айырылды бит инде. Резеда Өфөгә сығып китте, Динә Учалыла ҡалды. Шунан бирле икеһе өсөн ике төрлө тормош башланды. Резеда яңы әхирәттәр тапты, тәүге мөхәббәт хистәрен дә шул осорҙа татыны. Динә менән хатлашып хәбәрләшеп торҙо тороуын, әммә ул мәлдә йәшерен үҙ серҙәре барлыҡҡа килгәйне инде. Һуңғы арала бик үҙгәрҙе ҡыҙ. Башҡа һыймаҫлыҡ аҙымдар яһауҙан туҡтағаны юҡ шикелле. Әле лә дөрөҫ эшләнеме, юҡмы - бер Хоҙай ғына белә.

Резеда әсәһе менән атаһына күҙ һалды. Улар ҙа ҡыҙҙарының башлы-күҙле булыуына, шундай һәйбәт ғаиләгә, яҡшы иргә юлығыуына шатланып бөтә алмай. Әсә менән атаға тағы ни кәрәк? Балаһы бәхетле булһа, шул еткән. Хәйерле генә булһын инде барыһы ла. Яҡшы кешеләргә бәхетһеҙлек килтереп, күҙ йәштәренә быуырға яҙмаһын.

Әселгән араҡы шауҡымынан күңелләнеп алған ҡунаҡтар йыр артынан йыр һуҙҙы, бейене, уйнаны. Барыһына ла күңелле. Илһамға ла, Динә менән Шатморатҡа ла, атаһы менән әсәһенә, туғандарына ла. Резеда ғына һаман да шаңҡып ултырыуын белде. Аша тиһәләр - ашаны, эс тиһәләр - эсте, бейе тиһәләр - бейене, әсе ҡысҡырһалар, тороп үбеште лә шикелле. Барыһы ла төш кенә кеүек. Бына иртәгә ҡалалағы бүлмәһендә уяныр ҙа китер... Уф, юҡ, ҡалған яғын уйлағыһы ла, күҙ алдына килтергеһе лә килмәй. Ҡуй, уның урынына бөгөнгө матур, күңелле төш оҙаҡҡараҡ дауам итһен. Ана бит, кешеләр ҡайһылай ҡыуана Резеда өсөн...

- Арыныңмы әллә, кәләш?

- Ә? - Ят ауыҙҙан үҙенә ҡағылған исем ишетеүе ҡыҙыҡ.

- Арыныңмы әллә, тием? Йонсоп ултырған кеүекһең? - Илһам Резеданың толомдарын һаҡ ҡына артҡа һыпырып, күҙҙәренә ҡараны.

Ҡара һин уны, һиҙгер ҙә әле үҙе.

- Арыным. Тауыш, шаушыу... Баш ҡаңғырып китте.

- Минеке лә. Әйҙә, ҡайтайыҡ...

Ғәфү үтенеп, ҡунаҡтарҙың барыһы менән дә хушлашып, тышҡа сыҡтылар. Кәләш менән кейәүгә урынды Ынйыбикәләрҙең өйөнә һалғайнылар. Көҙгө һауа. Бешкән ашлыҡ еҫе танауҙы ҡытыҡлай. Элек ошо мәлдә ауыл гөрләй торғайны. Ул иген тейәп келәткә ашыҡҡан машиналар, ул бер баҫыуҙа эшен тамамлап, икенсеһенә күскән комбайндар. Ҡара төнгә тиклем уттарын баҙлатып, үҙ яйҙарына ашлыҡтарын ура бирерҙәр ине.

- Әйҙә, йылға буйына төшөп әйләнәйек? - Резеда ваҡытты һуҙырға, аңына килергә тырышты. Тормошта былай еңел генә булмай. Ҡыҙ бындай еңеллеккә өйрәнмәгән. Яңылышты ул. Яҙмышын янындағы кеше менән бәйләргә тейеш түгел ине ул. Лайыҡлымы һуң ул Илһамға?! Барыһын да һөйләргә, аңлатырға кәрәк. Шунһыҙ, күңелендәге был төйөр менән нисек йәшәр?

**(Дауамы бар).**

ҺАБАҠТАР

# ЯБАЙ КЕШЕНЕҢ... ҡатмарлы фекерҙәре...

## Аҡтамыр, йәғни Баландың әлморонға һөйләгәне

Аҡтамырҙар үрсегән мәл әле илдә,
Ярамһаҡлы, ялған һүҙҙәр тәме телдә.
Сәскәләрҙе гәрләндереп, Тәңре ергә
Дегәнәк тә әрем сәскән әллә төндә...

Гөрләп үҫеп, мул емештәре менән хужаларын ҡыуандырған баҡсаға бер аҡтамыр мыйығы килеп инһә, ул ҡойма буйлап сит-ботта ғына үҫмәй, ә шунда уҡ еләк-емеш үҫкән иң уңдырышлы, иң йомшаҡ, йылы, яҡты ерҙәргә үрелә. Сөнки емеш-еләктең тирә-яғын йомшартып, ел-һыуыҡтан ышыҡлап, һыу, ашламаһын биреп ҡәҙерләп кенә тәрбиәләйҙәр. Емеш-еләктәр эргәһендәге шул йөтеш уңайлыҡтарҙа, рәхәтләнеп, күренмәй генә үҫеү урынына, аҡтамыр ҡотороноп үҙенә өҫтөнлөктәр яуларға керешә. Тамырҙарын самаһыҙ йәйелдереп, емештәрҙең йәшәү һутын һура, мыйыҡтары менән япраҡтарына йәбешеп тарткылай, һабаҡтарына уралып, өҫтөнә үрмәләй, сәскә таждарының боғаҙын быуа. Шулайтып, аҡтамыр үҙенең йәшәү дәүрәһен киңәйтә, тамыры, орлоҡтарына йылдан-йыл уңайлыраҡ, уңдырышлыраҡ урындарҙы яулай, ишәйә. Ул инде хәҙер баҡсалағы емеш-еләктәргә, ағастарға эргәләренә һыйындырғаны өсөн рәхмәт әйтеү тураһында уйлап та бирмәй. Ул ғына бында хужа! Кем ҡасан, нисек килеп ингән - уныһы шарт түгел, уның әһәмиәте лә юҡ! Көсләнөкө- замана, имеш!

Бына шулай! Тамырҙары дымға мохтаж, япраҡтары яҡтынан мәхрүм, һабаҡтары быуылған бахыр үҫентеләр мөсһөҙләнә, сибек, хөрәсән орлоҡтары тоҡомон дауам итерлек сифаттарын да юғалта. Ваҡыт үтеү менән ҡыуаҡ, еләктәрҙең түгел, йәҙйәшәр емеш ағастарының да тамырҙары ҡороп бөтөр инде, ана бит, аҡтамыр һабаҡтары уларҙы ла үҙ ҡосағына алған. Яңыраҡ ҡына бөгәлә-һығыла мул емеш биреп үҫкәндәре лә, быуындары тарҡалған кеүек, кәкерәйешкән зәғиф ботаҡтарына таянып, оҫ-мостары һерәйешеп кенә ултыра. Тамырҙарынан яңы ғына шытып сығып килгән йәш үҫентеләренең был ҡыҫырыҡта емешләнеү кимәленә етлегеү түгел, тере ҡалырға өмөттәре, ышаныстары бармы икән, исмаһам? Иркен түшәлеп ятҡан аҡтамыр һабаҡтары менән баҫырылған йәш үҫентеләрҙе төҫмөрләүе лә ҡыйын. Үҙҙәренең баҡсаһында был шарттарҙа үҫеп етеп, татлы емеш, орлоҡ биреүгә өлгәшеү өсөн уларға, ай-һай, көнө-төнө йәнтәслим көрәшергә тура киләсәк. Кем уңыр, кем һулыр? Был көрәштең һөҙөмтәһен тиҙ арала күҙаллауы ҡыйын түгел.

Һәр йүнле хужа, баҡсаһына зыян килтермәһен өсөн, аҡтамырҙан ҡотолоу сараларын күрә. Был бит тәбиғи хәл! Бер хыянатлыҡ та юҡ! Ә беҙ үҙебеҙҙең йәшәү һутына сарсаған емештәребеҙгә һибә торған һыуҙы аҡтамырға һибеү генә түгел, хатта япраҡтарынан саң-туҙанын һөртөп кенә торабыҙ. Бөгзе заман хатта үҙ үҫентеләребеҙҙе тамырынан йолҡоп быраҡтырып, аҡтамырға уңайлыраҡ урынды бушатабыҙ, ҡыйырһыталар, тип әйтеүҙәренән ҡурҡып, тертләп, уға иркенлек тыуҙырабыҙ. Үҙебеҙҙе хәстәрләй торған ваҡытыбыҙҙы, бөтә көс, дәрт, иғтибарыбыҙҙы әрһеҙ аҡтамырҙан һаҡланыуға исраф итәбеҙ. Әпәүләп кенә, иркәләп кенә үҫтергән емештәребеҙҙе шул арала ҡорттар кимерә, ҡоротҡостар талай, үткәнһүткән типкеләй...

Заманында тамыр хандарыбыҙ аҡ, күк, һарыларҙы үҙ баҡсаларына шикләнмәй ҙә һыйындырып, иң уңай ерҙәрен биреп, ҡәҙерләп тәрбиәләгәндә, кемгә ярайбыҙ типме, нимә уйлағандарҙыр. Бәлки, Хоҙай шулай ҡуша, тип, уларҙың инсафлығына, итәғәтлегенә ышанғандарҙыр... Ни тиһәң дә, үҙ ябайлығы, үҙ хыянатһыҙлығынан сығып, емештәренең тамырҙарын ҡорота башларҙар, быуындары ҡазаланыр, тип уйламағандарҙыр, күрәһең. "Әйҙә, йәшәй алһа, йәшәһендәр! Беҙ көслө, уларҙың ҡыҫымына ғына бирешмәсбеҙ әле!" тигәндәрҙер, бәлки, заманының сая, тәкәббер уҙамандары...

Үҙ тәнебеҙгә терәп, тамырҙарыбыҙға һис шикләнмәй һыйындырып үрсетеп алған аҡ, күк, һары тамырҙарҙан енел генә ҡотолоу сараһы юҡтыр бөгөн, биллаһи. Сөнки улар баҡсала быуаттарҙан быуаттарға быуын нығыҡҡан, быуындарҙан быуындарға тоҡом яңыртҡан төп емеш-еләктән дә артығыраҡ шытып үрсене, иң уңай, иң бәрәкәтле ерҙәрҙе яулап, тамырҙарын әҙәпһеҙ таратты. Ә ғүмере буйы ошо баҡсала үҫкәндәргә нимә эшләргә? Ошо баҡсанан башҡа уларҙың йәшәр, үрсер, нәҫелен дауам итер урыны юҡ бит... Иң татлы емештәре лә ағастың төбөнә ҡойола!

Гүзәл сәскәләр үҫкән ожмах баҡсаларын ят үҫентеләр баҫып алып, сүллеккә әүерелдергәндәре тарихтан бөтәбеҙгә лә мәғлүм була тороп, шул тәжрибәнән фәһем ала белмәүебеҙ бигерәк үкенесле. Ят - ят инде, зыяндан башҡа бер файҙаһы булмаһа ла, бына бит, сәскәләрем менән баҡсағыҙҙы ҡайһылай биҙәп ултырам, тигән кеүек, күҙҙең яуын алырлыҡ сәскә ата, яуыз. Ләкин, тышҡы ҡиәфәттәре менән күҙҙе арбаһалар ҙа, эстән аҫтыртын яуызлыҡ ҡылырға тәғәйенләнгән улар! Һаҡ булығыҙ! Баҡсағыҙҙа ҡый үләндәренә шашырға ирек түгел, мөмкинселек тә бирмәгеҙ, утап тороғоҙ. Ят бер үҫенте күренһә, бигерәк тә уяу булығыҙ: ул тыштан әллә ниндәй йән арбарлыҡ төҫтәрен күрһәтер, еҫтәрен аңҡытыр, ләкин эске донъяһы әшәкелек, яуызлыҡҡа ҡоролған булыр.

Европа баҡсасылары, заманында, әрһеҙ ҡара, һарылар менән баҡсабыҙҙы биҙәйбеҙ, рәхәтләнеп үрсейбеҙ, тип, баҡсаларына индергән яттарҙың тәртипһеҙлеге, тотанаҡһыҙлығынан бөгөн зар илай. Хәҙер илау һуң инде. Ерҙәрендә нығынып алған керҙәш яттар урындағы тәртип-әҙәпте, ғөрөф-ғәҙәтте ихтирам итеү түгел, быға тиклем быуаттар буйы быуындарҙан быуындарға бөртөкләп йыйылған затлы орлоҡтарҙы аҙҙыра, услап йыйылған уңдырышлы тупраҡты туҙҙыра, йән һуттарын түгеп яулаған йәшәйеш ҡанундарын күҙ йомоп ҡыйрата, мыҫҡыл итә. Үҙен һыйындырған ерҙе ҡәҙерләү түгел, һаңға ла һуҡмайҙар. Башҡалар мәж килеп саң ҡаҡҡанды күрә, белә тороп, беҙҙең баҡсасыларҙың да шул юлға баҫыуы бигерәк сәйер күренеш. Эскерһеҙлекме был, йә ғәмһеҙлекме? Юҡ, ҡот оскос вайымһыҙлыҡ!

Тамыр хандарыбыҙ борон заманда ҡылғандарын һаман аңлай алмайбыҙ. Һөҙөмтәләрен күреп, үҙ елкәбеҙҙә татып, ниңә шулайттылар икән, тип, төрлө фараздар йөрөтәбеҙ, төрлө фекерҙәр тыуҙырабыҙ, бәхәсләшәбеҙ, ярашабыҙ. Шуға ҡарамаҫтан, һаман шул юлды ҡыуабыҙ түгелме һуң, йәмәғәт? Эргәлә йәшәгән керҙәштәрҙең береһе, исмаһам, заманында беҙҙе был гүзәл баҡсаныҡылар үҙ яндарына һыйындырҙылар, йәшәү, үҫеү шарттары булдырҙылар, тигеҙ күреп аралаштылар, нәҫелдәребеҙ тамырҙары ҡороуҙан ҡотҡарып алып ҡалдылар, тип әйтмәй. Әйтмәйәсәк тә!

Үҙебеҙҙең арала зәһәр кесерткәндәр, әсе әремдәр, ғәмһеҙ дегәнәктәр бихисап була тороп, бөгөн баҡсабыҙға ҡытай, вьетнам сүптәре ниңә хәжәт? Тағы кемдәр әрһеҙ, оҫоҙ ят тамырҙар индереп, үҫтереп, байымаҡ була? Ҡайһы ғәмһеҙ, ғәрһеҙҙәр самаһыҙ ишәйгән әрһеҙҙәрҙең елкәләрендә ожмахҡа үтергә ниәтләй? Шулай булмаһа, уларҙың баҡсабыҙға "иҫ киткес" файҙа килтереүен төкөрөк сәсеп маҡтамаҫтар ине! Ярай, бөгзеләребеҙ боронғо керҙәштәр менән туғанлашып, ҡайһыларыбыҙ уларҙың "йылы" ҡосағында иҙерәп ятабыҙ. Ята торғас, шул наҙлы ҡосаҡтарҙан быуылып ҡына һулып бөтмәсбеҙ, тимә...

Беҙ - ҡәрҙәштәр, тине лә ул, йәнгә инде,
Әрһеҙләнеп, әүҙемләнеп түргә мендe.
Киң күңелен, илен, ерен биләне лә,
Бер килмешәк еңелмәгән илде еңде!..

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Баҡсабыҙҙы элекке ҡыйҙарҙан утап таҙартыу ваҡыты уҙғандыр инде, сөнки уларҙың һабаҡ, тамырҙары бөтә ағастар, емеш-еләктәр менән тығыҙ үрелешеп, берләшеп бөткән. Ҡый утайбыҙ, тип, ҡәҙерле үҫентеләребеҙгә зыян килтереүебеҙ ихтимал. Шулай булһа ла, тағы әллә нисәмә яңы быуын ошо уҡ хаталарҙы яһар, вариҫтарынан ләғнәтләнер, ерем, төрөм, төҫөм, тамырым юғала тип зар иларҙарына эсем боша. Исмаһам, бөгөндән баҡсабыҙға иғтибарлы булайыҡ, ҡый, сүп-сарҙан ҡурсалайыҡ. Бәрәкәтле баҡсабыҙға үҙебеҙ хужа була алмаһаҡ, тамырҙарын әрһеҙ һуҙыусылар әҙәп һаҡлап ултырмаҫ. Бәлки, ҡасан булһа ла, хәбәрҙә генә түгел, ғәмәлдә лә ҡыйыуҙар табылыр һәм был хаталарға сик ҡуйылырына өмөтләнәһе генә түгел, ышанғы килә. Амин!**

**Баҫалҡылыҡ һәйбәт сифат та ул,**
**Мәшәүлектең сиген уҙмаһаң.**
**Тормош тупһаһының иң аҫтында**
**Тапалып ҡына ятып туҙмаһаң...**



**Урал МОСТАФИН.**

ЗАУЫҠ

*Радик ХӘКИМЙӘН*

## Миңә һаман ҡайтыр шикелле

Моңло кеше зарлы була, тинең,
Хаҡтыр, бәлки, әйткән һүҙҙәрең,
Ә мин, ғәмһеҙ, һине тыңламаным,
Йырламайса, әсәй, түҙмәнем.
Ҡистәрен гел күкте күҙәттем мин,
Йондоҙҙарға ҡарап йырланым,
Таңдан тороп һыу буйына саптым,
Тыңларға тип ҡоштар моңдарын.
Ә һин мине ул саҡ әрләй инең,
-Бер тыңлауһыҙ бала булдың,-тип,
Ғаиләбеҙгә шатлыҡ булып түгел,
Ҡайғыламы әллә тыуҙың,-тип.
-Моңаймаһаң, бәлки, атайың да,
Ҡайтҡан булыр ине һуғыштан...
Юҡ, юҡ, әсәй, бары асынып ҡына,
Фашистарға нәфрәт-ҡарғыштан,
Шулай тинең, йыуатырға теләп,
Күкрәгенә ҡосоп улыңды,
Тик үҙең бит, ҡайтыр, тиеп, көттөң,
Көн дә сыҡтың баҫыу юлына.
...Һуғыш бөттө, күптәр кире ҡайтты,
Ниңә, атай, һиңә ҡайтмаҫҡа?
Әсәй әле һаман һине көтә,
Әллә күпме ғүмер үтһә лә,
Тик һин генә никтер ҡайта алмайһың,
Балаларың һағынып көтһә лә.
...Әллә инде мин гәйепле булдым-
Йыр-моңдарым ҡайғы килтерҙе.
Юҡ, юҡ, әсәй, ғәзиз атайбыҙ
Миңә һаман ҡайтыр шикелле.

## Күңел илай

Ҡыйынлыҡта үҫһәк тә беҙ,
Күңелебеҙ бай ине.
Әсәйҙәрҙең изгелеге
Йәнебеҙгә май ине.

Бер телемдә бишкә бүлдек
Беҙ, һуғыш балалары.
Йөрәктә мәңге һаҡланыр
Уңалмаҫ яралары.

Һис ҡасан да онота алмам
Балтырғанлы аштарҙы,
Кесерткән һәм башаҡ, ярай,
Һаҡлап ҡалды баштарҙы.

Әсәйҙәрҙең күңел нуры
Беҙҙә етем итмәне,
Түҙергә, эшкә өйрәтте,
Улар эҙһеҙ үтмәне.

Замандар инде үҙгәрҙе,
Тамаҡ туҡ, өҫтәр бөтөн,
Тик әле күпме сабыйҙар
Атай-әсәйһеҙ бөгөн.

Хәмер еткән бит баштарға,
Сабыйҙар хәйер һорай,
Оялары туҙғандарға
Әсенеп күңел илай...

## Ғүмеркәйҙәр иртә һүнмәһен

Әсә ҡарынында ятҡанда уҡ
Беҙ һуғышты татып белгәнбеҙ,
Ғәрәсәттең бөтә михнәттәрен,
Ишетеп түгел-үҙен күргәнбеҙ.
Беҙҙең быуын, һуғыш балаларын
Сабый килеш һуғыш имгәтте,
Ал таңдарҙы, баласаҡты урлап,
Ауырлыҡҡа, эшкә өйрәтте.
Был донъяла беҙҙең күргәндәрҙе,
Күрмәһендәр инде бүтәндәр,
Ярай әле аслыҡ-ялангаслыҡ
Тарих булып ҡалды үткәндә!
Беҙҙең яҙмыштарға бары ла һыйған,
Юғалтыуҙар аҙмы ғүмерҙә?!
Ҡайғылары ҡара таҫма булып,
Мәңгелеккә ҡалды күңелдә!
Атайҙарҙы күрмәй үҫкән быуын-
Үҙебеҙ ҙә еттек алтмышҡа,
Шомло хәбәрҙәрҙән йөрәк һыҙлай,
Кемдәр килер беҙгә алмашҡа?!
Заманыбыҙ тыныс түгел һаман,
Атыш тауыштары тынмаған,
Чечен ҡатындары ҡарынында
Күпме сабый әрней, тыумаған?!
Шул бит борсой, шул бит йәнде өтә,
Туҡтатырға ине һуғышты,
Ана бер гөл башын аҫҡа эйгән,
Көс-хәл менән ала һулышын!
...Әй, кешеләр! Уяу булһағыҙсы,
Бер гәйепһеҙ гөлдәр һулымаһын,
Ерҙе йәмләр өсөн тыуа улар,
Ғүмеркәйҙәр иртә һүнмәһен!

ИНТЕРНЕТТАН



# ӨЛКӘНДӘР ӨСӨН ДӘ... алыштырғыһыҙ ризыҡ ул - һөт

■ **Алоэ.** Алоэ - күп йыллыҡ мәңге йәшел итләс үҫемлек. Уның япраҡтары төп дауалау сығанағы булып тора. Алоэ препараттары күҙ ауырыуҙарын, ашҡаҙан-эсәк сирҙәрен - гастрит, ашҡаҙан язваһын дауалағанда, эс ҡатҡанда, шулай уҡ анемия, ҡурылдай астмаһы булған саҡта ҡулланыла. Алоэ һутын тире ауырыуҙарын дауалаған ваҡытта ҡулланалар, мәҫәлән, яра оҙаҡ уңалмай торһа, йәки эренләһә, бешкән урындарға алоэ һутын һөртәләр. Халыҡ медицинаһында алоэ шулай уҡ туберкулезды дауалағанда, йүтәлләүҙән, йоҡоһоҙлоҡтан ҡулланыла.

■ **Бәшмәктәр.** Бәшмәктәр бик күп дауалау үҙенсәлегенә эйә. Туҡланыу ризығы булараҡ, составы буйынса бәшмәктәр яҡынса йәшелсә менән балыҡ йәки иткә тиңләшә. Бәшмәк тәмле ризыҡ, унда бик күп файҙалы матдәләр һәм төрлө ферменттар бар. Улар мөғжизә лә тыуҙыра: аппетитты аса, аш һеңдереүҙе яйға һала.

Бәшмәктәрҙе йыш ҡына "ит" тип атайҙар, быға нигеҙләүҙәр ҙә бар. Киптерелгән бәшмәктәр, мәҫәлән, йомортҡаға, тауыҡ итенә, айырылмаған һөткә, йәшелсә, емеш-еләккә ҡарағанда ике тапҡырға тиерлек туҡлыҡлыраҡ.

■ **Лимон.** Лимондың ҡабығында, япраҡтарында һәм ботаҡтарында уға тәмле еҫ биреүсе эфир майы бар. Лимон һуты быуындарға тоҙ ултырғанда, ревматизмдан, йөрәктән шешенгәндә, һейҙек ташы ауырыуынан, ашҡаҙан һутының түбән әселегенән, авитаминоздан, шулай уҡ һары һыу ауырыуынан, геморройҙан, туберкулездан, радикулиттан файҙалы. Уны шулай уҡ тиреләге бәшмәк ауырыуҙары, пигмент таптары булған осраҡта ҡулланалар.

■ **Һуған.** Һуған аппетитты аса, ашҡаҙан-эсәк юлдарының функциональ әүҙемлеген арттыра. Атеросклероз булғанда файҙалы. Һуғанды ангина, бронхит булған осраҡта ҡулланалар. Йүтәлләүҙән һәм һалҡын тейгәндән һуғанды бал менән йәки баллы һөттә ҡайнатып эсергә кәңәш итәләр.

■ **Һөт.** Һөт тураһында Ҡөрьәндең "Нәхл" сүрәһендә лә яҙылған: "Хайуандарҙа ла һеҙҙең өсөн ғибрәт бар. Уларҙың эсәктәре менән ҡан араһынан килә торған саф һөттө һеҙгә эсерәбеҙ". Бәйғәмбәребеҙ ҙә: "Һыйыр һөтөн эсегеҙ, уның һөтө лә, ҡаймағы ла һауыҡтыра", - тигән.

Һөт - кешенең тәүге айҙарында туҡланған берҙән-бер тәүге ризығы. Оло кешеләр, хәлһеҙҙәр, ауырыуҙар өсөн һөт алмаштырғыһыҙ ризыҡ булып тора. Был ризыҡ йөҙҙән ашыу ҡиммәтле компоненттарҙан тора.

Уға организмдың йәшәүгә һәләтлелеге өсөн кәрәк булған бөтә матдәләр ҙә - аҡһымдар, майҙар, углеводтар, минераль тоҙҙар, витаминдар инә.

Һөттөң бөтә был компоненттары ла бер-береһе менән яҡшы яраҡлашҡан, шуға күрә ул еңел һәм тулыһынса эшкәртелә. Һөт электән күп төрлө ауырыуҙарҙы дауалау сифатында ҡулланыла: мәҫәлән, ата-бабалар йөрәк һәм бөйөр ауырыуҙарынан һөт эсеп дауаланған.

Һөт ризыҡтары (ҡатыҡ, ойотҡан, ҡымыҙ һәм башҡалар) ашҡаҙан-эсәк ауырыуы, туберкулез менән яфаланған кешеләр өсөн бик яҡшы дауалау сараһы булып тора, шулай уҡ ағыуланған саҡта ла ул яҡшы йоғонто яһай. Һөт шулай уҡ аш һеңдереү биҙҙәре секрецияһына ла яҡшы тәьҫир итә.

АҺ, ҠЫҘ-ҠАТЫН!

# ИҢЕНДӘ ТАЛМАҪ ҠАНАТТАР -

## халҡы ғәме, бала хәстәре



**Ғаилә менән эшен иңендәге ике ҡанат ише берҙәй тигеҙ алып барған ҡыҙ-ҡатындарыбыҙ етерлек бар. Улар өйҙә сабыр ҡатын, хәстәрлекле әсәй, эштә халҡы өсөн йәнен фиҙа ҡылырға әҙер тынғыһыҙ хеҙмәткәр. Ырымбур өлкәһе Орск ҡалаһы башҡорттары ҡоролтайы рәйесе, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, һигеҙ бала әсәһе Миңзәрә АҠҠОШОВА тап шундайҙарҙан. Күмәк ғаиләлә - иғтибар, етәкселек эшендә яуаплылыҡ талап иткән әсәй һәм рәйес вазифаларын башҡарырға ҡайҙан көс-дәрт ала был гүзәл зат? Һүҙҙе үҙенә бирәйек:**

### Күңел йыр-моң көҫәне

Минең атайым Сөләймәнов Нурулла йәне-тәне менән сәнғәткә ғашиҡ кеше ине. Ҡурайҙа, баянда оҫта уйнаны, үҙе йырҙар ижад итте. Уның атаһы ла оҙон көйҙәрҙе бик матур башҡарған. Әсәйем иһә, Сөләймәнова Нәҡиә, уҡытыусы, ауылда ҡатын-ҡыҙҙар советын етәкләгән иң ихтирамлы кешеләрҙән булды. Тәрән фекер йөрөткән аҡыллы ҡатын ине ул. Намыҫ, һөйөү, ихтирам сифаттары миңә унан күскән. Мин үҙем дә бала саҡтан йырҙар ижад иттем, халыҡ йырҙарын йырланым, артист булырға хыяллана инем. Әммә яҙмыш башҡа юлдан алып китте. 17 йәшем тулғас, әхирәтем менән Орск ҡалаһына уҡырға барҙыҡ. Ул ваҡытта Орск әүҙем үҫешкән сәнәғәт ҡалаһы ине. Мин төҙөлөш техникумында уҡып сыҡтым да, механика заводына эшкә урынлаштым, 38 йыл шунда хеҙмәт иттем. Шулай ҙа атайҙан һалынған моң, әсәйҙән килгән ойоштороу һәләте тынғылыҡ бирмәне. Ҡулдар эшләп торор, күңелдән йыр ағылыр ине. Шулай итеп, 1984 йылда "Йәштәр һарайында" "Ҡарлуғас" фольклор ансамбле ойошторҙоҡ. Ырымбур өлкәһенең башҡорт ауылдары буйлап гастролдәргә йөрөнөк. Ул йылдарҙа ҡалабыҙҙа башҡорт телендә гәзит сыҡмағас, Башҡортостан артистары бик килмәгәс, халыҡ тыуған моңдарын тыңларға ихлас йөрөнө, концерттар өсәр көн буйы аншлаг менән үтә ине. Биш йылдан беҙҙең коллективҡа "халыҡ ансамбле" тигән исем бирелде. "Бөтә йөрәктән", "Һыҙҙырт, ҡурай, башҡорт моңдарын" тигән программалар төҙөп, уларға үҙем сценарий, йыр яҙа инем. Бөгөн егерменән артыҡ йырымды Башҡортостан һәм Татарстан йырсылары башҡара, шулар араһынан "Тағын, тағын, тағын да", "Фатиханды бирсе, әсәйем", "Осрашайыҡ әле", "Дуҫтарыма", "Атайыма" кеүек йырҙарым халыҡҡа яҡшы таныш.

### Башҡорт мөхите барлыҡҡа килде

Сит ерҙә үҙ милләтеңде күтәреүе бик ауыр. Ҡалабыҙҙа 1996 йылда Орск башҡорттары ҡоролтайы ойошторолғас, эшләп китеүе еңелдән булманы. Шулай ҙа сабыр итеп, тырышлыҡ һалғанда боҙҙо ҡуҙғатырға мөмкин. 2002 йылда үткән II Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына делегат итеп һайланғас, тәүге маҡсатымдың береһен тормошҡа ашырып, ҡалабыҙҙа башҡорт теле курстары астым. Шуның икенсе йылына уҡ Сибайға барып, бер уҡыусыбыҙ "Урал батыр" эпосын яттан һөйләү конкурсында ҡатнашты, беҙҙә шөғөлләнгән балалар Башҡортостандың юғары уҡыу йорттарына инә башланы. Бынан ун йыл элек "Мин - башҡортмон", тип ауыҙ тултырып әйтеүселәр аҙ булһа, һуңғы йылдарҙа үҙ асылына ҡайтҡан милләттәштәребеҙ арта. Быға ҡалабыҙҙа БСТ каналы күрһәтә башлауы ла йоғонто яһайҙыр. Элек шәхестәребеҙҙе, йырсыларыбыҙҙы танымаһаҡ, хәҙер уларын да белә башланыҡ. Тик, үкенескә ҡаршы, "Юлдаш" каналы тапшырыуҙарын тыңлау мөмкинлеге әле булһа юҡ. Беҙҙең бөтә өлкәнең бер генә урынында "Аманат" телевидениеһы күрһәтә. Уныһы ла элек аҙнаһына ик-өс тапҡыр эфирға сыҡһа, хәҙер айына бер генә тапҡыр тыңлай алабыҙ. Аҙнаһына бер тапҡыр "Каруанһарай" гәзите донъя күрә. Бөгөн иң борсоуға һалғаны - Ырымбур өлкәһендә башҡорт мәктәптәренең кәмеүе. Силәбелә йәшәгән Мөлкәмәнов Рәшит тигән ағай Ҡыуандыҡ районында үҙенең ауылына мәсет төҙөтөп ҡуйҙы, мәктәп китапханаһын асырға тора. Ошо уҡ мәсьәлә - китапханаларҙы башҡорт телендә сыҡҡан баҫмалар менән байытыу - беҙҙең алда торған төп эштәрҙең береһе. Беҙгә бөгөн тел, милләт мәсьәләһен күтәреп, радио-телевиде-

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

# ҺӘР ЕРҘӘ ХӘҮЕФ ҺАҒАЛАЙ...

**Электрон мәғлүмәт сараларында һәр өйҙә лә булған һәм һиҙҙермәй генә беҙҙе ағыулай торған иң хәүефле ун әйберҙең исемлеге һәм уларға ҡыҫҡаса ҡылыҡһырлама бирелде.**

### Көйә

Электән халыҡ ҡулланып килгән лаванда, яран гөлө, әфлисун ҡабыҡтары йәки еҫле һабын көйә күбәләген биҙҙереү өсөн генә яраҡлы, ләкин уларҙың ҡарышлауыҡтарына бер нисек тә тәьҫир итмәй. Ә бит ҡиммәтле тиреле кәпәс, яға, йөн туҡыманан тегелгән йә бәйләнгән кейемһалымды тап ана шул ҡарышлауыҡтар ашай ҙа инде. Шуға күрә уларға ҡаршы көслөрәк химик саралар ярҙамында көрәшәбеҙ. Мәҫәлән, нафталинды алайыҡ. Ул, әлбиттә, күптән һатыуҙан тыйылды. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, һирәкләп сауҙа нөктәләрендә осрап тора һәм шунда уҡ һатылып та бөтә. Һөҙөмтәле булһын өсөн уны күпләп ҡулланырға кәрәк, ә был осраҡта уның кеше организмы өсөн ифрат зыянлы булыуын онотorға ярамай: нафталин парҙары бүленеп сыҡҡан бүлмәләге һауаны һулап, ағыуланырға мөмкин. Британия ғалимдары асыҡлауынса, нафталиндағы икенсе бер актив матдә - парадихлорбензол иһә кеше өсөн көслө аллерген да икән, ул астма өйәнәгенә сәбәпсе булыуы ихтимал.

### ДСП

Икенсе бер киң таралған зыянлы матдә - формальдегид. Ул ағас-юнысҡы плитәләрҙән эшләнгән мебель ҡуйылған йорттарҙың һауаһында ныҡ тупланған була. Формальдегидты күпләп бүлеп сығарыусы тағы бер сығанаҡ - газ плитәһе. Метандың тулыһынса янып бөтмәүе һауаны ДНК һәм бала табыу һәләтенә, күҙҙәргә һәм тирегә бик насар тәьҫир итеүсе зарарлы ҡушымталар менән бысрата. Ул хатта канцероген матдә тип танылды.

Ә шулай ҙа ДСП-нан эшләнгән иҫке мебелде сығарып ташларға ашыҡмағыҙ: ваҡыт үтеү менән уларҙан бүленеп сығыусы формальдегид миҡдары аҙая бара һәм аҡрынлап хәүефле булыуҙан туҡтай. Тик тәүге мәлдәрҙә, шулай уҡ газ плитәһен эшләткәндә бүлмәләрҙе йышыраҡ елләтеп тороу кәрәк.

### Синтетик сүстән келәмдәр

Синтетик сүс келәмдәрҙең күбеһенә уларҙы етештергән ваҡытта ағыулы матдәләр һеңдерелгән, улар көслө электрлау тәьҫиренә эйә. Һынап ҡарағыҙ әле: ошондай келәмдәр һатылған магазинға инеүегеҙ булыр, танауығыҙға зәһәр еҫ килеп бәрелер. Ундағы һауала елемләп йәбештерелгән ҡатламдан бүленеп сыҡҡан ағыулы матдәләр быуы ысын мәғәнәһендә "аҫылынып" тора.

Әгәр һеҙ яңы келәм һатып алған икәнһегеҙ, уны йоҡо бүлмәһе стенаһына элеп ҡуйырға ашыҡмағыҙ. Иң яҡшыһы: уны еҫе таралғансы йәйелгән килеш үҙегеҙ йәшәмәгән урында (дачала, лоджияла һ.б.) ике-өс аҙна тотоп алығыҙ.

### Лазерлы принтер

Австралия ғалимдары лазерлы принтерҙың кеше сәләмәтлегенә тәмәке тартҡандағы кеүек үк зыян килтереүен асыҡлаған. Эш шунда: эшләгән саҡта принтерҙан баҫмала ҡулланылған порошоктың ваҡ ҡына өлөшсәләре һауаға бүленеп сыға. Һөҙөмтәлә тын алыуы ауырлаша, хроник ауырыуҙар барлыҡҡа килә. Был ҡулайламаны яҡшы елләтелгән урында тотоғоҙ һәм кәрәкмәгәнгә эш режимына көйләмәгеҙ.

ниеға сығыу ҙа ҙур ауырлыҡ тыуҙыра, гәзиттә әлләни урын бирә һалып бармайҙар, һәр нәмә түләүле.

Янырағ "Дуҫлыҡ йортонан" беҙгә бүлмә бирҙеләр. Ошо бәләкәй генә бүлмәне һәм бер нисә бөртөк уҡыу әсбаптары алыр өсөн әллә күпме кәртәләрҙе йырып сығырға тура килде. Милли рух мәсьәләһенә килгәндә, һәр милләттәшебеҙҙе үҙ асылына ҡайтарыу өсөн күп көс һалырға тура килә. Мәҫәлән, мин башҡорт концертына тамашаһы йыйыр өсөн бер кешегә генә бишәр тапҡыр шылтыратып сығам. Бер нисә йыл рәттән беҙ башҡорт ритайымдары ойошторҙоҡ. Унда йәштәр бик күпләп йөрөнө. Хәйбулла, Ейәнсура райондары менән үҙ-ара хеҙмәттәшлек итеп йәшәйбеҙ. Башҡортостандың ярҙамын аҙ ғына тойоу ҙа беҙгә ҡанат бирә, кемгәләр кәрәклегебеҙҙе аңлайбыҙ.

Бөгөн алдыбыҙҙа III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайын ҡаршылау, Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу кеүек ҙур эштәр тора. Уларҙы лайыҡлы итеп үткәреү - беҙҙең бурыс. Беҙ Орск ҡалаһы башҡорттары ҡоролтайы Хәйбулла районы гәзите редакцияһы менән берлектә Ырымбур өлкәһенең һәр башҡорт ауылына йөрөй башланыҡ. Ишкенә ауылынан сыҡҡан Үтәмәшев тигән бик арҙаҡлы шәхес тураһында материалдар туплап, китап сығарып, шуның исем туйын уҙғарҙыҡ. Янырағ ҡына Новотроицк ҡалаһына ҡараған 3-сө Новорудный ауылы мәктәбе уҡыусылары һәм Орск ҡалаһы ҡоролтайы тырышлығы менән Башҡортостан мәҙәниәте көндәре үтте. Әле Адамовка районы өйрәнелмәгән, унда аҙмыкүпме башҡорттар йәшәй. Хәҙер уларҙы үҙ асылдарына ҡайтарыу йәһәтенән эш башларға кәрәк.

## Башҡортостан - изге әсәбеҙ

Мин ситтә йәшәһәм дә тыуған Башҡортостаным менән һәр ваҡыт ғорурланам. Ырымбур сиген үтеп, уға килеп инеү менән бүтәнсә йәшәйеш, бүтәнсә көнкүреш, бүтәнсә һулыш тояһың. Башҡорт халҡы үҙенең ябайлығы, алсаҡлығы, ҡунаҡсыллығы менән айырылып тора, быға тыуған яҡтарға ҡайтҡан, Өфөләргә килгән һайын ҡабат-ҡабат инанам. Баш ҡала халҡының иҫ киткес ягымлы, үҙенең булмышына иғтибарлы булыуына ғәжәпләнеп, һоҡланып бөтә алмайым. Янырағ Өфөгә эш буйынса килгәнемдә итек йүнәтеү оҫтаханаһына ингәйнем. Унда бер әрмән ултыра. Был минән: "Эштәр нисек бара?" - тип һорай. Мин быға үҙемдең ниндәй йомош менән килеүемде, эштәремдең уң барыуын һөйләп бирҙем. Был минә: "Һеҙ ниндәй бәхетле кеше. Башҡортостан һеҙҙе генә түгел, беҙҙе, сит милләт вәкилдәрен дә, ситкә тибәргәне юҡ. Мин Өфөлә ҡырҡ йылдан ашыу йәшәйем, һәр ваҡыт ошондағы халыҡтың ярҙамын тойоп йәшәйем, Башҡортостан еренең икмәген ашайым, һауаһын һулайым, һыуын эсәм - мин шуға ғорурмын һәм рәхмәтлемен", - ти. Әрмән кешеһенең был һүҙҙәре миндә шул тиклем йылы тойғолар ҡалдырҙы. Ысынлап та, Башҡортостан беҙҙең кеүек ситтә йәшәүсе башҡорттар өсөн изге әсә кеүек, беҙ уға һағынып ҡайтып һыйынабыҙ, ярҙам һорайбыҙ, яҡлау табабыҙ.

"Халҡым", тип йәшәгәс, Аллаһы Тәғәлә үҙе ярҙам бирә. Мин бәхетлемен, тирә-яғымды тик яҡшы кешеләр генә уратып алған. Үҙең һәйбәт булһаң, һинә үл бумеранг шикелле кире әйләнеп ҡайта. Мин үҙебеҙгә килгән яҡташтарыма, рухташтарыма һәр ваҡыт ҡулдан килгәнсә ярҙам итергә тырышам, беҙҙән ҡыуанып ҡайтыуҙарын теләйем. Милләттәштәремдең ихтирамын тойоп йәшәү ҙә минең эшемә көс-дәрт бирә.

## Балаларым менән бәхетлемен

Мин икенсегә кейәүгә сыҡҡанда үҙемдең өс, иремдең биш балаһы бар ине. Яратыуҙы иң тәүҙә үҙеңдә тәрбиәләргә кәрәк. Мин балаларҙың һәммәһенә лә тигеҙ ҡарарға, һөйөүемде һәммәһенә лә еткерергә тырышам. Ни булһа ла, "Атайыҡыҙ" тип, ғаилә башлығы дәрәжәһен күтәреү яғындамын. Егерме йыл бергә татыу йәшәйбеҙ, хәҙер инде балаларыбыҙҙың күбеһе ғаиләле булды. Әйткәндәй, ирем менән беҙ хәҙер ҡоҙа булыштыҡ. Уның икенсе улы Руслан минең уртансы ҡыҙыма өйләнде.

Бәләкәй генә шәхесте лә ҙур итеп күрә белгәндә, бәләкәй генә эшен дә хуплап, күңелен үҫтергәндә, эске донъяһын һиҙемләргә өйрәнгәндә, бала күңеленә аҫыҡс яратыуы ауыр түгел. Ҡайһы саҡта уға бер йылы һүҙ ҙә етә. Балаға тауыш күтәреп, күңелен ҡыйырға ярамай, үҙ өлгөндә хеҙмәттә тәрбиәләргә кәрәк. Ашарға бешерә башлаһам, барыһын да ярҙамлашырға саҡырам. Кемеһелер бишбармаҡ өсөн ҡамыр баҫа, кемеһе картуф әрсей, кемеһе һауыт-һаба йыуа. Эш араһында төрлө темаларға әңгәмә ҡорабыҙ, бергәләшеп йырлайбыҙ. Йыр кешене рухи яҡтан байыта бит ул. Барыһы ла һәр ваҡыт шыма ғына булып тормай. Ниндәйҙер киҫкен хәл-ваҡиға килеп тыуһа, мин сабырлыҡ күрһәтергә тырышам. Әйтеүең көмөш булһа, өндәшмәүең алтын, тиҙәр бит.

Кешене доғалар һаҡлай. Мин Ҡөрьәнде уҡыр өсөн махсус рәүештә ғәрәп телен өйрәндем. Хәҙер улдарым да ғәрәпсә уҡый белә. Ғөмүмән, мин балаларыма өлгө, көнәшсе булыр өсөн бөтә яҡлап та камиллашырға, үҫешергә тырышам. Кеше араһында ихтирамын булғанда, балаларың да һинең дәрәжәңә тап төшөрмәҫ, тәртипле булып үҫер. Әйтәләр бит: кеше көсһеҙ булғанда бәхетле икән, ул ысынлап та бәхетле кеше. Мин балаларыма ҡарайым да үҙемдең ни тиклем бәхетле булыуымды аңлайым.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бәхетте һәр кем үҙенсә аңлай. Миңзәрә Аҡкошова өсөн халҡы киләсәгенә үҙ өлөшөн индерә алыу, уға хеҙмәт итеү, милли рухлы балалар тәрбиәләү оло бәхет. Тап шуға ла ул иңенә төшкән ҙур яуаплылыкты еңеллек менән башҡара, эшенән йыуаныс, ғаиләһенән ҡыуаныс таба.**

**Динара ЯҠШЫБАЕВА яҙып алды.**

## Пластик шешәләр

Пластик шешәләрҙе етештергәндә (шул иҫәптән балалар өсөн тәғәйенләнгәндәрен дә) А бифенолы ҡулланыла. Ғалимдар күптән инде уға шикләнеп ҡарай ине, сөнки А бифенолы тәҙәләшә буйынса ҡатын-ҡыҙҙарҙың эстроген енес гормонына оҡшаш. АҠШ-тың Милли токсикология программаһы эксперттары бынан бер нисә йыл элек үк уның тәжрибә үткәрелгән хайуандарҙа енси өлгөрөүҙе тиҙләтеүе, ҡылыҡтары үҙгәреүҙе, шулай уҡ простата һәм һөт биҙҙәре яман шешенә килтереү фактарын билдәләгән. Әсемлектәрҙе бер ҡасан да пластик шешәләрҙә йылытмағыҙ! Уларҙы хатта эҫе һыу менән йыуырға ла ярамай. Һәм айырыуса шуныһы мөһим: ризыҡты пластик һауыттарҙа микроволновкала йылытмағыҙ: ҡыҙған ваҡытта А бифенолы бүленеп сығыу 55 тапҡырға арта.

## Пестицидтар

Пестицидтар зарарлы организмдарға ҡаршы көрәштә ҡулланылыусы химик матдәләр. Ағыулаусы был матдәләр һәр бер ғаиләлә бар: кемдер уларҙы тараҡанға, икенселәр серәкәйгә йәки сыҫҡандарға ҡаршы файҙалана. Гарвард университетының медицина факультеты ғалимдары, аҙ ғына күләмдә булһа ла пестицидтар тәьҫиренә дусар ителгән кешеләрҙең ул матдәләр менән бөтөнләй эш итмәгән кешеләргә ҡарағанда Паркинсон сире менән 70 процентка йышыраҡ ауырыу фактын асыҡлаған.

## Тиҙ тоҡаныуға ҡаршы саралар

Матрастар, мебель тыштарын, теле- һәм компьютер деталдәрен эшләүҙә файҙаланылған был саралар өйҙә янғын сығыу хәүефен иҫкәртеп, күп кешенең ғүмерен һаҡлап алып ҡалды. Тиҙ тоҡаныуға ҡаршы файҙаланылған был полибромлы дифенил эфирҙар (ПБДЭ) тәүҙә "ура" ҡысҡырып ҡабул ителһә лә, аҙаҡ уның кеше сәләмәтлеге өсөн бик зыянлы булыуы асыҡланды. Һүндерелмәгән тәмәке төпсөгөнән тиҙ генә ҡабынып барыусан пенополиуретан матрастар әлеге ҡатнашма менән эшкәртелә ине. Ләкин бер нисә йылдан һуң донъя буйынса ана шундай матрастарҙа йоҡлаған йөҙәрләгән мең кешенең һаулығында проблемалар барлыҡҡа килә башланы. Был ағыулы матдәләр кеше организмына тағы ла көнкүреш туҙаны менән дә эләгеүсән. Был өлкәлә тикшеренеүселәрҙең күбеһе ПБДЭ-ны торлаҡ биналарында файҙаланыуҙы ҡәтғи тыйыу яғында.

## Фталаттар

Пластификатор булараҡ, фталаттар уйынсыҡ, балаларға теш дуңғәләге, һөт һалып имеҙә торған бәләкәй шешәләр етештереүҙә һәм, ғөмүмән, йомшаҡ пластик кәрәк булған осраҡтарҙа киң файҙаланыла.

Улар шулай уҡ ир-егеттәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар косметикаһында - арзанында ла, ярайһы ҡиммәтлеһендә лә бар. Эстроген структураһына оҡшаш булғанлыҡтан, фталаттарҙы электән үк хуплап барманылар. Америка һәм Канада ғалимдары был матдәләрҙең малайҙар үҫешен, ә өлкәнерәк ир-егеттәрҙә тестостерон тәьҫирен тотҡарлауы һәм түлһеҙлеккә килтереүен раҫлай. Канадала хатта етештереүселәрҙән тауар ҡабында продукция составында фтлаттарҙың булыу-булмауы тураһында мәғлүмәттәр биреүҙе талап иткән ҡәтғи сығыштар булып тора.

## Ҡурғаш буяуҙар

Күп кенә фатирҙарҙа стена һәм ишектәр ҡурғаш буяуҙар менән буялған. Әгәр буяу ярғыланып йә ҡойолоп тормаһа, ул зарарлы түгел. Ҡупҡан буяу йортта йәшәүселәр өсөн бик етди экологик хәүеф тыуҙыра: кешеләр ҡурғаш ҡатнашҡан ағыулы һауа һуларға мәжбүр. Бындай һауа айырыуса балалар өсөн зарарлы, сөнки ул аҙ ғына миҡдарҙа тупланған хәлдә лә үҙәк нервылар системаһы өсөн проблема тыуҙырыуы ихтимал. Әгәр бындай урындарҙы икенсе төр буяуға яңынан буярға теләһәгеҙ, иҫке ҡатламды ҡурғаш буяуҙан тулыһынса таҙартығыҙ. Ә был эште белгестәргә ҡушыу урынлы булыр.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Аңыңды контролдә тот

Аң ысынбарлыҡтағы ваҡиғаны ысынбарлыҡҡа тап килмәгәненән айыра аламы? Быны тикшереп ҡарау өсөн тәнеңде яҙып, тыныс ҡына ултырып уйланырлыҡ уңайлы мәл һайла. Тулыһынса тынысланғас, үҙеңде ҡулыңа лимон тотоп ултырыһың икән, тип күҙ алдына килтер. Уның балауыҙ шикелле ҡутырлы тышын той. Ҡулыңа төшкән ауырлығын тойорға тырыш. Унан һуң, үткер бысаҡ алып, уны урталай киҫәһең тип күҙ алдына килтер. Танауыңа уның әскелтем еҫе бәрелә. Лимондың киҫелгән урынына бармаҡ батырыуың була, унан һут һығылып сыға. Хәҙер инде лимондың бер өлөшөн ауыҙыңа алып ҡабыуыңды күҙ алдына килтер. Һин шундуҡ әсе тәм тойҙоң, шулаймы? Ауыҙың шайыҡ менән тула башланамы? Һинең аңың ысын лимон ашауыңа шул тиклем инанды, һәм шуға ла был емештәге цитрон кислотаһын нейтраллаштереү өсөн физиологик механизмдарҙы хәрәкәткә килтерҙе. Тап ошо факт, аңдың ысынбарлыҡ менән күҙаллауҙар араһындағы айырманы һәр ваҡытта ла билдәләй алмауы, беҙгә уңышлы тормош төҙәү аҫҡысын тәҡдим итә лә инде. Әгәр ҙә беҙ үҙебеҙҙе үҙ-үҙенә ышанған, аҡыллы һәм бүтәндәр тураһында хәстәрлек күргән кеше булараҡ күҙ алдына килтерәбеҙ икән, аң был сифаттарҙы бер өлөшөбөҙ итеп ҡабул итә. Күҙ алдына килтерә алыу һәләте аша беҙ уйҙар өҫтөндә ыңғай контроль булдырабыҙ. Шул рәүешле уйҙарыбыҙ өсөн яуап биреп, беҙ тормош тәжрибәбеҙҙе үҙебеҙ ҡора алыу власына эйә булабыҙ.

Әйтәйек, аңың таныш булмаған илгә йөҙәргә әҙер булған корабль икән, ти. Тәғәйенләнгән урынға тиҙ арала һәм именһау барып етеү өсөн корабль менән яҡшы командаһы булған һәм төрлө карталар, таблицалар һәм башҡа кәрәк-яраҡтар менән ҡоралланған тәжрибәле капитан етәкселек итергә тейеш. Тап шулай уҡ аң менән дә яҡшы идара иткәндә, ул да ҡуйылған маҡсатҡа өлгәшәсәк. Быға ҡапма-ҡаршы миҫал итеп шул уҡ судноның двигателе тоҡандырылған килеш капитанһыҙ йәки командаһыҙ дингеҙгә сығыу осрағын ҡарайыҡ. Бындай шарттарҙа судно кәрәкле портҡа эләгә алмай, ел, тулҡын һәм ағым ихтыярына биреләсәк.

Әгәр беҙ уйҙарыбыҙҙы формалаштырып, аңыбыҙҙы кәрәкле урынға йүнәлтеү өсөн үҙебеҙ эйә була алырҙай власты, аҡылды файҙаланмайбыҙ икән, океанда курстан тайпылып, йүнәлешен үҙгәрткән судноға оҡшаш буласаҡбыҙ. Беҙҙең дә көслө тулҡынға - тышҡы йоғонтолар тәьҫиренә буйһоноп, юлдан тайпылыуыбыҙ ихтимал.

Һинең аңың - һинең судно, ә һин уның капитаны. Уйҙар һинең тормош юлыңды билдәләүсе ихтыярына буйһонорға тейеш. Һинең потенциаль мөмкинлектәрең сикләнмәгән. Ғәҙәттә, аңың менән ыңғай идара иткәндә һәм үҙең теләгән әйберҙәргә йүнәлтеүсе уйҙар формалаштырғанда, һин ҡайҙа теләйһең, шунда бара аласаҡһың, нимә теләйһең, шуны эшләй аласаҡһың, кем булырға теләһәң, шундай кеше була аласаҡһың.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

# Иҫәпленең... халҡы теүәл,

## йәки Башҡорттарҙың хәҙерге демографик хәле тураһында

**(Аҙағы. Башы 8-9-сы биттәрҙә).**

Был проблема 1995 йылда I Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында ла ҡаралды. Ошо форумдың резолюцияһына ярашлы, 1995 йылда БР Фәндәр академияһы академигы З. Ғ. Ураҡсин һәм социолог Р.М. Вәлиәхмәтов етәкселегендә Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты, БР ФА-ның Гуманитар фәндәр бүлеге, Башҡорт дәүләт университеты һәм Өфө авиация-техник университеты ғалимдары тарафынан "Башҡорт халҡын тергеҙеү һәм үҫтереү" тигән Дәүләт программаһы әҙерләнде. Ошо программала башҡорттарҙың һаны кәмеүе факторҙарына ҙур иғтибар бирелеп, милләттең насарая барған этнодемографик хәлен яҡшыртыу юлдары ла билдәләнгәйне. Ҡыҙғаныска ҡаршы, ошо проект ҡабул ителмәйенсә ҡалып, ғәмәлгә ашырылманы.

Шуға ҡарамаҫтан, республика етәкселеге тарафынан 90-сы йылдарҙа һәм XXI быуат башында күпселеге башҡорттар йәшәгән райондарҙың социаль-иҡтисади үҫешен тәьмин итеү өсөн байтаҡ эштәр башҡарылды. Һөҙөмтәлә ошо төбәктәрҙә торлаҡ, мәғариф, һаулыҡ һаҡлау, мәҙәниәт һәм спорт объекттарын төҙөү алға китте. Асфальт түшәлгән юлдар һалыу, күперҙәр төҙөү, ауылдарға газ индереү ҙә эҙһеҙ үтмәне. Бында ҡулланыу тауарҙары һәм хеҙмәт күрһәтеү баҙары ла үҫеш алды.Элек күпселек күрһәткестәре буйынса артта ҡалыусы Хәйбулла, Бөрйән, Ейәнсура, Күгәрсен, Ғафури, Ишембай, Салауат, Мәсетле һәм башҡа райондарҙың социаль һәм иҡтисади торошонда ыңғай үҙгәрештәр барлыҡҡа килде. Һөҙөмтәлә башҡорттарҙың күрше төбәктәргә миграцияһы кәмей төштө. Тап ошо йылдарҙа Бәйләнешһеҙ Дәүләттәр Берләшмәһе илдәрендә йәшәүсе башҡорттарҙың бер өлөшө үҙ ватанына әйләнеп ҡайтты. 1993-2003 йылдарҙа Башҡортостан Республикаһына 76 865 башҡорт ҡайтты, был иммигранттарҙың 18 процентын тәшкил итә. Республикала йәшәүсе башҡорттарҙың 57,6 проценты ауылдарҙа көн итә, был башҡа милләт халыҡтарына ҡарағанда байтаҡҡа юғары күрһәткес. Ауыл ғаиләләрендә тыуым күрһәткесе лә юғарыраҡ, һәм был халҡыбыҙҙың демографик хәле өсөн ыңғай күренеш.

БР Конституцияһына ярашлы, "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы Законда бөтөн республика территорияһында башҡорт һәм рус телдәре дәүләт телдәре, тип иғлан ителде. Дөйөм белем биреү мәктәптәрендә башҡорт теле дәүләт теле булараҡ уҡытыла башланы. Был закон көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының туған телен һәм милли үҙаңын тергеҙеү йәһәтенән бик әһәмиәтле.

Әле телгә алынған факторҙарҙың ыңғай йоғонтоһо һөҙөмтәһендә 2002 йылғы халыҡ иҫәбен алыу барышында илебеҙҙә йәшәүсе башҡорттарҙың һанын объектив рәүештә билдәләү мөмкин булды: Рәсәй Федерацияһында барлығы 1 673 389 башҡорт кешеһе теркәлде. 2002 йылда Башҡортостанда 4 104 336 кеше йәшәһә, уларҙың 1 490 715-е (36,32%) - рус, 1 221300-ө (29,75%) - башҡорт, 990 702-һе (24,14%) татар милләтенә ҡарағанлығы билдәле булды. Социолог И.З. Солтанморатов асыҡлауынса, был һандарҙың дөрөҫлөгөн демографтарҙың күҙаллауы ла раҫлай: башҡорт халҡы буйынса Рәсәй Фәндәр академияһының Халыҡ хужалығын прогнозлау институты яһаған прогноз Америка демографы М. Бернштамдың демографик күрһәткестәрҙе анализлау нигеҙендә 2000 йылға башҡорттарҙың иҫәбе 1 миллион 556 меңгә етәсәге хаҡындағы фекере менән тап килә.

### Рәсәйҙе кемдәр "үгәй әсәй"гә әйләндерергә теләй?

Ҡыҙғаныска ҡаршы, XXI быуат башында Федераль үҙәктең милли сәйәсәтендә негатив тенденциялар өҫтөнлөк итә башланы, Рәсәй Федерацияһы халыҡтарын ассимиляциялауға юл алып, "рәсәйле" исеме аҫтында "граждандар милләте"н булдырыуға уҡталыу уғата көсәйеп китте. Мәҫәлән, "Рәсәй Федерацияһында дәүләт милли сәйәсәте нигеҙҙәре тураһында"ғы Федераль закон концепцияһында тап ошо хаҡта һүҙ бара. В. А. Тишков етәкселегендә РФА-ның Н.Н. Миклухо-Маклай исемендәге Этнология һәм антропология институтында әҙерләнгән был документта Рәсәй Федерацияһының милли дәүләтселек төҙөлөшө үҙенсәлеге бөтөнләйгә танылмай һәм Рәсәй Конституцияһының төп положениеларын ревизиялауға иҫәп тотола. Әйткәндәй, этнолог В.А. Тишков "Милләтте дәүләттәр тыуҙыра, киреһенсә түгел", тигән ҡарашты иң ныҡ яҡлаусылар рәтендә тора. Әммә был ҡараш универсаль була алмай һәм бар осраҡтарҙа ла хәҡиҡәткә тап килә, тип әйтеп булмай. Ул колониаль баҫып алыу нигеҙендә башҡа илдәрҙән һәм континенттарҙан күсеп килгән кешеләр тарафынан нигеҙләнгән дәүләттәргә генә ҡағыла. Был осраҡта һүҙ иң элек АҠШ, Канада, Америка континентының башҡа дәүләттәре, Австралия, Яңы Зеландия тураһында бара. Рәсәйгә килгәндә, милләттең дәүләт тарафынан ойошторолоуы хаҡындағы идеяны бер нисек тә нигеҙләрлек түгел, сөнки рус булмаған милләттәр Рәсәй дәүләтселеге ярҙамында түгел, ә үҙҙәрен үҙаллы этнос рәүешендә һаҡлап ҡалыу өсөн уның менән көрәш алып барыу шарттарында формалаша. Мәҫәлән, башҡорт милләте тарихын башҡаса күҙ алдына ла килтереп булмай.

Әйтергә кәрәк, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы һәм Бөтөн донъя татарҙары конгрессы рәйестәре үҙҙәренең берлектәге белдереүендә "берҙәм Рәсәй милләте"н яһалма рәүештә булдырыуға уҡталыуҙы ҡырҡа ғәйепләп, һүҙ барған Федераль закон проекты концепцияһын халыҡтарға, милләттәргә һәм ғәмәлдәге Рәсәй Конституцияһына ҡаршы йүнәлтелгән документ, тип баһаланы. Әммә ғәмәлдә ул федераль властарҙың милли сәйәсәте нигеҙенә әүерелеп бара. 2009 йылдың йәйендә йәштәрҙең Селигерҙағы "Рәсәй бөтәһе өсөн дә" лозунгыһы аҫтында барған осрашыуында ҡатнашыусылар менән ойошторолған тура эфирҙа РФ Президенты Д. А. Медведевтың Рәсәй өсөн тап Америкалағыса бер ниндәй милләттәрҙең дә булмауының яҡшыраҡ икәнлеген асыҡтан-асыҡ белдереүе юҡҡа түгел.

Билдәле философ һәм политик Александр Ципко 2010 йылдың апрелендә "Аргументы и факты" баҫмаһында донъя күргән "Рәсәй рустар өсөнмө?" тигән мәҡәләһендә бик дөрөҫ фекер йөрөтә: "Власть крайне медленно перестраивает свою кадровую политику, идеологию и политическую систему в соответствии с императивом сохранения целостной многонациональной России. Проблема терроризма на Северном Кавказе решается прежде всего в Москве. Надо понимать, что целостная Россия - это не государство русских, а уникальный, исторически сложившийся союз христианских, мусульманских и других народов. ... Россия -это не просто федерация, а многонациональная страна, где все народы живут веками на своих исторических территориях и в силу этого ощущают себя равноправными, наравне с русскими, хозяевами Российской Федерации. Обязательным условием сохранения России является формирование многонациональной элиты, где есть место представителям всех народов (это прекрасно понимали и учитывали как цари, так и большевики). А сейчас, скажем, наша Конституция практически не учитывает многонациональную природу России. Совет Федерации так и не стал палатой национальностей. Принцип отделения государства от церкви на практике вылился в то, что в культурной политике духовные особенности мусульманских народов, да и православных тоже, игнорируются". Ошо күренекле политологтың һығымталары менән килешмәйенсә булмай.

Башҡортостан Республикаһы Президенты М.Ғ. Рәхимовтың БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайға Мөрәжәғәтнамәһендә республикала кеше потенциалы үҫешенең һөҙөмтәле моделен булдырыу һәм демографик кәмеүҙе үтеп сығыу, үлемде кәметеп, тыуымды күтәреү, халыҡтың ғүмер оҙайлығын үҫтереүҙә уңышҡа өлгәшеү тураһында һүҙ барыуы киләсәккә ышаныс менән ҡарау мөмкинлеген тыуҙыра. Башҡортостан Президенты һүҙҙәре менән әйткәндә, "яңы тарихи шарттарҙа башҡорт халҡын һаҡлап ҡалыу һәм үҫтереү юлдарын табыу йәһәтенән III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына ҙур өмөттәр бағлана". XXI быуат башында ла ауыл мөхите үҙ иткән халҡыбыҙҙың тыуым күрһәткестәренең республикала йәшәүсе башҡа этностарҙыҡынан юғарыраҡ булыуы ҡыуаныслы. Былар барыһы ла, әле лә айырым ҡапма-ҡаршылыҡтар һәм ауырлыҡтар булыуына ҡарамаҫтан, алда торған халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләренең республикабыҙ һәм уның төп халҡы өсөн ыңғай булырына өмөт уята.

Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ
әҙерләне.

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры



**18 майҙа** Ф.Бүләковтың **"Эх, күгәрсенкәйҙәрем!.."** мелодрамаһы.

**19 майҙа** **"Ҡоҙаса"** (Б.Бикбай, З.Исмәғилев) музыкаль комедияһы.

**22 майҙа** Балалар өсөн театраль концерт.

### Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**18-19 майҙа** 19.00 сәғәттә У.Шекспирҙың **"Ун икенсе төн"** комедияһы премьераһы.

**20 майҙа** XX иждад миҙгелен ябыуға арналған театрлаштырылған тамаша.

### Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**20 майҙа** Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығына арналған "Ветерандар, һеҙҙең алдығыҙҙа баш әйәбеҙ!" тип аталған концерт программаһы менән иждад миҙгелен ябыу кисәһе үтә. Тамашаның беренсе бүлегендә - һуғыш йылдарында яҙылған, икенсеһендә һуғыш һәм тыл ветерандарын иҫкә алыуға арналған өр-яңы йырҙар яңғыраясаҡ. Концертта Ф.Ғәниев, Г.Үлмәҫҡолова, В.Хызыров, Ә.Ғәлләмова, А.Ғиззәтуллин, А.Тимеров, Ә.Юлсурина, В.Зәкиев, У.Мортазин, И.Әсәҙуллина, Г.Измайлова, Н.Ҡадирова, Р.Шаһбалов, Ғ.Алтынбаев, БР-ҙың Дәүләт академия хор капеллаһы, БР-ҙың халыҡ музыка ҡоралдары милли оркестры, "Далан", "Каруанһарай" төркөмдәре сығыш яһаясаҡ.

**Әйткәндәй, концертҡа тиклем һеҙҙе фойела күп сюрпризлар һәм бүләктәр көтә.**

### Салауат башҡорт дәүләт драма театры

**20 майҙа** Т.Миңнуллиндың **"Шулай булды шул..."** комедияһы.

**21 майҙа** М.Багаевтың **"Картайғанда тыртайған"** комедияһы.

## ҠУЛЛАНЫУСЫ ӘЛИФБАҺЫ

### ИТЕГЕҢДЕ ЯҢЫ САҒЫНАН ҺАҠЛА

Барыбыҙ ҙа аяҡ кейемен дөрөҫ тәрбиәләү уны оҙаҡ ваҡыт матур һәм уңайлы итеп һаҡларға булышлыҡ итә икәнен белә. Әммә беҙ аяҡ кейемен күпмелер кейеп йөрөгәндән һуң ғына ҡарай, тәрбиәләй башлайбыҙ. Был дөрөҫ түгел. Аяҡ кейемен тәүге тапҡыр урамға кейеп сығыр алдынан уҡ тәрбиәләй башларға кәрәк.

■ Кейеп сығыр алдынан аяҡ кейемен һаҡлағыс саралар менән эшкәртегеҙ, ә өйгә ҡайтҡас, уны йыуығыҙ һәм таҙартығыҙ.

■ Аяҡ кейемен батареяға һәм башҡа йылытҡыс приборҙарға ҡуйып киптермәгеҙ. Был тире өсөн бик зарарлы. Аяҡ кейеме бүлмә температураһында кибергә тейеш. Шулай уҡ уны ағып торған һыуҙа йыуырға кәңәш ителмәй.

■ Әгәр аяҡ кейемендә насар еҫ барлыҡҡа килгән икән, уның эсенә аҙ ғенә сода һирпеп, ҡағып алырға мөмкин. Кейеп йөрөгәндән һуң аяҡ кейеменә гәзит тултырығыҙ. Ул насар еҫте үҙенә һеңдерәсәк.

■ Мөмкинлегегеҙ булһа, тәбиғи күндән тегелгән аяҡ кейеме һатып алырға тырышығыҙ. Яһалма күн һауа үткәрмәй һәм дымды һеңдермәй. Ундай аяҡ кейеме кейеү резина итек кейеү менән бер - унда аяҡ тын алмай һәм дым быуға әйләнмәй.

*Йәшлегең мөхәббәтһеҙ үтһә, ҡартлыҡта аҡыл ултырмаһа... ғүмерең бушҡа уҙған, тигән һүҙ.*

*(Швед халыҡ мәҡәле).*



МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ!

# БАШҠОРТ - ТӘБИҒӘТ БАЛАҺЫ,

## был беҙҙең бейеүҙәрҙә лә сағыла



**Башҡорт бейеүен башҡарыусыларҙың "Байыҡ-2009" балалар телевизион конкурсында Гран-при яулаусы, Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты уҡыусыһы Рәфис ИҘРИСОВ яңыраҡ "Алтын майҙан-Эльбрус" халыҡ-ара этник сәнғәт фестиваль-конкурсында ҡатнашып, беренсе премияға лайыҡ булды. Ошо фестивалдән алған тәьҫораттарын Рәфис гәзит уҡыусылар менән уртаҡлаша:**

-Фестиваль Науруз байрамынан башланды. Ул көндө беҙ "Алтын майҙан" сәхнәһендә беренсе тапҡыр бейенек, һуңынан барыбыҙ ҙа урамға - байрамға сыҡтыҡ. Шул кистә үк "Киске майҙан" дискотекаһында кавказ, украин һәм башҡа милләттәр бейеүҙәрен бейеп ҡараныҡ. Этнохореограф Мөхтәр Кудаев Кавказ халыҡтары бейеүҙәренең үҙенсәлеге тураһында һөйләне, оҫталыҡ дәрестәре үткәрҙе. Миңә бигерәк тә балҡар һәм осетин халыҡ бейеүҙәре оҡшаны, уларҙа тау халыҡтарының сикһеҙ ғорурлығы, илһөйәрлеге, холҡононң ҡыҙыулығы тулыһынса сағыла. Ә беҙҙең бейеүҙәрҙә ундай сабырһыҙ яндырайлыҡ юҡ. Эйе, беҙ ҙә яугир, батыр халыҡ, әммә башҡорт тәбиғәт балаһы. Тап ошо сифаттар бейеүҙәребеҙҙе башҡа халыҡтарҙыҡынан бер башҡа юғарыға күтәрә лә инде.

Мин бәләкәй саҡтан ҡурайҙа уйнап, йырлап йөрөһәм дә, 6-сы синыфтан ғына бейей башланым. Шулай ҙа ҡурай һәм йырға ҡарағанда бейеү күңелемә күпкә яҡыныраҡ. Сәхнәгә иң тәүҙә "Алдар батыр" менән сыҡтым. Уны миңә Баймаҡ ҡалаһында Динислам Исҡужин өйрәтте. "Еҙ үксә"не яратып бейейем. Талғын, лирик бейеүҙәргә ҡарағанда, дәртле бейеүҙәр нығыраҡ оҡшай. Сәхнәгә бейергә сыҡһам, мин бар донъямды онотам. Дөрөҫөн генә әйткәндә, сәхнәләге үҙем тормоштағы үҙемә ҡарағанда нығыраҡ оҡшай.

Минең өсөн был фестиваль шуның менән дә әһәмиәтле булды: Ҡабарҙа-Балҡарҙа үҙ милләтем өсөн ҙур ғорурлыҡ тойғоһо кисерҙем, ә быға тиклем был турала уйланғаным да юҡ ине. Әйткәндәй, урындағы халыҡ башҡорттарҙы белә, күбеһе әрмелә башҡорт егеттәре менән бергә хеҙмәт иттек, тип, беҙҙең халыҡ тураһында яҡшы һүҙҙәр әйтте. Үҙем өсөн шундай һығымта ла яһаным: баҡтиһәң, һиңә ҡарап, милләтең тураһында дөйөм фекер йөрөтәләр икән.

Дәрестәрҙән тыш, фестивалдә ҡатнашыусыларҙы "Эльбрус буйы" милли паркына, нарзан сығанаҡтарына экскурсияға алып барҙылар. Канат юлдары буйлап өҫкә күтәрелеп, тауҙарҙың матурлығын бейектән ҡарарға мөмкинлек булды. Аҙаҡтан беҙ Тырныауз, Кенделен, Лашкута, Бедык, Үрге Баксан тигән ауылдарҙа сығыш яһаныҡ. Ундағы халыҡ та башҡорттар кеүек бик ихлас, ҡунаҡсыл икән, беҙҙе һәр ерҙә милли аш-һыуҙары - хычин, лакум һәм айран тотоп ҡаршы алды. Фестиваль "Балҡар халҡының яңынан тыуған көнө" байрамы - Азау яланында "Дуҫлыҡ гөлләмәһе" тип аталған сара менән тамамланды. Сарала ҡатнашыусыларҙың һәр беребеһе үҙенең милли костюмын кейеп, сәхнәлә ҡарасай-балҡар халыҡ бейеүе "Гоккан"ды бейене.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Конкурстарҙы яратмайым, сөнки мин үҙемде күрһәтер өсөн түгел, күңелемә оҡшаған өсөн бейейем," - тигәйне Рәфис әңгәмә барышында. Үҙе әйтмешләй, тәбиғәт балаһы булған башҡорт өсөн төрлө ялтырауыҡҡа, шау-шоуға ҡоролған конкурстарҙа ҡатнашып йөрөүе, бәлки, үҙ асылына ҡаршы барыу кеүек тойолалыр. Әммә тәбиғәт үҙе дәртле йөрәк, иҫ киткес һығылмалылыҡ, көйҙө тойоу һәләте биргән икән, һин уны, һис булмаһа, халҡыңды данлау өсөн булһа ла ҡулланырға тейешһеңдер. Ҡабарҙа-Балҡар тауҙарында Алжир, Греция, Төркиә, Мексика, Ҡытай, Үзбәкстан, Ҡырғыҙстан, Эстония, Ҡаҙағстан һәм Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән килгән коллективтар менән бер рәттән башҡорт бейеүен бейеп, милләтен балҡытып ҡайтҡан Рәфис Иҙрисов менән ошондай һығымтаға килдек.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

ҺЫЙЛАМАҒА ҺЫЙЫҢ БУЛҺЫН

### Банан бәлеше

Өс бананды турап, 1 стакан шәкәр ҡомо, 2 йомортҡа, 125 грамм аҡ май һәм шул уҡ күләмдә он һалып, бер аҙ һөт ҡойоп болғатырға ла микротулҡынлы мейестә 15 минут тирәһе бешереп алырға.

### Картуфтан көпшәләр

Бешкән картуфтың тышын әрсеп, ҡырғыстан үткәргәс, туҡылған йомортҡа, бер ҡалаҡ аҡ май, он, тоҙ ҡушып баҫырға. Таҡтаға он һибеп, бер сантиметр ҡалынлығында йәймә йәйеп, өҫтөнә аҡ май һөртөргә һәм сохари оно һибергә. Уны төрлө киҫәктәргә ҡырҡып, мейестә бешереп алырға.

**Бының өсөн: 500 грамм картуф, 100 грамм он, 2 ҡалаҡ аҡ май, 1 йомортҡа, бер нисә ҡалаҡ сохари оно, тоҙ кәрәк.**

### Картуфтан туҡмас

Әрселгән картуфты быуҙа бешереп алғас, ит үткәргес аша үткәреп, йомортҡа, он, тоҙ ҡушып баҫырға. Ошоно ҡайнап торған һурпаға сәтәкәй бармаҡ башындай итеп өҙөп-өҙөп төшөрөргә һәм өҫкә ҡалҡып сыҡҡансы бешереп алырға.

**Бының өсөн: 500 грамм картуф, 100 грамм он, 1 йомортҡа, тоҙ кәрәк.**

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АТАЙЫҢ ҺӨЙЛӘГӘНДӘ...

## шым ғына тор

Йәмғиәт ике синыф кешеләренән тора: берәүҙәренең ашарына бар, әммә аппетиттары юҡ; икенселәренең аппетиты бар, ашарына юҡ.

**(Н. Шамфор).**

Бөйөк эштәр башҡарыу өсөн бөйөк даһи булыу мотлаҡ түгел; кешеләрҙән өҫтөн булма, улар менән бергә бул.

**(Ш. Монтескье).**

Атаһы тороп, улы һөйләгәндән биҙ; әсәһе тороп, ҡыҙы һөйләгәндән биҙ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

"Ҡартаймайһың да инде!" тигән комплимент әйтәләрме? Тимәк, һин ҡартая башлағанһың икәненә шикләнмә.

**(У. Ирвинг).**

Маңлайыңда һырҙар булһа булһын, йөрәгеңдә һырҙар булмаһын. Рух ҡартайырға тейеш түгел.

**(Д. Гарфильд).**

Йәшлегең мөхәббәтһеҙ үтһә, ҡартлыҡта аҡыл ултырмаһа... ғүмерең бушҡа уҙған, тигән һүҙ.

**(Швед халыҡ мәҡәле).**

Йәшлек хаталар яһай, йәшлек менән ҡартлыҡ араһындағы осор ул хаталарға ҡаршы көрәшә, ҡартлыҡ ошо ике осор өсөн дә үкенес белдерә.

**(Б. Дизраэли).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер кеше Хәҡиҡәтте табырға ҡарар итә. Тәүҙә ул уны өйөндә эҙләй, шунан үҙе йәшәгән ҡаланы ҡыҙыра, һуңынан донъя буйлап сығып китә. Ярлылар йәшәгән ҡаласыҡтарға инеп сыға, байҙар йәшәгән һарайҙарҙа була, мәсеттәрҙән һәм сиркәүҙәрҙән эҙләй Хәҡиҡәтте, ләкин уны бер ҡайҙа ла таба алмай. Алыҫ-алыҫ бер илдә, тау башындағы бер бәләкәй йортта таба ул эҙләгәнен. "Бында Хәҡиҡәт юҡмы?" - тигән һорауына бер монах: "Эйе, Хәҡиҡәт бында йәшәй. Ана, Ул түшәктә юрған аҫтында ята. Юрғандың бер ситенән генә асып ҡара, күрерһең..." - тип яуаплай. Кеше шулай итә лә. Юрғандың бер ситен генә күтәреп ҡарай һәм...һушын юғалта. Юрған аҫтындағы Хәҡиҡәт шул тиклем ҡурҡыныс була. Кеше иҫенә килгәс, былай ти:" Хәҡиҡәт, мин һине эҙләп, донъяны урап сыҡтым. Халыҡҡа ни тип яуап бирермен, Хәҡиҡәт шул тиклем ҡурҡыныс, тиһәм, кем миңә ышаныр?" "Ә һин алдаш, - ти аҡрын ғына итеп Хәҡиҡәт, - ул саҡта һиңә барыһы ла ышаныр..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673

Тиражы - 6167
Заказ 1873